«Тюркскоязычная» гаплогруппа R1b продвигалась из Южной Сибири, где образовалась 16 тысяч лет назад, через территории средневолжской, самарской, хвалынской (в среднем течении Волги) и древнеямной («курганной») археологических культур и культурно-исторических общностей (8-6 тысяч лет назад и позднее; общий предок этнических русских гаплогруппы R1b1 жил 6775±830 лет назад), северного Казахстана (пример – ботайская культура, фиксируемая археологами 5700-5100 лет назад, на самом деле намного древнее), перешла через Кавказ в Анатолию (6000±800 л.н. по датировке гаплотипов современных кавказцев гаплогруппы R1b1b2), и через Ближний Восток (Ливан, 5300±700 л.н.; древние предки современных евреев, 5150±620 л.н.) и Северную Африку (берберы гаплогруппы R1b, 3875±670 л.н.) перешла на Пиренейский полуостров (3750±520 л.н., баски 3625±370 л.н.) и далее на Британские острова (в Ирландии 3800±380 и 3350±360 л.н. по разным популяциям) и в континентальную Европу (Фландрия, 4150±500 л.н., Швеция 4225±520 л.н.). Путь в континентальную Европу с Пиренеев – это путь и времена культуры колоколовидных кубков, предков пракельтов и праиталиков.

Параллельно следы древних носителей R1b прослеживаются на Балканах (4050±890 л.н.), отдельно в Словении (4050±540 л.н.), в Италии (4125±500 л.н.). Это – начало времен тюркских языков в Европе и исчезновения из Европы «пра-индоевропейской» гаплогруппы R1a1, которая заселяла Европу с 10 тыс. до н.э. Гаплогруппу R1a1 фактически спасло то, что 4800 лет назад, в начале 3-го тыс. до н.э., ее носители перешли из Европы на Русскую равнину, и заселили территории от Балтийского до Черного моря, 4500 л.н. они уже были на Кавказе, 3600 л.н. в Анатолии (по данным гаплотипов гаплогруппы R1a1 современной Анатолии). Тем временем на Русской равнине они прошли до Южного Урала и далее в Южную Сибирь примерно 4000 л.н., в те же времена основали андроновскую археологическую культуру, заселили Среднюю Азию (4000-3500 л.н.) и примерно 3500 л.н. частью перешли в Индию и Иран как арии, принеся туда арийские диалекты, что фактически замкнуло языковую связку с арийскими языками (R1a1) и привело к появлению индоевропейской семьи языков.

4500-4000 лет назад R1a1 исчезают из зарубежной (в нынешнем понятии) Европы, Европа становится тюркоязычной с прибытием носителей гаплогруппы R1b (начало 2-го тыс до н.э.), и это продолжается до середины 1-го тысячелетия до н.э. (3000-2500 лет назад), когда гаплогруппа R1a1 перезаселяет зарубежную Европу, и происходит обратная замена тюркских языков на индоевропейские. Такая языковая и гаплогруппная, или родовая (в терминах ДНК-генеалогии) чересполосица на Русской равнине, в Передней Азии и в Европе привела к неверным лингвистическим и археологическим концепциям типа «курганной культуры», где было перепутаны языки (постулирован «индоевропейский», когда

там был тюркский), направление движения («пра-индоевропейский» продвигался на восток, а не на запад, как тюркский, и как рассматривали творцы и сторонники «курганной культуры»), времена (пра-индоевропейский язык продвигался по Русской равнине в 3-м тыс. до н.э., древнеямная, она же «курганная» культуры рассматриваются в основном в период 4-3 тыс. до н.э.).

Подобное произошло и в отношении «анатолийской теории», в которой за «прародину индоевропейцев» было принято частное (закавказское) ответвление маршрута передвижения ариев, носителей гаплогруппы R1a1 на восток по Русской равнине. Это привело к принципиальному искажению и непониманию фундаментальной роли тюркских языков на Русской равнине (как минимум со времен 10 тысяч лет назад) и в Европе, на протяжении полутора тысяч лет (с начала 2-го тыс. до середины 1-го тыс до н.э.)» -- [Вестник Российской Академии ДНК-генеалогии. Том 3, № 1. 2010 январь. Российская Академия ДНК-генеалогии. А.К. Клёсов. Основная загадка во взаимоотношениях индоевропейской и тюркской языковых семей и попытка ее решения с помощью ДНК-генеалогии: соображения нелингвиста].

## Упрощенная схема происхождения народов

Историческая наука 20-го века в своем развитии достигла такого заметного уровня, что стало возможным определить происхождения народов даже на биологической основе. И тогда вдруг ученые с изумлением обнаружили весьма «курьезный» факт: такие кажущиеся сильно далекие друг от друга как в языковом так и географическом отношениях народы, какими являются русские и финны, имеют совершенно одинаковые ДНК, такое же положение у башкир и ряда западноевропейских народов, что показывает на их происхождение от одного и того же предка. Некоторые авторы на этой основе стали прямо утверждать, что русские произошли от финнов, а башкиры – от кельтов; но, мне кажется, дело обстоит совсем наоборот: угрофинская ветвь народов произошла от первичной урусской (русской), а западноевропейская – от усарганской (башкирской) фратрий человечества. В моей книге (сайт зигатсултанов.рф в отделе «файлы» Сочинения Том XI) приведены много данных по этой тематике, но они там изложены, кажется, в разбросе и порою доставляют некоторые трудности для понимания их простым читателем. Поэтому считаю нужным здесь исправить недочет и дать облегченное краткое изложение такой важной для нас проблемы.

И так, упрощенная схема происхождения народов.

Сперва были: Ас-Ар (Вода-Женщина – Земля-Мужчина), где Ас (Өç) понимался еще как Верх, Ар (Ур – яма) – Низ, что зафиксировано изображением на кафене (бинте-саване) мумии древнеегипетского фараона (хранится в Британском музее):



Здесь Женщина есть Небо, Мужчина – Земля.

Вода-Женщина (Ас) и Земля-Мужчина (Ар) якобы сочетались с другим объектом Кан (Көн – Солнце), в итоге получился первичный этноним человеческой породы левой фратрии: Ас-Ар-Кан – Асаркан/Усарган – оно также самоназвание современного башкирского рода Усарган; и часть того же этнонима Ас-Ар дает Сар/Сер – так назывались исторические тюрки-серы. Усарганцы-серы раннесредних веков славную свою историю изложили на селенгинском руническописьменном памятнике, и там же мы найдем названную первичную основу жизни Йер-Су (Земля-Вода):




**(1) үзә күк : тңры : срә : йғз : йр : ҡылнтуҡдә : кынрә : кысы : оғлы : ҡылнмс : кысы : оғлынтә : үзә : чүмпәм : Бомн ҡғн : ыстымы ҡғн : олрмш : олрпн : түрк : боднң : ылын : түрүсын : утоутә :бырмс : ынты : бырмс :**

(1) Өҫтә Күк : Тәңре, : аҫта Көрән Ер : ҡылынғанда : ике арала : кеше : улы : ҡылынмыш. : Кеше : улынан : өҫтә : әсәм-апам (текст авторы Юллыҡ-туғандың үгәй әсә-апаһы) ,: Быуман ҡаған, : Истәми ҡаған : ултырмыш. : Ултырып, : төрк[6] бөтөндөң (халҡының) : илен, : турыһын (ҡанунын) : тота : бирмеш : ине. : Бирмеш :

(1) Наверху Небо-Тенгри, внизу Зеленая Земля когда были сотворены, в промежутке этих двоих был сотворен человеческий сын. Выше человеческого сына – Ас-Аба (Сава – Врздух-Вода -- Небо), Быуман-каган (Солнце), Истеми-каган (Луна-Месяц) сидели...

Согласно прамифологии первичное человечество (“человеческий сын”) было разделено на два крыла-фратрию (будущие географические понятия

[6] Төрк – Тороҡ (Тора) тау хоҙайы Тәңрегә (фаллосҡа) табыныусы башҡорттар, улар менән 922 йылда Башҡортостан тупрағында ғәрәп илгиҙәре Ибн-Фаҙлан да осрашҡан.

Внутренний Башкорт и Внешний Башкорт): люди левой фратрии (Ас – носители ДНК R1а) считали себя происшедшими от Неба-Женщины (мифической старухи Янбики) через ее дочери – первопредки Шульган-матура (библейской Евы или шумерского Һульгамеша или римского Рема), а люди правой фратрии (Ар – носители ДНК R1б) считали себя происшедшими от Земли-Мужчины (мифического старика Янбирди) через его сына – первопредка Урал-батыра (библейского Адама или шумерского Энкиду или римского Ромула). В сексуальном плане названные первые занимали верхнее положение (матриархат), вторые – нижнее положение (патриархат). Понятие "жена-мать" на языке у первых называлась Асака (или ака), у вторых – Асана (или ана). В соответствии с этими небесное пространство у первых называлось Аса-Аба (Вода-Объект) – Асаба/Сава/Һауа (библейское Хава/Ева), у вторых – Ана-Аба/Анаба/Наба/Небо. Земля у первых называлась Ар/Ир/Ер, а у вторых – Асам-ал (ул) т.е. "Матери-Неба сын" – Асамал(а) – Замала/Земля...

Вода-Женщина (Ас) и Земля-Мужчина (Ар) якобы сочетались с Кан (Көн – Солнце), получился первичный этноним человеческой породы левой фратрии: Ас-Ар-Кан – Асаркан/Усарган, в то же время это самоназвание современного башкирского рода Усарган; и они же от того же но укороченного слова назывались Ас-Ар – Сар/Сер (исторические тюрки-серы).

Земля-Мужчина (Ар) сочетался с Водой-Женщиной (Ас), в результате получился первичный этноним человеческой породы правой фратрии Ар-Ас – Арас/Урыс/Рус, и еще в результате сочетания Ар-Ас с Ай (Луна-Месяц) получился Арасай/Расай/Россия...

В неизвестные нам далекие исторические времена часть предков наших на протяжении многих веков с двумя отдельными потоками переселились из Урала на Западную Европу: усарганская фратрия с ДНК R1а – на юго-западном, урусская фратрия с ДНК R1б на северо-западном направлениях (а ядро племени под названием «башкир» осталось как оберег на священном месте на Урале). На нижеследующем рисунке показаны пути следования названных двух первичных фратрий на Запад вплоть до Атлантического океана:



При том все люди тогда говорили на тюркском языке (Вестник Российской Академии ДНК-генеалогии. Том 3, № 1. 2010 январь. Российская Академия ДНК-генеалогии. А.К. Клёсов. Основная загадка во взаимоотношениях индоевропейской и тюркской языковых семей и попытка ее решения с помощью ДНК-генеалогии: соображения нелингвиста).

Таким образом выясняется: современный башкирский народ является неизменным аборигеном (коренным населением) Урала и единственным хранителем человеческих духовных ценностей со дня сотворения мира.

## Немец-баба нимә ти?

Евразияның төп этностарының тамырҙарын ҡыҫҡаса ғына юллап күрһәткән был сәхифәләрҙе урыҫ патриоттары ла, башҡорт нигилистары ла ҡабул итмәҫкә мөмкин. Әммә башҡорт авторы уйлап сығарған нәмә түгел был: бынан ике быуат ярым элгәре үк Германияның немец ғалимы ла тап ошолай иҫбатлаған бит. 1785 йылда Санкт-Петербургта урыҫ теленә тәржемәләп сығарылған мөһим китап бар (Иоганн Генрих Дримель. "Опыт исторического доказательства о происхождении россиян от араратцев[7]), уны күптәребеҙ белмәй; шуға күрә унан килтерелгән өҙөктө (текстағы аңлатма йөмләләре -- хәҙерге урыҫ ғалимдары Г.В. Носовский, А.Т. Фоменколарҙыҡы, ә йәйәләр эсендәге иҫкәртмәләр бән фәкирегеҙҙеке), оҙонораҡ булһа ла, ауырһынмай, ентекле уҡырға кәрәк, сөнки был шуға лайыҡлы:

Вкратце содержание этой небольшой немецкой книги можно передать в следующих словах. В начале всемирной истории стоит Ассирийское (уточняю: усерганско-башкирское. *Й.С.*) царство. Оно же, по утверждению Дримеля, — царство Скифов, оно же — царство Казаков, оно же — царство Гога и Магога. Оно же — РОССИЙСКОЕ (уточняю: Усерганско-Российское. – *Й.С.*) ЦАРСТВО. Библейский Нимврод был СКИФ, то есть РУССКИЙ. Так прямо Дримель и пишет! В XIII веке РУССКИЕ, — КОТОРЫХ (Т.Е. ВСЕХ ТЮРКСКИХ НАРОДОВ. – *Й.С.*) НА ЗАПАДЕ НАЗЫВАЛИ ТАТАРАМИ, — совершили нападение на Западную Европу. Память об этом хранят многочисленные географические названия, например, в Западной Германии. В качестве примера Дримель приводит название горы РИЗЕН между Богемией и Силезией. Дримель объясняет, что название РИЗЕН означает РУССКАЯ.

В заключение Дримель пишет. «Само слово РИС без сумнения СКИФСКОЕ, и через оное переведено название СКИФА... Говорят, что РИС — есть слово немецкое, но равно оно может быть и скифское же. НЕМЦЫ И СКИФЫ ИМЕЮТ МНОГИЕ ОБЩИЕ НАИМЕНОВАНИЯ. ПРИТОМ НЕМЦЫ И СКИФЫ БЫЛИ БРАТЬЯ. ПОСЕМУ РОССИЯНЕ СУТЬ РИСЫ, ГИГАНТЫ, СКИФЫ, САКИ, КУРДЫ, АРАРАТЦЫ» [261], С. 46-47.

Поразительно — с точки зрения современного читателя, но отнюдь не с точки зрения жителя Нюрнберга XVIII века, — что ДРИМЕЛЬ ГОВОРИТ О ТОЖДЕСТВЕ ТАТАР С РУССКИМИ, КАК О ЧЕМ-ТО САМО СОБОЙ РАЗУМЕЮЩЕМСЯ. Он даже не считает нужным приводить тут какие-либо доказательства. Как он это делает во многих других случаях. Для него это вещь самоочевидная! Важно понимать, что книга Дримеля была написана еще ДО ТОГО, как замечательные «русские ученые» Байер и Шлецер создали привычную нам сегодня теорию об ужасающем «татаро-монгольском иге» на Руси. Дримель попросту еще не знал об их великом открытии. И

---

[7] Арарат (Үр-Үр-тау) -- Башҡортостандағы изге Ҡуш-тауҙың йәки Имайҙың (Умайҙың) ләҡәптәренең береһе.

думал, по старинке, как и прочие немцы, что татары и русские (усерганцы-башкиры. *Й.С.*)— это одно и то же. А вот тот факт, что великий библейский Нимврод — тоже русский, Дримелю уже приходилось доказывать. Поскольку скалигеровская версия библейской истории к этому времени уже достаточно распространилась по Западной Европе.

А теперь мы просто приведем цитаты из книги Дримеля. Они говорят сами за себя.

Дримель начинает с того, что со ссылками на «античных» авторов доказывает, что первым народом после потопа были КУРДЫ (уточняю: Башкурды. *Й.С.*). Само имя которых, между прочим, явно происходит от имени ОРДА, ГОРДЫЙ. Итак, почему Курды=ордынцы были первым народом? Потому, отмечает Дримель, что современный КУРДИСТАН (Башкурдистан. *Й.С.*) — это часть АССИРИИ на географической карте. А средневековому хронисту было хорошо известно, что ПЕРВЫМ ЦАРСТВОМ НА ЗЕМЛЕ БЫЛО АССИРИЙСКОЕ (уточняю: УСЕРГАНСКОЕ. – *Й.С.)* ЦАРСТВО. Как мы постарались показать в этой книге, подлинный смысл этого утверждения состоит в том, что «Монгольская»=Великая, она же РУССКАЯ=АССИРИЙСКАЯ Империя, была первым охватившим весь тогдашний мир царством. И рассуждения немца Дримеля фактически подтверждают нашу реконструкцию, поскольку в дальнейшем он отождествляет БИБЛЕЙСКИХ АССИРИЙЦЕВ СО СКИФАМИ И С РУССКИМИ. Что касается расположения Ассирии, то здесь Дримель уже следует искаженным скалигеровским представлениям о географии, не понимая, что библейская Ассирия — это на самом деле Русь-Орда. Поэтому у него и получается, — как и отражено в заголовке его книги, — будто бы русские произошли от древних обитателей современной Месопотамии, Ассирии.

Дримель сообщает: «Страна сия, составляющая большею частию Ассирию, В СЕВЕРНОЙ части называется Адиабене... Об Адиабене далее пишет Страбон (Землеописание, кн. IX), что жители оные называются Сакоподы или Саки... Птоломей в Таблицах Асии отмечает, что Сакийская Скифия есть место, где остановился Ной... Солин в книге ХЫХ пишет, что Персы названы были Корсаками и сие название сложено из Корс+Сак, что означает Кордийские (уточняю: Башкордийские. -- *Й.С.*) Саки» [261], с. 26—27. К этим цитатам из «античных» авторов Дримель делает следующее многозначительное примечание: «Может сии — праотцы КАЗАКОВ» [261], с. 27. Таким образом, Дримель прямым текстом ОТОЖДЕСТВЛЯЕТ Скифов, «античных» Саков и Казаков.

Дримель продолжает. «Саки есть главнейший Скифский народ (Страбон, Землеописание, кн. XI)... Везде Саки есть часть Скифов (Исидор в «Отличительных свойствах», Ариан «О походах Александра Великого», кн. 3)» [261], с. 29. Примечание Дримеля по этому поводу таково. «Имя СКИФ (уточняю: скиф – от слова асак-аба – “волчица”. *Й.С.*) означает ЛОВЦА» [261 ], с. 29. «Неврод в Священном Писании называется ЛОВЦОМ... Слово ЛОВЕЦ в Греческой Библии переведено через Гиганта (Исполина); другие же народы выражают сие через слово СКИФ... Следовательно, ЛОВЕЦ, КУРДЫ, ГИГАНТ и СКИФ суть тожде значащия слова... в Священном Писании слово ЛОВЕЦ (т.е. “волчица, волк” или “курд”. – *Й.С.*) означает имя народное» [261], с. 30. Таким образом, здесь Дримель доказывает, что библейский царь Нимврод, основавший первое царство на земле после потопа, был по

происхождению СКИФ. Что в современной Библии переведено по недоразумению словом ЛОВЕЦ. Дальше, как мы увидим, Дримель отождествит Скифов с Русскими.

«К названиям СКИФОВ принадлежат имена ГОГ и МАГОГ» [261], с. 33. Обсуждая известное место из пророка Иезекииля, где говорится о Гоге и Магоге, Дримель пишет следующее: «70 толковы так передают это место: «Утвердишеся лицо твое на ГОГА, КНЯЗЯ РОСЬ, МОСОХА И ФОВЕЛЯ»... Так как Магог здесь переведено как Рось — название народа, которое толковникам должно было быть известно, то они (то есть Гог и Магог — Авт.) были СКИФЫ, ибо МАГОГ, МОСОХ, ФОВЕЛЬ, ГОМЕР, ФАРГАМАН были СКИФЫ, как первые северные народы (Моисей, книга I, гл. X 2. 3), большая часть которых в то время, к которому сии слова пророческие относятся, назывались СКИФАМИ... Писатель Иудейских Древностей, Иосиф Флавий именно сказует, что ГОГ и МАГОГ означает СКИФОВ (книга VII, гл. 1)... Стромберг, живший между потомками Скифов, и весьма достоверный писатель, пишет (в Описании его Европы и Асии, с. 42), что СКИФЫ сами себя называют ГУГ и ГИУГ, и что приложение МА означает у них Восток, следовательно, ГОГ и ГИУГ есть одно и то же, а МАГОГ — СКИФЫ ВОСТОЧНЫЕ» [261], с. 34—36.

Далее Дримель доказывает, опять-таки со ссылками на «античных» и средневековых писателей, что СКИФЫ — ЭТО ТО ЖЕ САМОЕ, ЧТО ПЕРСЫ (т.е. буре-аса "волчица" – бурсе – фарсе – перс. – *Й.С.*). «В Свиде (средневековый словарь — Авт.) под словом МАГИЯ познаем мы, что ПЕРСЫ от самых их единоземцев называются МАГОГ и НАГУЗЕЙ (Ногайцы? — Авт.)... ОТЕЧЕСТВО СКИФОВ ЕСТЬ ВЕРХНЯЯ АССИРИЯ. Персия же лежит к востоку... Но никакого народа нельзя с большим правом признать за СКИФОВ ВОСТОЧНЫХ, как ПЕРСОВ... Ходоллогомор царь Елимский или Перский (Бытие, гл. XIV) назван царем СКИФСКИМ (в толкованиях своих на X главу Бытия), следовательно, Гог, МАГОГ, ГИУГ | СУТЬ СКИФЫ» [261], с. 37—38.

Может показаться, что здесь речь идет о восточных народах, всегда живших на территории современной Персии. Что, в общем-то, не очень противоречит скалигеровской истории. Однако в дальнейшем Дримель доказывает, что ***от Скифов произошли русские и немцы.*** Эти утверждения Дримеля, — который, обратим внимание читателя, — сам был НЕМЦЕМ, конечно, никак не укладываются в рамки привычной нам сегодня скалигеровской истории. Но прекрасно объясняются нашей реконструкцией. Согласно которой, библейская Ассирия, она же страна Гога и Магога, она же Персия, — это средневековая Русь-Орда. А немцы в значительной степени — потомки славян, вышедших из Руси-Орды во время великого = «монгольского» завоевания.

Цитируем Дримеля дальше. «Праотцы Немцев, то Скифами (Плиний в Естественной Истории, кн. IV, глава 25), то Гетами, Кельтами, Аллеманами, Франками, Германцами прозывались... ИАФЕТ есть Гигант. В Сарматской Летописи именуется он ГИГАНТОМ. В Александрийской же — СКИФОМ... Немецкие народы (Гудлингиан, гл. 1) выражают Греческого «Гиганта» через РИЗЕН (Великан)... в Священном Писании упоминаются народы, имеющие чрезвычайный рост, храбрость и крепость телесную, как то: Нефаимы, Емимы, Енаккимы, которые в Немецком переводе названы РИЗАМИ... Норвежские и Датские летописи сказывают, что КМ (Риси) — народ при Балтийском море, заключивший дружественный союз с Норманами» [261], с. 39, 42.

И далее Дримель прямым текстом пишет: «РИСЫ — СУТЬ РОССИЯНЕ» [261], с. 43. «Название РУСЬ есть латинское, РОСЫ — греческое. (О самом сем же народе упоминают Греческие писатели, как о Скифском: в 10—13 столетиях Кедрен в Сокращенной Истории, с. 453 [пишет] «***Росы суть поколение Скифов***, занимающее северную часть Тавра). А собственное их имя РЕЙСЫ (РОССИЯНЕ)... Немцы же выговаривали их как Ризы» [261], с. 42—43.

«Посему я вопрошаю, — продолжает Дримель, — откуда между Богемиею и Шлезиею (Силезией — Авт.) гора РИЗЕН? Иной причины сему дать не можно кроме сей, ЧТО было НАШЕСТВИЕ РИСОВ ИЛИ РУСОВ, ПОЧИТАЕМЫХ ТАТАРАМИ; которое неприязненное и печальное нападение на Шлезию случилось в 13 столетии» [261], с. 45.

Вот так, мимоходом, Дримель упоминает о татаро-монгольском нашествии на Западную Европу, называя его РУССКИМ и даже не подозревая, насколько сильно он нарушает будущее соглашение историков никогда не вспоминать о том, что РУССКИХ на Западе называли ТАТАРАМИ. и что Орда колонизировала Запад.

И далее. «Сии РИСЫ, РОСЫ или РЕЙСЫ от писателей всех времен почитаемы за народ СКИФСКИЙ (Кедрен)» [261], с. 46.

Урыҫтар ҙа, этнос булараҡ, әгәр үҙҙәренең башҡорт-төрки тамырынан саталанып сыҡҡан сағыштырмаса бик йәш халыҡ икәнлектәрен төшөнөп-танымаһалар, уңға-һулға һуғылып, тарих шырлығында аҙашып йөрөүҙән арынмаясаҡтар. Был бөйөк милләттең шуны яҡшы аңлай биргән бәғзе бер инсандары, кәрәкмәгән ялған ғорурлыҡтарынан ваз кисеп, ***урыҫ-төрки*** кендектәренең берешлеген раҫлай башланылар инде (Г.В. Носовский. А.Т. Фоменко. Новая хронология Руси, томы I, II. М. -- 2004). Инш-Алла, донъялар үҙ ҡалыбына ултырыр!

## Кирилл-баба кириллицаһы ҡасан тыуған?

Тарих фәненән хәбәрдар һәр кем, әлбиттә: “Туғыҙынсы быуатта!” тип бирәгәй яуап бирәсәк. Дөрөҫ был.

Ләкин Чудинов әфәндегә бирәгәйлек килешмәй: уның өсөн ошо бер үк кириллица икеләтә -- IX быуатта ла, бынан 200 000 йыл элгәре лә берҙәй барлыҡҡа килгән, шунһыҙ һис мөмкин түгел! Сөнки фәйләсүф тылсымлы урыҫ һүҙенең ғәзиз урыҫ ауыҙынан ике йөҙ мең йыл элгәре үк ҡанатланып осоуын раҫланы бит. Ә һауаға осҡан һүҙҙе тотоп алып илгә баҡтыртып булмай -- ул ҡош түгел. Һүҙ йораты алыҫ-алыҫ киләсәктең чудиновтарына юҫыҡланып , заманаһының ниндәйҙер бер ташына, ҡаяһына, һис юғында тупрағына йәки күктәге болотона булһа ла ҡунырға тейеш, ана шунда уның сихри эҙҙәре, боронғо алхимиктар хыялындағы тылсымлы “фәйләсүф ташы”ндай, ябай бәндәнең зиһене-аҡылы етмәҫлек, ә патриот-фәйләсүфкә генә ап-асыҡ күренерлек шаҡырайған аҫыл кириллицаға -- тылсымлы асҡысҡа әүерелә, шуның ярҙамында ваҡыт һәм арауыҡ йоҙаҡтары күҙ асып йомғансы асыла...

Рәсәй ғалимдарының үҙҙәренән үк яҡшы билдәле булыуынса, IX быуатта боронғо Башҡортостандың халыҡ-ара сауҙа үҙәге Болғарҙа тыуып үҫкән һәм, христиан диненә күсеп, Кирилл исемләнгән болғар-башҡорт, -- болғарҙың башҡорт икәнлеген урыҫтың атаҡлы телсе ғалимы раҫлай (Н.А. Баскаков. Русские фамилии тюркского происхождения. М. -- 1979; 249-ынсы бит), -- бына шул аҫаба башҡорт тоҡомо күҙе күнеккән төрки әлифбаның ырындарынан Көнбайыш Европа халыҡтары ла таный алырлыҡ хәрефтәр эшләп бирә, аҙаҡ "кириллица" тип аталған шул хәрефтәр ярҙамында грек теленән Библия тәржемә ҡылына -- төрки-славяндарҙың, шул иҫәптән урыҫтарҙың, ниһайәт, мәғрифәт нурына күҙҙәре асыла (Мурад Аджи. Азиатская Европа. М. -- 2006; 53 -- 56-сы биттәр). Ләкин Патриот күңеле быны кисерә алмай, донъяларҙы яңғыратып: **"Я МОГУ С ПОЛНЫМ ОСНОВАНИЕМ УТВЕРЖДАТЬ, ЧТО ЗА МНОГО ТЫСЯЧ ЛЕТ ДО КИРИЛЛА И МЕФОДИЯ НАШИ ПРЕДКИ ПИСАЛИ ТАК, КАК МЫ ПИШЕМ С ВАМИ!"** -- тип оранлай ҙа үҙенең төп ысулы менән шаҡ-ҡатырғыс асыш та яһап ташлай. Был ысул -- боронғо этерҫәк-һарт-этруск төрки-башҡорттарының хәҙерге Италия ерендәге һүрәт-ҡомартҡыларындағы уңдан һулға табан уҡылмалы яҙыуҙарын, күҙ ҙә йоммайынса, "кириллица" тип иғлан ҡылып, уларҙы йүнәлештәренең киреһенсә, тап хәҙергесә, һулдан уңға ҡарай уҡыу һәм кеше һүрәттәрендәге сәс-төктәр сеймәлешен, кейем йөй-һыҙаттарын да башҡа һис кем дә күрә-таный алмаған кириллица-яҙыуға әйләндереү (һүр.3). Һөҙөмтәлә яҙыуҙарҙағы 1. Learun (Оло-яу-оран -- һуғыш хоҙайы), 2. Iriziz (Эре-сәс), 3. Srizіҙa (Сары-йөзиҙә -- Аҡ-йөҙлиҙә -- боронғо телебеҙҙә "сары" -- аҡ тигән һүҙ), 4. Mvnle (Мәнеле, боронғоса Мәүәнеле -- күңелендә Бесәй-хоҙайлы), 5. Turan (этерҫәк башҡорттарында бөтә тереклектең хоҙайы, хәҙерге башҡортса ла Туран) тигән төрки исемдәр Патриотыбыҙ тарафынан ошолай әүермәнләнә: 1. Все ровно. 2. Исидиш (изыйдешь). 3. Сдквиой А, т.е. С дивкой и. 4. Женлей (Женской данью). Иными словами, главный персонаж, пойдя куда-то, "все равно назад придет с завоеванной данью в виде девушек и женщин".



Һүр. 3. Этерсәк (этруск) бронза көҙгөһөндәге һүрәт

Беспредельное воображение автора, не ограничиваясь видимыми этрусскими буквами, начинает "читать" далее никому из простых смертных невидимые изречения:

"На голове у юноши начертано: "Е славянин". Следовательно, славянин куда-то отправлялся в поход. У левой девушки на голове написано: "Этруска на всех". Я это понимаю как утверждение – **этрусская женщина на всех континентах.** Иными словами, куда бы славянин не пошел, отовсюду в качестве дани он может увести этрусскую девушку или женщину. Справа от юноши, сзади всех стоит девушка, на чьей голове начертано **Крита вояка вольный,** а на шее – **А Рима.** Таким образом, эта девушка является **свободным воином Крита и Рима...**

Женщина справа от юноши, изображенная в полный рост, имеет курчавые волосы, надпись на которых можно прочитать только при обращении их в цвете. Тогда читаются два слова **Мали из.** Продолжение написано в виде ожерелья, где вторая и третья буква написаны в виде лигатуры и перевернуты на 180 градусов. Так читается слово **Африка.** Следовательно, перед нами **Мали из Африки.** Складки на ее груди читаются как слово **успела.** Вероятно, эта западноафриканская страна примерно в 500 *км* от Дакара **успела** быть открытой славянами. Стоящая за ней женщина, как можно понять из надписи на ее голове – это **Китай волной,** то есть, **Китай вольный.** Тем самым на данном зеркале подчеркивается размах славянских контактов на юге: от Мали в западной Африке до Китая на Дальном Востоке...

Последняя женщина сидит, и на ее голове читаются слова **То Русь Этрусии.** Из этого следует, что послала всех этрусков Русь. Она единственная, кого не берет в качестве дани славянин"...

Этерçәк-этруск яҙыуҙары донъяның бөтә белгестәренә таныш, шуға күрә был яңы асышҡа йә иғтибар итмәйҙәр, йә оторо баһалайҙар. Шуға күрә Чудинов әфәнде кириллицаның этрусктарҙан да элгәре -- ике йөҙ мең йыл элек үк Ер шарының һәр аҙымына мөһөрләнеүен баҙығыраҡ миçалдарҙа иçбатларға яçкына. Билдәле булыуынса, әҙәм балаһы тәүге яҙма хәрефтәрен тыуҙырыуҙы үҙенең тотемы (ырыу символы) һаналмыш йәнлектәрҙең, кешеләрҙең кәүҙәләрен, аяҡ-ҡулдарын һәм башҡа ағзаларын һүрәтләүҙән башлаған һәм иң дөйөм тотем булып **бабан-ат** (бабанан тыуған ата, тигән һүҙ, хәҙергесә *ата-баба)* һаналған, шунан аҙаҡ ***маман-ат -- мамонт*** атамаһы барлыҡҡа килгән (был "баба" Шүлгәнташ мәмерйәһендә һынландырылған). Бабан-атты (мамонтты), ололап, ***олата*** тип тә әйткәндәр һәм шул "олата"ның образын ҡая биттәренә, уның арҡа һыҙаттары буйынса, **М** рәүешле сыйғыслай башлағандар һәм был сыйым ("олата") ырынлы яҙма әлифбаһына, шул "олата" һүҙенән, ***"лт"***, ә этерçәк-этрусктарҙыҡына -- ***"э"***, Көнбайыш яҙмаһы латиницаға ***"м"*** булып -- килеп кергән. Бабанат (мамонт) кәүҙәһенең ҡойроҡло буйы (корпусы) һүрәтенән -- ҡойроҡло түңрәк ***"б"*** ("бй" -- бой йәки буй) һәм түңәрәге өçкә ҡуйылған ***j*** (й), ҡорһаҡ һыҙығы тоташтырған ике һонынан ("һн" -- һон йәки һын) латиницалағы ***Н*** ("h") һәм кириллицаға алынмыш ***Н*** ("н") хәрефтәре хасил. Ә "бй"-"һн" иһә әлегәсә башҡорт телендә "буй-һын" килеш әйтелеп йөрөй. Ошо хәлде, моғайын, яҡшы белгән В.А. Чудинов "мамонт" һүҙен тик урыçтыҡы һанап, йәнлектең баяғы һыҙаттарын һүрәтләүсе символдарҙы тәүбаштан уҡ саф урыçтың бынан ике йөҙ мең йылдар элек үк киң ҡулланылған яҙмаһындағы кириллица хәрефтәре тип яр һала, шулай уҡ мамонттың тәнендәге йөн төктәренән дә кириллица менән яҙылған **"РУС", "ЯРОВА РУС"** һәм башҡа һүҙҙәрҙе уҡый (һүр.4).



Һүр.4. Мамонт йөндәрендәге кириллица

Хәйер, күңел күҙһеҙҙәрҙе арбау өсөндөр, чудиновса уҡыу һәләткәйе һәр кемгә лә бирелмәүе фәйләсуфтәрсә иçкәртелә:

***<u>Надписи бывают не только явные, то есть, хорошо заметные и выглядящие именно как надписи, но и неявные – несимметричный орнамент,</u>***

***детали рисунка, специально выделенные его автором, мелкие и малоконтрастные надписи, наконец, светлые на тёмном фоне (они обычно воспринимаются как блики и не принимаются во внимание). Это необычайно расширило число предметов, на которые нанесены надписи, так что теперь их не приходилось выуживать, перелопачивая горы археологической литературы – они пошли сплошным массивом... я обнаружил существование и всем нам привычной кирилловской письменности в тех же бесконечно далёких от нас эпохах.*** -- Был -- уның ысулы. “Валерий Алексеевичҡа күктә йөҙгән болот йөйҙәренән дә кириллица күренә”, -- тип йылмая коллегалары...

Донъя ғалимдары бәйгеһендә үҙ тайын уҙҙырта алмағас, тынғыһыҙ йән мөғжизәле кириллицаны йоморо башлылар дәүләте һаналмыш Израиль артефакттарынан таба:

Чудесный дар всевидения Чудинова проявился особенно ярко в его сенсационном сообщении “Древнейший славянский текст на территории Евразии”, где он подверг чудесному исследованию статуэтку из Брехат-Рам (Израиль), датированной специалистами эпохой между 800 и 233 тысячи лет тому назад и увидел ***на гладком пустом месте*** объекта “надписи” на кириллице и прочитал их на почти современном русском языке:

“Только жир, жирное тело. То коровы утешить – имай! Е... (то есть, соверши половой акт. – З.С.) на святках – ана ожидает хвуя (то есть, фаллоса. – З.С.). Рази в самый низ. Насилуй их, сруби и суди их! Жирнухам и хвуй ниян, кусая их вульву (то есть, женское детородное место. – З.С.), язя родные путя! Обмани их и родовые рунови минуй их! Мой хвуй вынимал вырубя им кишки, укусив их сильно в их жирную вульву и жир! Перунова игра из игр удалого ярила. Сим жиром умножит жуть зимня хлева и жижу окорока и лап сего тела – склада жира. Мастерская храма “Макожи, руны родовы Руси руновой”... При том чудесник выдуманное им самим зверское отношение самца к своей папртнерше оправдывает классовой ненавистью мужчин к ожиревшим от мироедства женщинам-эксплуотаторшам. Спрашивается, для чего понадобилась ему дикая фантазия? Воспаленный разум его может прямо привести неискушенного читателя к мысли, по которому следует, что библейская “земля обетованная” со дня сотворения мира принадлежала и принадлежит не кому-нибудь другому, а именно славянам – вот новая головоломная проблема для истинных сыновей Израэля!..

## Атлантида, Арҡайым һәм тылсымлы “Розо ташы”



**5.Р. Меркатор**

Донъя халыҡтары мифологияларында танылған берҙәйлек бар: бөтәһе лә донъяларҙың төп-үҙәге, йәғни боронғо Атлантида иле атланттарының (арийҙарҙың) икенсе тәүтөйәге итеп Рифей-Уралды күрһәтә. Ә беренсе төйәге, имеш, Арктика үҙәгендәге ҡитға булған (һүр.4. Р. Меркатор картаһы, 1595 йыл), ул һыу төбөнә сүккәндән һуң, халҡы Уралға күсенгән. Чудинов иһә башҡорт-төрки мыжғыған сал Уралдан һырт

ҡайырып, үҙе атамыш шул “Аркторусь” ҡитғаһынан арийҙар илен “сап-саф урыҫ” ерлегенә -- Ҡул (Кольский) ярымутрауына күсереп, матбуғатта ҡыҙыҡлы ғына мәҡәләләр сығарһа ла, күпселектең иғтибарын яуламай. Хатта Задорновҡа тиклем ҡарашын ситкә бороп, ныҡлы таянысты Уралдан эҙләй:

-- Западные и наши прозападные ученые справедливо задают вопрос: где доказательства, что этот высокодуховный народ существовал на территории России? Долгое время доказательств было недостаточно. Но в 80-е годы на Южном Урале начали строить гидроэлектростанцию. И вдруг из-под земли, как в сказке, начали проявляться развалины целых городов... Главному городу, который удалось восстановить практически до фундамента каждого дома, 2500 лет до нашей эры! То есть этот город был построен еще до строительства египетских пирамид! И в каждом доме печь по отливке бронзы! А ведь в Грецию, согласно традиционным академическим знаниям, бронза попала только во втором тысячелетии до нашей эры. Я был на раскопках этого города. Он называется ***Аркаим...***

Был дөрөҫ һәм дөрөҫлөк йөҙ процентҡа тулыр ине, әгәр ҙә ки... зыялы юморисыбыҙ ***төрки*** нигеҙлекте таныһа. Сөнки төрки-башҡорт халҡының хәтере генә тиҫтәләгән быуаттар буйынса Арҡайым исемен юйылдыртмай һаҡлап килгән -- Арҡайым харабалары эргәһендәге изге тауҙы сал-боронғонан уҡ Арҡайым тип атап йөрөтә, урыҫ халҡының хәтерендә иһә был бөтөнләй юҡ. Уның ҡарауы Скандинавия халыҡтары сагаһында Арҡайым (Архейм) ауыҙ тултырып телгә алынған:

Хлед родился
в *гуннской* земле...
Хлед с востока,
наследник Хейдерека,
в ***Архейм***, к жилищу
*готов* приехал...

(Беовульф. Старшая Эдда. Песнь о нибелунгах. М. -- 1975, стр.350)

Өҫтәрәк мәғлүмәт биргәйнек: бында аталған “гунн”дар -- бәжәнәк-башҡорттар, ә “гот”тар -- үҫәргән-ҡаңғылар... Швеция, Норвегия, Голландия, Дания, Саксония (Германия), Англия халыҡтары бик боронғо замандарҙа Үр-Өфө (Рифей) тигән Хоҙайҙар төйәгенән (Бөйөк Скифиянан), ә тәғәйенерәк әйткәндә, Арҡайымлы ҡалалар иленән (Гардариканан) күсенеп килеүҙәре, ә иң мөһиме -- ***төрки телдә*** һөйләшеүҙәре тураһында боронғо швед бабалар яҙып ҡалдырған (Е.А. Мельникова. Древне-Скандинавские географические сочинения. М. -- 1986; 53, 95 -- 96, 98-енсе биттәр).




һүр.6. В. Путенихин һыҙмаһы




һүр.7. В. Путенихин һыҙмаһы

Хаталарҙы төҙәтергә *лә*, үҙебеҙ хаҡында ауыҙ тултырып һөйләргә *лә* тартынмайыҡ: башҡорт халҡы донъялар үҙәге Уралдың алтын бағанаһы, тотҡаһы булып тора. Кешелек донъяһының бишеге Уралда икәнлеген донъя ғалимдары таный һәм яҙа; мәҫәлән, боронғо (1595 й.) атаҡлы картограф Рудольф Меркатор үҙенең баяғы картаһында (һүр.4) донъяларҙың үҙәген, сатраш дүрт йылғалы ҡоро ер ҡитғаһын, саҡ ҡына көньяҡтараҡ икәнлеген шәйләп еткермәйенсә, Төньяҡ ҡотопҡа урынлаштырһа, хәҙерге Рәсәй ғалимы В.П. Путенихын иһә шул төп-үҙәктең ғәмәли урыны Уралда -- әлеге Башҡортостан тупрағында икәнлеген билдәләй (һүр.5). *Ул*, үҙе урыҫ кешеһе булараҡ, китабының шул темаға бағышланған бүлеген "Как предки русов обживали Урал" тип атаһа *ла*, ғөмүми өҫтөнлөктө славяндарға бирергә тырышһа *ла*, хаҡиҡәттең ҡасан да бер морон төртөрөн, кире ҡағылғыһыҙлығын шәйләп, буғай, кешелек донъяһының төп-үҙәгенә ***башҡортто*** ҡуйырға мәжбүр (һүр.6) һәм был дөрөҫ тә: ***"Слово Башкирия может быть переведено на современный русский язык только как — главная мужская страна, или главная Ирия, а БАШКИРЫ — это головные, главные Иры (ИР — мужчина-тюрк.)"...*** -- В. Путенихин. Тайны Аркаима. Наследие древних ариев. Ростов-на-Дону, 2008, стр. 120.

Әммә беҙҙең Фиҙакәрйән һис кенә *лә* ятып тынмай: "Ҡул" ("Кольский") фаразы *ла* донъяла яҡлау тапмағас, йәһәт-яңы тәғлимәтен әтмәләй -- Төньяҡ ҡотоптағы "Арктурусь" ҡитғаһынан "рус"тар Америка ҡитғаһына күсенгән, аҙаҡ бөтә Ер шарын иңләйәсәк кириллицалы бөйөк урыҫ цивилизацияһы тәүбашлап шунда яралған. Күрәҙәсенең Төньяҡ Боҙло океан аша йүнәлтелгән лазерҙай үткер аҡыл-зиһене тәьҫирендә Америка ҡитғаһында **"МЫ С ЯРА РУСИ"** тип яҙылған сал-боронғо кириллицалы "Розот ташы" *ла* табыла, кириллицалы фотолары киң интернет селтәре аша Рәсәйҙән тороп бөтә донъяға таратыла, ғәзиз табыш

шауҡымынан иҫәңгерәгән хәсис Көнбайыш ялсылары, ҡапыл иҫтәрен йыйып, дәлилле ташты үҙ күҙҙәре менән күреүҙе, тотоп ҡарауҙы талап ҡыла, тик... урыҫ патриоттарының һәр аҙымына аяҡ салырға маташыусы яуыз Көнбайыш та йоҡлап ятмай, буғай: күҙ ҡараһындай ҡурсалауға лайыҡлы артефактты, “Розот ташы”н, имеш, саң-соңдарын йыуыу һылтауы менән кислотаға сумырып юҡ ҡылалар.

Шулай итеп, фәйләсүфтең “фәйләсүф ташы” күҙ асып-йомғансы һабын ҡыуығылай һытылып, донъяларҙы тетрәтеп-шаулатырға, тарихтарҙы өр-яңынан яҙҙыртырға тейешле сенсация ла, урыҫ туғандарҙың үҙҙәре әйтмешләй, һыу битенә һәнәк менән яҙылған булып сыҡты...

## “Цивилизаторҙар” һәм “ҡырағайҙар”




**Һүр. 8. Телдәр шәжәрәһе (проф. Ж.Ғ. Кейекбаев төҙөгән)**

Кешелек донъяһы тарихының бик боронғо сәхифәләрен аҡтарыусы ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә башҡорт тигән нәҫел-нәсәбә, ғәҙәттә, хатта телгә лә алынмаҫлыҡ булмаған-буш урындай, юҡка тиңләп ҡалдырыла; Ер шарындағы быуаттар ғына түгел, дәүерҙәр менән иҫәпләнеүсе уның ҡаҙаныштары, ҡомартҡылары ниндәйҙер бер әкиәти *"Иран телләләр"*ҙеке йәғни һинд-европалыларҙыҡы итеп бәхәслекһеҙ бер ауыҙҙан раҫлана. Этнографтар тиһегеҙме, археологтар тиһегеҙме, әйтәйек, бынан кәмендә мең йыл элекке берәй бөйөк мәҙәниәткә осраһа, уның кешелек донъяһы тарихындағы бөйөк әһәмиәтен күреп тетрәнһә, саҡ ҡына ла икеләнмәй, *"Иран телләләр"* мәҙәниәте, ә уның эйәләре *"Иран телендә һөйләшкән Һинд-европалылар"* тигән әҙер мөһөрҙө сәпәй ҙә ҡуя, әйтерһең, гүрҙән ҡаҙып алынған йәнһеҙ-телһеҙ ҡыу һөлдә йәки төймә менән түгел, ә теп-тере боронғо кеше менән күҙмә-күҙ осрашып һөйләшә лә уның *"Иран телле Һинд-европалы"* икәнлеген уның ауыҙынан сыҡҡан һүҙҙәренән үҙ ҡолағы менән ишетеп билдәләй. Ә ни өсөн, хатта төптө тел белгестәре булмаған эшем эйәләре лә, "ғилми" хеҙмәттәрендә, барыһынан элек, *телгә* сат йәбешеп яталар, ҡыу һөйәктәргә тиклем уларҙың эйәләренең *телен* билдәләгес мөһөр һуғырға ашҡыналар һуң? Сөнки үҙҙәре лә тап шул Һинд-европалы булған, йәки, Урал-Алтайлы булып та, шул баяғы Һинд-европалы *"өлкән ағай"*ҙарына ялланып тоғро хәҙмәт иткән был авторҙарға боронғо бөйөк мәҙәниәттең ҡаҙаныштарын уның бөгөнгө *мираҫсыһына (этносҡа)* дәғүәлекһеҙ ҡылып беркетергә кәрәк, ә "...этногенетик хәлдәрҙе өйрәнеүҙә *тел иң ышаныслы этник индикатор булып тора. Тел — берҙән-бер этник критерий ул"* (А. Барта). Ләкин ниңә шул ҡәҙәре лә ҡәҙерле дөйөм сараға — тарих фәненең көллө тармаҡтарын да ҡотҡарғыс "әжәл

дарыуы"на әүерелдерелгән был *"Иран тел"*, ә ниңә түгел "төрки тел" йә "ҡытай тел"? Бик ябай аңлашыла: *"Иран тел"* тимәк — бөгөнгө *Һинд-европа* телдәр ғаиләһе, тимәк; ә Һинд-европа телдәр ғаиләһендә күмәкләп донъяла өҫтөнлөк ҡылыусы урыҫ та, инглиз да, немец та, француз да тулы хоҡуҡлы ағза; улар үҙҙәрен генә донъя мәҙәниәтен, цивилизацияһын ҡороусылар (цивилизаторҙар) итеп иҫәпләй, ә төркиҙәрҙе һәм башҡаларҙы ни бары тик "цивилизатор ағай" ҡулына ғына тилмереп ҡарап тороусы эшлекһеҙ ҡырағайҙар һанай. Ошо сиргә һабышмаған һирәк зирәктәр араһынан урыҫ ғалимы Н.А. Ерофеевтың билдәләүенсә, европоцентризмда донъяны танып белеүҙең сикләнгәнлеге һәм тарлығы сағылды. Йәғни Европала XIX быуаттан алып өҫтөнлөк иткән "прогресс концепцияһы" буйынса, донъяның бөтә халыҡтары, имеш, йыйыны бергә пирамида рәүешен тәшкил итәләр: пирамиданың иң өҫтөндә Европа урынлашҡан ("прогресс"), ә аҫта — артта ҡалмыш һәм тәүтормош халыҡтары ("ҡырағайҙар")... Һуңғы ике йөҙ йыл буйынса донъяның бөтә фәндәре лә ана шул "прогрессылар" ҡулында булды, "мәҙәниәтле Европалылар" һәм "ҡырағай азиаттар" тураһындағы европоцентризм вирустары, расизмдың бер күренеше булараҡ, кешеләрҙең мейеләренә тынҡыслап тултырылды, был сир хатта әлеге "ҡырағай азиаттар", шул иҫәптән башҡорт ғалимдарының да, аҡыл шүрлектәрен миңрәүләтеп ояланы — "Иран телле"ләр һәм "телһеҙ"ҙәр тураһында Мәскәүҙән тороп ҡөҙрәтле "өлкән аға"лары ни әйтһә, тутыйғоштай, былары шуны ләпелдәшеп ҡабатлай, гәрсә баштары өҫтөндә, ғәҙел тәҡдир балтаһылай, үҙҙәренең үк икенсе бер абруйлы коллегаһы о. Шрадерҙың киҫәтеүе аҫылынып торһа ла: һис бер "ҡыу баш һөйәге лә, ҡылыс та, балсыҡ көршәк тә уларҙың элекке эйәләренең Һинд-европамы йәки башҡа телдәрҙеңме берлегенә ҡарағанлығының шаһиты була алмай" — "Иран телле" тип тамғаланған аҫыл һөйәк тә, көтөлмәгәнсә, "ҡырағай төрки" булыуы бик ихтимал. Хәйер, кеҫәләрендә башҡорт паспорты йөрөткән меҫкен ғалимдарыбыҙҙың хәлен аңларға ла була: улар бит, бөтәһе лә тип әйтерлек, Һинд-европа телле һәм европоцентризм ҡарашлы олпат-олпат остаздарының ус ялаусы шәкерттәре — остаз һүҙенән сыҡһаң, ус ялатмаясаҡтар (диссертация яҡлауҙан, хатта яҡланған ғилми дәрәжәңдән дә ҡолаҡ ҡағыуың бик ихтимал). Шуға күрәләр ҙә башҡорт тарихы әлегәсә үҙенең бабалар даны-ҡаны һеңгән хаҡ-булмышынса түгел, ә "өлкән ағай" күрһәтеүенсә йәтешләп яҙыла бирә, үҙ тарихына төкөрөп ҡараусы нигилистарҙы, дипломлы ҡара наҙандарҙы үрсетә.Башҡортостан республикаһы флагының төҫтәрен һәм ундағы ҡурай һүрәтен генә алып



Һүр. 9. Б.э. тиклем I мең йыллыҡ баштарында Ағиҙел йылға тамағында йәшәгән ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәте

ҡарайыҡ. Донъя яратылғандан, тип иҫәпләнмеш замандарҙан уҡ башҡорт ерен үҙенең юл түтәләре менән сатрашлаған, хатта Геродот тарихына кергән изге

*Көн-Өфө* һәм *Ҡуңыр-Буға* юлдарының дүрт армыты (“дүрт даруға”) — ***һары юл (һары стяг), күк юл (күк флаг), ҡыҙыл юл (ҡыҙыл әләм), ҡара юл (ҡара байраҡ)*** булғанлығы һәм барлығы, һәм ул төҫтәрҙең дүртеһе тиң, әлеге һаналыу тәртибенсә (өҫтән — аҫка сиратланып), ***дүрт төҫ-һыҙатлы дөйөм башҡорт флагын*** тәшкил итеүе һәм ул флаг Ер Кендеге Арҡайымдың көпсәге (үҙәк бинаһы) башында елберҙәгәнлеге башҡорттоң оҙон хәтеренән билдәле. Ошоно иҫәпкә алһаҡ, бөгөнгө дәүләт флагыбыҙҙың төҫ-юлдары кәм тигәндә башты баҫып уйланырға этәрмәйме беҙҙәрҙе?!.Флагтағы ҡурайҙың ете супалтайы — башҡорттоң *ете ырыуы* тип лайыҡлы ҡыуанабыҙ. Ләкин уғата башты баҫыбыраҡ уйланып ҡараһаҡ, ҡыуанысыбыҙ ярым-ярты икәнлеген абайлап әсенәбеҙ: эйе, ***ете ырыулы башҡорт*** яғы (Урал батыр тоҡомдары) һүрәттәге ете супалтай-символ рәүешле барлығын бар ҙа ул әлегә, ләкин башҡорт халҡының ҡалған ҡап-яртыһы — ***биш ырыулы үҫәргән*** яғы (Шүлгән батыр тоҡомдары) ҡайҙа һуң? Башҡорт халҡының мотлаҡ баяғы ***ете ырыу менән биш ырыу берлегенән*** (ете менән биштең ҡушылыуынан) хасиллығын, әрһеҙ әҙип Й. Солтанов ғүмере буйына ҡарғалай ҡарҡылдауын һис һанға һуҡмағанда ла, мөхтәрәм С.И. Руденко (“Башкиры” китабының 50-се битендә), Ибне Фаҙлан ҡарт (12 ырыу эйәләренә табыныуҙары хаҡында), шулай уҡ *Сәмәр (шумер)* балсыҡ китаптары (һәр нәмәнең теүәллеген 12 ырыу һаны менән билдәләү) һәм, етмәһә, башҡорттоң үҙ ауыҙынан (“Күсәк бей” һәм нәшерселәр тарафынан “ете ырыу” тип аталған, ләкин 12 ырыу хаҡында һүҙ барған билдәле эпостарындағы 12 ырыу берлеге) киҫәтеүҙәрен үҙ ваҡытында иҫәпкә алаһы булған шул. Етәү янында бишәү ҙә үҙенең хаҡлы урынын биләһә, дөйөм символ ҡурайыбыҙ тупалсайҙары ла, ун икеләнеп, ***Сәмәр хан иле*** (боронғо Башҡортостан) халҡы булған ***Сәмәр (шумер)*** бабалар теүәллегендә түңәрәкләнер инек...

Бөтә кешелек донъяһының һәр ярпыһына һәр урында уның тәүге дәүләтен ҡороп, тәүге ҡалаларын һалып, һәр береһенең мәҙәниәттәренең нигеҙен тәшкил иткес бөйөк *тәүдинен, ҡарыһүҙен (мифологияһын),* хатта *телен* дә бер тигеҙ бүлеп биреп, ошо Көндә үҙе генә ысын үҙ аллы дәүләтһеҙ, дәүләт телһеҙ, ҡарыһүҙһеҙ (мифологияһыҙ, сөнки “Донъя халыҡтары мифтары” китабында башҡорт һаман “мифологияһы юҡ” халыҡ тип билдәләнә!..) Ҡалдырылған башҡортто артабан да һанға һуҡмау, тамам миңрәүләтеү өсөн, борон-борондан халыҡтарҙың теңкәһенә тейгән был ҡушала баш ҡоҙғонло империяла бөтә матди-рухи саралар империя файҙаһына төптән уйланып башҡарыла шул (башҡорт әгәр, төрки булмай, берәй һинд-европа телле булһа, бөйөк сал тарихы менән ҡуша уны үҙҙәренең “цивилизаторҙар” ҡорона ҡуш ҡуллап күтәреп алырҙар, аҫыл йөҙөк ҡашылай балҡытырҙар ине); әммә башҡорттоң бөтә кешелек башбөрөһө булыуын уның үҙенән онотторотоу, бөтә кешелектең бишеге булған ***ер***



Һүр. 10. Б.э. тиклем II-I бб. Миәс йылғаһы буйында йәшәгән бабаның ҡиәфәте

***терәге (Тора тау)*** менән ***Ер Кендеге (Арҡайым)*** сал тупрағының — ***Күк Уралдың*** — донъя яратылғандан уҡ башҡорт заттың ишәйе лә ҡушайы (айырылғыһыҙ бер бөтөнө) булыуынан башҡортто ваз кистертеп арындыртыу, табанын еренән тайҙыртыу — һуңғы биш быуат буйынса ҡанға буяп уҙғарылмыш ***универсаль геноцидтың*** төп маҡсаты ошолор. Салдарҙан-сал башҡорт тарихын бер һаплам еп оҙонлоғо ҡалдырып күрһәтеүҙән алып, башҡорттоң (һәм ғөмүмән төрки телле заттың) ҡайҙандыр, килмешәкләнеп, фәҡәт XI быуатта ғына, имеш,башҡорт түгел, ә башҡалар йәшәгән Уралға ҡамғаҡтай тәгәрләп килеп пәйҙә булыуын, р.ғ кузеевтай олпат ғалимдарыбыҙҙан тыш, Башҡортостандың халыҡ шағиры исемен йөрөткән уҙаман ауыҙынан да һиммәтләтеп әйттертеүгә (үҙе теләп, ихлас күңелдән, әлбиттә!) тиклем барып еттеләр... Хәйер, мәркәздәге "өлкән ағай"ҙы ситтә тыныс ҡалдырып, ошонда үҙебеҙҙә, Башҡортостан икмәген ашап, һыуын эсеп үҙтабышлы кәсеп ҡылмыш төрлө милләтле (шул иҫәптән башҡорт) археологтарҙың, этнографтарҙың, лингвистарҙың теләгән бер хеҙмәтен алып ҡарағыҙ: донъя яратылғандан уҡ үҙен, Уралым менән ҡуша ялалдым, тип белгән (һәм ысынлап та ул шулай!) башҡорт халҡын Уралдың төп халҡы (аборигены) итеп раҫлаусы авторҙы табыу ҡыйын уларҙың араһынан. (Һулдағы һүрәт: б.э. тиклем II – I бб. Миәс йылғаһы буйында йәшәгән кешенең ҡиәфәте).

Башҡорттоң ҡамғаҡлыҡ теорияһын яҡлаусыларҙы әллә нисә быуат буйына империя үҙе яҡлағанлыҡтан, фәндә лә, сәйәсәттә лә, мәғариф өлкәһендә лә рәхәт үрсеп күпселек алған улар, — баяғы һыңар аяҡлы үҙ фекерҙәрен генә донъяға баплап сығарыусы дәһшәтле монополистарға әүерелеп, һәр береһе башҡорттоң бахырлығын, башҡаларҙан барыһын да үтескә алып ҡына кеше булыуын бына нисәмә быуын инде арымай-талмай тәкрарлайҙар: уларға ҡалһа, башҡорт халҡы тигән олпат, мәңге тере дәү тирәктең олонон һәм ботаҡтарын уның... сыбыҡ остары (башҡорт булмаған этностар) үҫтергән дә һутландырған... Ә, моғайын, төптө киреһенсәлер: олондан — ботаҡтар, ботаҡтарҙан сыбыҡ остары бөрө ярып сыҡҡандыр? Кешелек донъяһының ошо төп тирәге ошо Күк Уралда асманды терәп, дөйөм бер төптән тармаҡланмыш төрлө-төрлө халыҡтарҙы һәм телдәрҙе, үҙенең һомғол сыбыҡ остары рәүешле, ҡитғабыҙҙың, ҡитғаларҙың (Ер шарының) төрлө-төрлө остарында ул сәскә аттыртҡандыр? Сөнки уларҙың, донъя халыҡтарының, ғәзиз ата-әсәһе булмыш ***тәүгенофонд*** та, ***тәүтел*** дә ***тәүдин*** дә, ***тәүҡарыһүҙ*** ҙә (мифология) тап ошо Күк Уралға — башҡорт тәүтөйәгенә, башҡорт халҡына тоташып төпләнә бит (бәғзеләр быны танырға һәм танытырға теләмәһә лә!)... Дилбегәне ҡыҫҡараҡ тотор өсөн, аҡыллыларҙың бөтәһе тиң европоцентрист булмағанына ҡыуанып, фекеребеҙҙе улар фекере менән дә айбарлайыҡ.



Һүр. 11. Б.э. тиклем IV мең йыл-лыҡта хәҙерге Дәүләкән ҡалаһы янында йәшәгән баба ҡиәфәте

**М.С. Акимова** (антрополог). “Барлыҡ билдәләре буйынса ла башҡорттар Европа һәм монгол расалары араһындағы урта урынды биләй”. Тимәк, донъя расаларының төп ике яғын тоташтыра үҙендә. Йәғни Уралдан алып Көнсығышҡа ҡарай Тын оҡеанғаса һәм Көнбайышҡа оҡеанғаса таралмыш төп ике расаның уртаҡ күрһәткесен тәшкил итә был башҡорт, йәғни төп ике расаның да ата-әсәһе булырҙай үҙәк сифатҡа эйә.

**К.И. Петров** (тарихсы). “Һинд-европа-Алтай (йәғни әлеге төп ике раса. — *Й.С.*) берҙәйлеген кәүҙәләндереүсе этностың фәҡәт уртаҡ бер регионда барлыҡҡа килеүе Көн кеүек асыҡ... Шуға бәйле рәүештә, Урал буйын һәм Көнбайыш Себерҙе иртә үҙләштергән халайыҡтарҙың “Иран телле” булыуҙары һәм... төрки халыҡтарҙың бында ни бары яҙма тарих осоронда ғына килеүҙәре тураһындағы ***яңылыш ҡарашыбыҙ*** үҙгәртелергә тейеш”. (Һулдағы һүрәт: б.э. тиклем IV мең йыллыҡта хәҙерге Дәүләкән ҡалаһы янында йәшәгән “индей” тибындағы әҙәмдең ҡиәфәте). Тимәк, фән баҡсаһында ике йөҙ йыл буйынса тырышып-һуғарып үҫтерелгән, имеш тә “Урал аборигендары мотлаҡ Иран телле булған, ә төркиҙәр бында ҡайҙандыр ситтән ҡамғаҡтай тәгәрләп күсеп килгән” тәғлимәтенең ялғанлығы, мәсьәләгә яңыса ҡарау кәрәклеге таныла.

**В. Алексеев** (расалар белгесе). “расаларҙы һәм уларҙың тарихын барлыҡ дәлилдәргә бәйләп комплекслы өйрәнеүсе ғалимдар түбәндәге дөйөм һөҙөмтәгә килде. Кешелек донъяһының шәжәрә тирәген төп ике өлөшкә бүлеп ҡарарға мөмкин: ***монголоидтар (олон)*** һәм ***негроидтар менән бер туған европеоидтар (олондан ярған тармаҡ). Монголоид (олон) күрһәткестәр иң боронғо — <u>тәүкүрһәткестәр</u> булып тора”.*** Тимәк, өлөшләтә *монголоид* тип һаналмыш башҡорт халҡының тамыры антропологик күрһәткестәре буйынса ла әллә ҡасанғы Донъя яратылмыш мифик замандарға барып тоташа... В. Алексеев ғалимдарҙың ифрат ҡыҙыҡлы күҙәтеүен дә килтерә: “нил йылғаһының башынан (Африка Көньяғынан! — **Й.С.**) Алып Азияның ғәрәп илдәре, Төркиә, болғария, Румыния, Украина, төньяҡ Россия, Башҡортостан, Ҡаҙағстан һәм Монголия аша гиҙеп уҙһаң, ***бер үк антропологик күрһәткестәргә тап булаһың”.*** Дөп-дөрөҫ, сөнки ҡыҙыл (урта) диңгеҙҙән (Грециянан) алып Күк Уралдағы Ер Кендеге Арҡайым аша һары диңгеҙгә (Корееяға) тиклем тартылмыш *Көн-Өфө (Ҡәнифә)* изге юлыбыҙҙың теп-теүәл буйҙары был; меңәр-меңәр йылдар буйынса унда башҡорт йөрөгән, башҡорт ҡаны таралған. Ғалимдар әгәр инде (инд) йылға тамағындағы Күк диңгеҙҙән (Һиндостандан) алып йәнә Күк Уралдағы Ер Кендеге Арҡайым аша ҡара (ҡар) диңгеҙенәсә (Скандинавияғаса) тартылмыш *Ҡуңыр-Буға* изге юлыбыҙ буйҙарының кешеләрен тикшереп ҡараһалар ҙа, тап шундай уҡ һөҙөмтәгә килерҙәр ине. Һәм йәнә:

**Ю.Е. Березин** (этнограф). “яҡындағы Көнсығыш һәм Европа мифологияларындағы һәм фольклорындағы ғәмәлдә бөтә мотивтар (һәм, иң мөһиме,уларҙың комбинациялары) тап шундай уҡ (бер иш) өлгөләр рәүешле булып Көньяҡ Америкала һынлана. Был ғәжәп берҙәйлек фәҡәт әҙәм психологияһына бәйләме, йә булмаһа был бер үк сифатлы кәүҙәләнеш ҡасандыр бер үк мифологияға эйә булған кешеләрҙең ***бер үҙәктән*** донъяға таралыуынан киләме, хәҙергә аңлайышһыҙ”. Был фекерен ғалим тоталитар режим осорондағы күп нәмәләр “аңлайышһыҙ” иҫәпләнгән 1984 йылда саманан тыш һаҡлыҡ

күрһәтеп яҙған, әммә тел төбө менән барыбер тумбыта хәҡиҡәтте: бөтә дәлилдәр кешелек донъяһының һәм уның бөйөк рухиятының *дөйөм бер үҙәктән* (ҡарыһүҙебеҙ буйынса, *Күк Уралдан*) бөтә Ер шарына таралғанлығын һөйләй:

Борон-борон борондан
Кеше-маҙар булмаған,
Килеп аяҡ баҫмаған
(ул тирәлә ҡоро ер
Барлығын һис белмәгән),
Дүрт яғын диңгеҙ ураҡкан
Булған, ти, бер урын.
Унда булған, ти, борон
Йәнбирҙе тигән ҡарт менән
Йәнбикә тигән ҡарсыҡ.
**"Урал батыр".**

Күк Урал буйҙарында, донъялағы тыуасаҡ бөтә диндәрҙең дә нигеҙен -- тәүдинде уйлап тапҡан да дәүерҙәр һәм быуаттар буйынса уны камиллаштырып эшкәрткән, -- башҡорт мифологияһының был шаһитлығы һис юҡҡа ғына түгел! Бабаларыбыҙ бында, бына уның схемаһы (донъя-ғаләмдең ете ҡатында – ете Хоҙай урынлашҡан, ә етенсеһе – барыһынан да өҫтөн һәм барыһына ла бойороусы Дәү Хоҙай (һүр.5).

Ысынлап та, геология-һы буйынса ла, Ер шарындағы иң боронғо диңгеҙ аҫтынан ҡалҡып сыҡмыш иң боронғо ҡоро ер киҫәге булып тора бит ул салдарҙан-сал Урал тау... Бөйөк башҡорт хәтере һәм бөтә кешелек хәтере һаҡламыш бик боронғо ҡарыһүҙ-мифтар-ҙан асыҡ күренеүенсә, бөйөк Евразия ҡитғаһында *тәүтөйәктәге* (Башҡор-тостандағы) тәүге ата-бабанан (бер юлы үҙе — ата, үҙе — әсә енесле йәғни гермафродит-хөнә-сә *Имирҙан*), ә дөрөҫө-рәге, уның, үлеп, *Урал-Алтай* тауҙарына әүерелмеш йәнһеҙ кәүҙә-һенән *гүр ҡыҙы (Шүлгән)* һәм *гүр улы (Урал)* тыуа был донъяға, уларҙың кендек инәләре һәм имеҙеүселәре *Әсә-бүре* (Шүлгәндең имсәк әсәһе) һәм *боҙ-инәк* (бизон-һыйыр, Уралдың имсәк инәһе) имеш. Ошо *ярым Илаһи (тимәк, кәүҙәһенең яртыһы үлемесһеҙ!), ярым бәндәүи (тимәк, кәүҙәһенең яртыһы үлемесле!)* Тәүге игеҙәктәр *әҙәмдәрҙең башбабалары* (ҡөрьәндәге *әсәбеҙ Һауа* менән *атабыҙ Әҙәм*) булып, тора-бара нәҫелдәре ҡуш (ике) тармаҡҡа үркәнләп, заманалар уҙған һайын, үркән остары бер-береһенән йыраҡлашыу һөҙөмтәһендә үҙ-ара ҡапма-ҡаршы ла, шул уҡ ваҡытта бер бөтөн дә (диалектика ҡануны!) Булған архаик *игеҙ тәүырыу — фратриялар (үҫәргән* менән *башҡорт* йәки *Эске Башҡорт* менән *Тышҡы Башҡорт)* берлеген хасил ҡыла. Халыҡ хәтере һаҡлауынса, Эске Башҡорт менән Тышҡы Башҡорт (йәғни дөйөм башҡорт халҡы) Донъя-Ғаләм-Тереклек яратылғанда уҡ хасил булмыш баяғы изге юлдарға — ер терәгендә (Тора тау янында), ә артабан Ер Кендегендә (Арҡайым тәгәрмәсҡалабыҙҙа) үҙ-ара сатрашланып, дүрткә (ә һуңғараҡ һигеҙгә һәм ун икегә) армытланмыш Көн-Өфө (үҫәргән) юлының һәм Ҡуңыр-Буға (башҡорт) юлының төп эйәләре булып, уларҙан үрселмеш игеҙәк тәүырыу тоҡомдары шул изге юлдар армыттарынан тулҡын-тулҡын дүрт (һигеҙ, ун ике) тарафҡа тарала —

донъяның бөгөнгө төрлө илдәренең һәм телдәренең (халыҡтарының) нигеҙен һала...



Һүр. 12. Донъя-ғаләмдең 12 хоҙай һәм 2 һынлы Дәү Хоҙай урынлашҡан 7 (йәки 14 ярты) ҡаты

Осло беҙ тоҡта ятмағандай, хәҡиҡәт тигән тере ҡуҙҙы ла сүп-сар менән баҫтырып ҡуйып булмай: "цивилизаторҙар" беҙ-"ҡырағайҙар"ҙы танырға теләмәһә лә, цивилизацияларҙың башында торған башҡорт-төрки мәсьәләһе, күпме генә ҡаплаһалар ҙа, дөрә лә сыға өҫкә. Был йәһәттән һуңғы заман урыҫ академигы А.А. Фоменконың урыҫ матбуғатына сарпылмыш һәм мәркәздә шау-шыу тыуҙырмыш "сәйер" фекерҙәре ифрат ғибрәтле. Донъя һәм Рәсәй тарихы буйынса үҙенең асыштарын бер нисә китап итеп баҫтыртып сығарырға һәм Мәскәү университетында дәреслек килбәтендә уҡытырға ла өлгәшкән был "сәйер" аҡыл эйәһенең раҫлауҙары, үҙенең урыҫ милләттәштәрен сикһеҙ тетрәндертеп, ҡыҫҡаса алғанда, ошоларҙан ғибәрәт:

1. Ғайса пәйғәмбәр ысынлап та йәшәгән, ләкин һис тә б.э. I быуатында түгел, ә XI быуатта Сөнки, ти, билдәле булыуынса, Ғайса тыуғанда асманда вифлеем йондоҙо ҡабына. Ә беҙҙең галактикала ундай үтә яҡты йондоҙ (краб һынлы томанлыҡ) 1054 йылда ҡабынған.

2. "Боронғо" бөйөк философтар Соҡрат, Лелий, Олимпий ысынбарлыҡтарында... Бынан ни бары алты быуат элек йәшәгәндәр.

3. Боронғо Русь тарихы — тоташ фантасмагория (уйҙырма). Рәсәй тарихы булмышының ғәмәли арауығы — ни бары алты быуат. Батша Алексей Михайлович Романов (Петр беренсенең атаһы) заманында ғына ла,хатта батша талабы буйынса ла, Русь тарихына ҡағылышлы бер ниндәй ҙә ышанаыслы сығанаҡ таба алмағандар. Был хаҡта тарихсы Ключевский үк асырғанып һөйләгән.

Урыҫ тарихының һуңғы өлгөһөн 1613 йыл тәхеткә ултырмыш романовтар үҙҙәренә файҙалы булырҙай ялғанлап әтмәләткән имеш. Беҙ "монгол-татар иҙеүе" тип белгән урҙа шәжәрәһе хакимдарҙарының идара ҡылыу осорон улар, урыҫтарҙың "сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы ҡаһармандарса көрәше" төшөнсәһен ҡуйыртыу өсөн, уйлап сығарып яҙған. Был тарихтың рәсми өлгөһө

XVIII быуатта батша һарайына ялланып хеҙмәт итеүсе немец тарихсыһы Миллер тарафынан яҙылған, ул да, баяғыса, сығанаҡтар юҡлығынан зарланған. Урыҫ тарихының артабанғы бөтә өлгөләре — Карамзин, Ключевский, Соловьев яҙғандары — шул Миллер төҙөгән нигеҙҙе киңәйтеберәк тә тәфсилләберәк эшкәртеү генә булып тора.

Улай ғына ла түгел — бер ҡасан да Иван Калита ла, Ярослав Мудрый ҙа булмаған. Был ике тарихи миф ғәмәлдә бер үк кешене — Батый ханды (үҙе үк — Үзбәк хан) билдәләү өсөн уйлап сығарылған. Ә Яуыз Иван, һәр яҡтан күренеүенсә, ни бары... бер ҡасан да тормошта булмаған дөйөмләштерелмеш образ — бер нисә урыҫ батшаһының йыйылма һынланышы (тәхеттә улар Яуыз Иван исеме менән ултырған). Атаҡлы Куликов ҡыры... Мәскәүҙең тап үҙәгендәге иҫке майҙанға яҡыныраҡ тәңгәлдә — хәҙерге Ногин майҙанында урынлашҡан һәм унда урыҫ кенәздәре үҙ-ара һуғышҡан. Урыҫтың иң боронғо тарих китабы һаналмыш “Повесть временных лет” иһә XVIII быуатта яҙылған.

4. Европаның, Урта диңгеҙ буйҙарының, Египеттың һәм яҡындағы Көнсығыштың бөтә боронғо тарихы ныҡлап ҡабат ҡаралып сығырға тейеш. Иң “ауыртҡан” мәсьәлә — пирамидалар йәше. Академик А.А. Фоменко түбәндәге парадоҡсты аңлатып биреүҙе дәғүәләй — ниңә биш мең йыл буйына Сфинкс уға бер ни булмағандай торған, ә һуңғы йөҙ йылда әҙәм танымаҫлыҡ хәлгә килеп емерелгән?..

Бына ошондай шаҡ ҡатырғыс иҫбатлауҙар аша ла барыбер һинд-европалылар тарихының байтаҡ өлөшөнөң, үҙҙәренә дан арттырыу өсөн, ҡомдан ҡала рәүешендә ҡоролоуы, ысын тарихтың хәҡиҡәт уғы башҡорт-төркиҙәр яғына күрһәтеп борола барыуы тойола...

Донъя диндәренең бөтәһенең дә тыуҙырыусы-нигеҙе булған ***тәүдин*** хоҙайҙарының (күктәге) һәм әҙәм балаһы ырыуҙарының (ерҙәге) бер-береһенә ҡарата ҡайһылай урынлашыу структураһын бирәбеҙ (һүр.6), шуларға ҡарап донъя халыҡтары мифологияһындағы “аңлашылмаҫ” һәм “серле” нәмәләрҙең асҡысын табырға мөмкин. Арҡайым тигән тәгәрмәсҡалабыҙ мең-мең йыллыҡ саң аҫтынан ҡалҡынып килеп сыҡҡандан һуң, европоцентристар кәмәһе ҡапыл түңкәрелеү хәленә килде, әммә улар, ҡаушауҙарын еңә һалып, кәмәне батырмай һаҡлап ҡалыу сараһына керештеләр — Мәскәүҙән дә, Көнбайыш Европа илдәренән дә Арҡайымға йышылып бөтмөш фән филдәре ағылды — һәр береһе Арҡайым саңдарынан, әлеге лә баяғы, “Иран телле”ләр тамырын юлларға кереште (“асыш”тарын оҙаҡламай күрһәтә лә башларҙар). Б.А. Рыбаков кеүек оторо урыҫ академиктары һулышын, үҙҙәренең күрәҙәлек (экстрасенслыҡ) һәләте менән салт тоя һалып, буғай, ирле-ҡатынлы глоба кеүектәр, фәлсәфәләп, Донъяға тарата ла башланы: Арҡайым, һәм ғөмүмән сал Күк Урал, имеш тә, башҡа бер кемдең дә түгел, ә тап бөгөнгө урыҫ-славяндарҙың мөҡәддәс тәүтөйәге булған; шуға күрә ул бөгөн дә урыҫ ере, Рәсәйҙең тап йөрәге. Ә төп хужа башҡортто хатта иҫәпкә лә алмайҙар (үҙ йортонда үҙе — килмешәк ҡоло). Дөрөҫ, Арҡайым харабаларын фәндә беренсе башлап иғлан ҡылыусы Силәбе ғалимы Г.Б. Зданович, ауыҙ тултырып булмаһа ла, славян һәм башҡаларға ҡушып ҡына булһа ла, тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайымдың туп- тура мираҫсылары (уны төҙөүсе бабаларҙың нәҫелдәре) исемлегенә башҡорттарҙы ла теркәгәйне, теркәүен. Әммә башҡорт

ғалимдарының күбеһе һаман ауыҙҙарына һыу уртлағандай ҡалды, фәҡәт Н.А. Мәжитов уҙаман ғына, һоҡланғыс таҫыллыҡ күрһәтеп, арымай-талмай, әйләнгәне һайын Арҡайымды теленән төшөрмәне: “Минеңсә, — тине ул, — Арҡайым килбәтле ҡомартҡыларҙың хасил булыуында Урта Азия яҡтарынан килгән халыҡтарҙың ҙур өлөшө һиҙелә... Ул кешеләр үҙҙәре менән яңы төҙөлөш




Һүр. 13. Ырыуҙарҙың ҡайһы сферала урынлашыуы һәм ҡайһы хоҙайға табыныуы

ысулдары, материалдар менән бер ҡатарҙан еҙ-баҡыр быуат заманына хас алдынғы йәмғиәти фекерләү, ҡоролош, дини йолалар килтергән булырға тейеш. Арҡайым һымаҡ ҡаласыҡтарҙың боронғо башҡорттарға ниндәй ҡатнашлығы бар һуң, тигән һорауға яуап биргәндә, ***“уларҙы башҡорттар эшләгән” тип туп-тура әйтеп булмай.*** Сөнки, — ти ул, — башҡорттар тураһындағы тәүге яҙма доҡументтар IX-X быуаттарҙа ғына барлыҡҡа килә, ә Арҡайым ҡомартҡылары уларҙан кәмендә ике ярым мең йыл элек йәшәгән”. Әстәғәфирулла тәүбә!.. Улайһа ниңә урыҫ ғалимдары теше-тырнағы менән Арҡайымыбыҙға йәбешеп

яталар икән, сөнки урыҫтар тураһындағы “тәүге яҙма доҡументтар”, — академик А.А. Фоменконы ғына хәтерләйек! — бигерәк тә “һуңыраҡ барлыҡҡа килгән” бит?!. Ә арҙаҡлы ғалимыбыҙ тылҡырға яратҡан “Урта Азия яҡтарынан килгән халыҡтарҙың ҙур өлөшө һиҙелеүе”нә килгәндә, киң билдәле хәҡиҡәтте — башҡорттарҙың борон-борондан уҡ ***Урал — йәйләү*** (төп йәшәү урыны, тәүтөйәге), ***Памир — ҡышлау*** (һыуыҡ айҙар Уралдан үтеп киткәнсе йәшәп китеү урыны) икәнлеген, һәм уларҙың бер өлөшөнөң йәйләүҙә (Уралда), бер өлөшөнөң ҡышлауҙа (Урта Азияла) ултыраҡланып, ҡалалар ҡороп йәшәгәнлеген, ә бер өлөшө (малсылыҡҡа ҡулайлашҡан күскенселәр) шул ике Арала йыл әйләнәһенә мал көтөп йөрөгәнлеген, тимәк, ғалим әйтмеш “Урта Азия яҡтарынан килгән халыҡтарҙың” да асылда шул уҡ башҡорттар икәнлеген онотмаҫҡа ла, *йәшермәҫкә* лә кәрәк ине. Һәм, әлбиттә, имеш, “улар килтергән алдынғы йәмғиәти фекерләү, ҡоролош, дини йолалар” ҙа, әгәр төбөнәрәк төшөп тикшерһәк, барыһы шул уҡ башҡорттоң үҙенеке — тап тәүтөйәк Күк Уралыбыҙҙа тап башҡорттар тарафынан барлыҡҡа килтерелеп, Ер Кендеге Арҡайымдан ҡитғаның дүрт (һигеҙ, ун ике) тарафына таратылған матди һәм рухи хазиналарыбыҙҙыр. Башҡортто ҡамғаҡ рәүешендә ел типкеһендә тинтерәкләтеп йөрөтөү, тәрән үкенескә ҡаршы, йәш быуынды вузда уҡытмыш был остаздың вуз бөтөп уҡытыусылыҡҡа, ғалимлыҡҡа ең һыҙғанмыш шәкерттәренең ҡанына ла һеңдерелгән; уларҙың береһе тарафынан матбуғатта “VIII-XIII быуаттарға тиклемге миграцияларға хәтлем *Көньяҡ Урал халҡы башҡорт булмаған”*лығы, донъяны шаулатмыш тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайымдың башҡорттарға бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡлығы, ә “Урал батыр” эпосы... Ни бары XVI быуатта (Башҡортостан рус дәүләтенә ҡушылған осорҙа) ижад ителеп, “унын авторы Урал батыр” ҙа тап шул осорҙа йәшәгәнлеген раҫланы — ошо “бөйөк тәғлимәт”, тимәк, вуздарыбыҙҙа юғары белем алып сығыусылар мейеһенән киләсәктә лә институт аудиторияларына, мәктәп кластарына таһыллы сәселәсәк (башҡорт, маңҡорт булмайынса, кем булһын?!.). Йәнә килеп, Н.А. Мәжитов һәм А.Н. Солтанова авторлығында студенттар һәм юғары класс уҡыусылары өсөн 1994 йылда Башҡортостан “Китап” нәшриәтендә сығарылған “История Башҡортостана с древнейших времен до XVI века” тигән ҡалын һәм бик кәрәкле китапҡа ла был “тәғлимәт”тәр йәш быуынды “тәғлимәт”ләп тәрбиәләргә ныҡлы кереп ултырҙы: “Хәҙер булған ҡайһы бер факттар былай фараз ҡылырға мөмкинлек бирә: Арҡайым тибындағы ҡәлғәләрҙе һала башлауға Урта Азия еренән Көньяҡ Уралға ниндәйҙер халыҡ төркөмөнөң күсеп килеүе ҡайһындайҙыр этәргес булыуы мөмкин... Улар үҙҙәренең килбәте буйынса боронғо Хорезм, Бактрия һәм Урта Азияның башҡа дәүләттәренең ҡәлғәләрен ныҡ хәтерләтә...”, тип раҫлана ла абруйлы был хеҙмәттә,тәүбә-тәүбә! — шул һөйләмдә үк шул раҫлауҙарын үҙҙәре үк юҡҡа сығара һала авторҙар: “...ләкин Арҡайым тибындағы ҡомартҡылар тегеләрҙән 600 — 800 йылға боронғораҡ”. Бәй, шулай икән, Урта Азиялағы ул Уралдағы Арҡайымдан 800 йылға һуңыраҡ һалынмыш түңәрәк ҡалалар, Уралдағы Арҡайымдың күсермәһе рәүешендә, Арҡайымсыларҙың (башҡорттарҙың) тап үҙҙәре тарафынан төҙөлгән булып сыға лаһа! Быға өҫтәп, авторҙар тағы үҙ-үҙҙәрен бөтөрә: боронғо Көньяҡ Уралдағы ошо дәүер (“андрон мәҙәниәте” осоро) бабаларыбыҙҙың мәйет ерләү йолаларын тасуирлап бирә лә улар, Уралдағы был йолаларҙың ***мең йылдан һуң ғына*** Иранға, Урта Азияға барып

етеүен иҫкәртә. Тимәк, рухи ҡаҙаныштарыбыҙ ҙа иң әүәле ошонда — ер тергә һәм Ер Кендеге Күк Уралыбыҙҙа яралған, ә тегеләргә һуңынан ғына башҡорттарҙан таралған (һис киреһенсә түгел). Тап Арҡайым дәүерендәге бабаларыбыҙҙың Арҡайымға яҡын Синташты йылғаһы буйындағы мәрхүм эргәһенә тап башҡорт-төркисә ат-арба һалып ерләнмеш ҡорғандағы *көпсәкле, күп тырнаҡлы, туғынлы (Арҡайым тәгәрмәскалабыҙҙың моделе!) Тәгәрмәстең табылыуын* китап битендәге тәгәрмәс һүрәте менән ҡуша хәбәр ҡылһа ла авторҙар, уның донъялағы тәүге шул типтағы тәгәрмәс икәнлеген (уға тиклем көпсәкһеҙ тәгәрмәс булған), донъяла беренсе башлап атты өйрәтеүсе, тәгәрмәсте яһаусы ла нәҡ үҙебеҙҙең башҡорт бабалар икәнлеген йәш быуынға, үтә тыйнаҡлыҡ арҡаһындалыр индә, хәбәр итмәй ҡалдыра.




(һүр. 14. 1896 йылда Рәсәй империяһында нәшер ителгән донъя атласындағы Иран дәүләте картаһында көньяҡ ситләп (һинд океанының Фарсы ҡултығы буйындараҡ) ундағы боронғо башҡорт илдәре асыҡ итеп күрһәтелгән: 1. Башкерд, 2. Фарсистан, 3. Бирджан).

Сураштора (Заратуштра, Зороастр) диненең тәүяралмыш урыны итеп тә шул уҡ Урта Азияны күрһәтәләр, ә был иһә тарих фәнендәге бынан илле йыл элекке тамам иҫкергән ҡараш. Инде бөтә донъяға шул билдәле: Сураштора

(Зороастр) дине тап шул Арҡайым тәгәрмәсҡалабыҙ емертелгән б.э. тиклемге XVII быуатта нәҡ Урал менән Иҙел араһында барлыҡҡа килгән дә унан Урта Азияға, Иранға, Һиндостанға һ.б. яҡтарға таралған (Мэри Бойс). Аныҡыраҡ әйткәндә, үҫәргән бәге Сураштора (Заратуштра, Зороастр) үҙенең дин реформаһын Илаһи эпостарыбыҙ төйәге Асылыкүл буйында үткәрә башлаған, ундағы тау башында шул диндең тәбиғи ҡорамы (табыныу урыны) һаҡланған әлегәсә һәм ундағы ҡаяташтағы тәүырын (тәүруна) яҙыу тап бөгөнгөләй башҡортса уҡыла (ул хаҡта матбуғатта яҙылды). Шулай итеп, ошо көнгәсә башҡорт ерендә башҡорт файҙаһына булмаған "тәғлимәт"тәр генә билсәндәй ҡотороп шыта, ә башҡортто, башҡорт ерен үҙенә *лайыҡлы* һәм хаҡлы үҙәккә ҡуйған, бөтә яҡтарҙың кендеге береш Ер Кендеге итеп таныған ҡараштар өҫкә сыға алмай тапала... Тапалаусы нигилистарға үҙ фекерен белдергәндәй, шведтың боронғо бөйөк ғалимы Карл Линней бынан ике йөҙ йыл элек үк яҙып ҡалдырған икән: Иҙелдән алып Иртышҡаса йәйрәп ятҡан, биш төрлө иген орлоҡтары сәсмәйенсә лә үҙе үҫкән ожмахтай башҡорт ерҙәрен күрһәтеп ул, туфандан һуң Нух пәйғәмбәр ғаиләһенә, тормош башлап ебәреү өсөн, хоҙай Тәғәлә тап ошо төйәкте бирмеш, бөтә кешелек донъяһы шунан таралмыш, тип әйткән ул...

## Ер шарының күсәрҙә әйләнеше — арбалағы тәгәрмәс әйләнеше

Бик боронғо (тәүтормош дәүере) бабаларыбыҙ Донъя-ғаләм-Тереклек яралыуын секс аша төҫмөрләп, иң әүәле ***Күк аҡәсәге***[8] ***(Моғажар-Әмбә тау)*** менән ***Ер оторого***[9] ***(Тора тау)*** ике ара енси мөнәсәбәттә бер-береһенә ҡатланмыш, тип белгәндәр (шул арҡала ерҙә тормош таралған) һәм изге Тора тау башына менеп хоҙайға ялбарғанда ла ҡатлансыҡ шул икәүгә бер ыңғай табынабыҙ, тип уйлағандар. Шуға күрә Тора тау иң тәүге табыныу урыны булған, уның дүрт яғынан уға тура үтмәле дүрт юл — изге *"тороҡ-үт"* (Тора тауға үтеүсе юл) тартылып, *"тракт"* термины яһалған, ә шул изге юл тураһындағы изге яҙыуҙар (әҫәрҙәр) *трактат* аталып киткән, булһа кәрәк. Шул уҡ дүрт юлды *"торага"* бармалы юл, тип тә атағанлыҡтан, *"торага"*нан — *"даруга"*, *"дорога"* терминдары ла моронлаған. Тора тауға ағылыусыларҙың торған урындары (иләүҙәре) Тора тауҙан алыҫлаша барған һайын, юл йөрөү ҡыйынлашып, шул төбәккә дүрт тарафтан килеп бергә тоташҡан һыуҙарҙың дүрт үҙәне (Ағиҙелдең үрге һәм түбәнге ағышы, Һәләүек, Эстәрле) буйлап кәмәләрҙә уңай килә башлағандар һәм шул дүрт үҙән килтереп еткермеш тәңгәлгә баяғы ҡатлансыҡ ***аҡәсәк — отороҡ*** ишаратын изге ҡорам рәүешендә үҙ ҡулдары менән ағас, таштан ҡорғандар, ул иһә ҡыҫҡартып аталышында ***эсә-торалы (Эстәрле)*** тип әйтелеп, хәҙерге *Эстәрле* йылғаһының да, ҡалаһының да ***(Эстәрлетамаҡ)*** исеме булып тора (шундай уҡ изге ***эсә-тора-ҡан — Әстерхан*** ҡалабыҙ ҙа бар). Дүрт яҡтан да кәмәләрҙә һыу-һүл буйлап килгәнлектән, *"һыу-һүл"* тигәнебеҙ — *"һыу-юл"*, *"юл"* булып әүерелгән. Ошондай уҡ дүрт һыу-юллы ҡорамдарыбыҙ хәҙерге Өфө, Темәс, боронғо болғар һ.б. бик

---

[8] Аҡәсәге — аҡ эсәге йәғни инәлек ағзаһы.

[9] Ер оторого — ир торого йәғни ирлек ағзаһы.

күп тәңгәлдәрҙә *лә* ҡоролған һәм улар үҙ-ара Аралашыу, сауҙа үҙәктәренә *лә* әүерелгән. Аҙаҡ килеп, бабаларыбыҙ бөтә ҡитғаға тулҡын-тулҡын таралып, ҡитғаның бер осонан икенсе осонаса оло каруандар йөрөмәле баяғы изге ***Көн-Өфө*** һәм ***Ҡуңыр-Буға*** юлдары үткәрелеп, улар сатрашланып киҫешкән ҡитғаның тап урталыҡ тәңгәлендә, ***Ер Кендеге Арҡайымда*** ,тәгәрмәскала рәүешендәге ҡорамыбыҙ ҡоролған. Тәүдин ҡоролошона теүәл нигеҙләнмеш башҡорт йәмғиәт-дәүләт ҡоролошо теп-теүәл итеп кәүҙәләндерелгән был тәгәрмәскала архитектураһында: иң үҙәктә һыу күсәрле (ҡоҙоҡло) көпсәк-цитадель — тирмәләй түңәрәк йорт, унан радиаль йүнәлештәрҙә һигеҙ тырнаҡ-тыҡрыҡ саҡкыланып китә һәм ҡала ҡырыйында уларҙың остарын бергә тоташтырмыш түңәрәк туғын-урам бейек ҡала диуары менән көпләнә — ҡойоп ҡуйған башҡорт тәгәрмәсе килбәте! Шул "тәгәрмәс" эсендәге урау-ураттарҙың (ырыу-родтарҙың — йәмғеһе 3 ырыу-род) һәм бүлемә-племяларҙың (йәмғеһе 24) һәм уларҙы радиаль йүнәлештә Аралап үтмеш 8 араның (һигеҙенсеһе ***Дәү Хоҙай*** араһы) ошо рәүешле "тәгәрмәсләнеп" урынлашыуын тәүдиндәге *Көн-әсә* һәм *ер-ата* түңәрәктәре символдарын Арҡайымда ер йөҙө яҫылығына изге *офоҡ түңәрәге* һәм уның эсендәге изге *ҡоҙоҡ түңәрәге* рәүештәрендә бер-береһенә ҡатландырып һалыу ысулы тәьмин иткән. Эйе, тәүҙә тап шундай "тәгәрмәскала" Арҡайым һалынған Ер Кендегенә, ә шуның көҙгөләгеләй сағылышын кәүҙәләндереүсе, арба күсәренә кейҙереп йөрөтмәле тәгәрмәс үҙе иһә булмаған әле Донъяла — *Сәмәр* хан иле кешеләре *Сәмәр (шумер)* бабаларыбыҙҙың көпсәкһеҙ күсәргә беркетелмеш дискылы тәгәрмәстәре (хәҙерге вагон тәгәрмәстәреләй) тәгәрләткән егеүле арбаларҙы; тимәк, күсәр тирәләй көпсәк түгел, ә күсәр үҙе тәгәрмәсе менән ҡуша әйләнгән. Тәгәрмәскаланың һигеҙ тыҡрыҡы башындағы туғын-түңәрәк (ҡәлғә диуары) өҫтөнә суҡайтылмыш һигеҙ башинәнең (башняның), тәүлек һуҙымында үҙ тәңгәлдәрендәге күк есемдәрен артҡа ҡалдыра барып, Көн сығышы яғына ҡарай ер менән ҡуша туҡтауһыҙ әйләнеүен, бер әйләнеп сыҡкан Арала Көн һәм төн (тәүлек) үтеүен, ә көпсәк-цитадель уртаһындағы ҡоҙоҡ һыуының (күсәрҙең) әйләнмәй тик тороуын, тимәк, Ер шары-көпсәк үҙ күсәре (ҡоҙоҡтағы һыу) тирәһендә әйләнеүен абайлағандар бабалар; һөҙөмтәлә цифрблаты (ҡала урамдары башинәләре) үҙәк-күсәр тирәһендә әйләнеүсе, ә ваҡыт күрһәткесе (күктәге бер яҡты йондоҙ) үҙ урынында шаҡырайып тик тороусы сәғәт идеяһына тарығандар. Шул уҡ шәйләүҙән сығып, тәгәрмәскаланың теүәл моделе рәүешендә, арба күсәре тирәләй зыр-әйләнеүсе көпсәкле, һигеҙ тырнаҡлы, туғынлы Донъялағы иң камил тәгәрмәсте лә яһағандар, был иһә ***арий*** тип аталмыш бабаларыбыҙҙың кешелек Донъяһы күләмендәге фәнни-техник революцияһы булған.

Ер Кедеге Тәгәрмәскаланан донъяның дүрт тарафына тартылыусы һигеҙ юл буйлап бабаларыбыҙ йәгеһен һыбай һәм тәгәрмәсле арбаларҙа, һыу юлдары буйлап кәмәләрҙә, ә ҡышҡыһын саналарҙа елдереп йөрөп торған, бөтә тирә-яҡ менән дә аралашҡан. Уралдан Скаддинавияғаса һуҙылмыш шундай юлдарҙың береһен (уны "варяггарҙан гректарға юл" тип тә атағандар) төҫмөрләтәйек (һүр.8):




Һүр. 15. "Варяг"тарҙың -- Европалағы үҫәргән-бөрйән башҡорттарының Уралға юлы

Әйткәндәй, "кем ул арийҙар?" Тигән әүҙемәл (актуаль) һорауға ла "Иран теллеләр улар" тип, төрки теллеләрҙе хатта бер иле лә яҡын юлатмай, аҙым һайын туҡып тора баяғы йоморобаш-европоцентристар, сөнки, арийҙарҙың бөйөк тарихынан "ҡырағай" төркиҙәрҙе һепереп түгеп, үҙҙәре генә тулы эйә булмаҡсыларҙыр, моғайын. Әммә баяғы осло беҙҙе тоҡҡа йәшереп булмай барыбер: "арий" тип тап беҙҙең бабаларыбыҙ бит үҙҙәренең тәүдинендәге үҙе — ***эм (ҡатын),*** үҙе ***ир*** (әйтелеш төрҙәре ***эмир, эмер, эмэр, Имир*** һәм, "кирегә әйләндереп", ***ир-эм — ирэм, эрэм, ирим )*** тәүбабабыҙ ***Имирга*** табыныусылар икәнлектәрен раҫлаған. ***"арий"*** һүҙе, күрәһегеҙ, ***"эрим"*** (үҙе — ир, үҙе — ҡатын) тәүбабабыҙҙың вариант исеменең аҙаҡҡы "м" өнөнөң ҡыҫҡыртылып әйтелеше ул — ***эри, арий.*** Шул уҡ "әрим" исеменән "әрме", "армия" терминдары ла килеп сыҡҡан, ул иһә ҡоралды арийҙарҙың дәһшәтле ҙур төркөмөн билдәләгән. Шулай итеп, "арий" тимәк — Имир (ирим) тәүбабаның "ир" яҡ яртыһынан таралмыш ***Урал*** *башбаба тоҡомдары* ***башҡорт*** һәм "им" яҡ яртыһынан таралмыш ***Шүлгән*** *башбаба тоҡомдары* ***үҫәргән*** ул; ә дөйөм алып әйткәндә, үҙебеҙҙең хаҡ-бабаларыбыҙ ***башҡорттар.***

## Ер шарының ҡоро ере тоташ бер ҡитға булған

Телдән теленер тапҡыр һүҙҙе нығытып ҡуйыр яҙыу-фәлән дә уйлап сығарылмаҫы элек үк, киләсәктә шул яҙыуҙы тыуҙырасаҡ һүрәтләү — белемеңде ҡаяларға сыйып ҡалдырыу ысулы киң таралған. Һөҙөмтәләрен үҙебеҙҙең

Шүлгәнташ һәм Мораҙым, Франция, Испания мәмерйәләрендәге, Тянь-Шань, Памир, Алтай, Балхаш күле буйы тауҙарындағы һуңғы таш дәүер, бронза дәүер сыймалыҡтарында күрәбеҙ. Шул «таш ауаздар» араһында — ифрат ҡиммәтле географик карталар, карталар...

Мәғлүм башҡорт риүәйәтендә Хоҙай Бабай атабыҙ Әҙәмгә «бер үгеҙ тиреһе» ҙурлыҡ ҡоро ер бүләк итеүе бәйән ҡылына. Памир-Алай тауҙарындағы Сармыш ҡаяташында шуны, ысынлап та, «бер үгеҙ тиреһе» ҡиәфәтендәге тоташ ҡоро ер картаһы рәүешендә тамаша ҡылабыҙ (һүрәт 16а – бөтә ҡитғалар һәм б – бер үгеҙ тиреһендәге тоташ Евразия ҡитғаһы). Ер шарының иң боронғо хәлелер, сөнки һүрәт әүәлге бер-бөтөн Евразия-Африка-Америка ҡитғаларының айырымланыуынан элегерәк төшөрөлгән...



Һүр. 16. Памир-Алай, Сармыш ҡаяташында

Ошонан һуң байтаҡ дәүерҙәр ағылып уҙған һәм «бер үгеҙ тиреһе» ҡап-уртаға — Евразия-Африка һәм Америка ҡитғаларына бүленеү мөҙҙәте яҡынлашҡан. Шуның асыҡ өҙөмтәһе -- Таулы Алтай ҡаяларында: баяғы «бер үгеҙ тиреһе»нең тап хәҙерге Беринг боғаҙы булаһы ерҙән үтә лә нәҙегәйеп, бына-бына өҙөлөргә торғанлығы фашлана. Оҡшашлы хәл унан шаҡтай алыҫта ҡабатлана (һүр.17). Карта булараҡ быныһы уғата камиллаша төшөп, йөкмәткеһен ентеклерәк тасуирлауға лайыҡлы. Әгәр ҡоро ер һыҙымын «үгеҙ»ҙең ҡойроғонан башлап аҫ (Көн) яҡлап һыҙымда барлаһаҡ, яҡшы ғына күҙаллана географик тәңгәлдәр: 1 (ҡойроҡ) — Африка, 2 (артҡы бот) — Үҙәк Азия, 3 (алғы бот) — хәҙерге Австралия һәм уны әүәле дөйөмдәү ҡитғаға тоташтырыусы «күпер» — хәҙерге ваҡ утрауҙар һәм архипелагтар сылбыры. Шуларҙан ҡала 4-енсе ослоҡай — хәҙерге Корея ярымутрауы; 5-енсе — ул саҡтарҙағы ҡоро ергә тоташ булған хәҙерге Сахалин һәм Япон утрауҙары. 6-нсы — шулай уҡ ул саҡтағы тоташ ҡоро ер рәүешендәге хәҙерге Курил утрауҙары менән Камчатка ярымутрауы һәм шулар уратаһындағы боронғо эске диңгеҙ — хәҙерге Охот исемле тышҡы диңгеҙ. 7-нсе — ҡитғабыҙға уткүрше Америка ҡитғаһы башланған нәҙек муйын (буласаҡ Беринг боғаҙы тәңгәле). 8-енсе — Төньяҡ Америка ҡитғаһы. 9-ынсы — Көньяҡ Америка ҡитғаһы...



Һүр. 17. Тянь-Шань, Сыймалыташ ҡаяһында

Күренеүенсә, тоташ бер ҡитға сифатындағы ҡоро ерҙән Америка ҡитғаһының бына-бына айырымланырға торған сағы...

## Урал батыр менән Шүлгән батыр Ер шарын урап уҙа

Кешелек донъяһының иң боронғо хәтер һандығын тәшкил иткән бөйөк ҡомартҡыбыҙға — «Урал батыр» эпосына мөрәжәғәт ҡылайыҡ.

Яуыз Әжәлде табып юҡ итергә тип, Урал менән Шүлгән, ошо гүзәл төйәгебеҙҙән ҡубынып, икеһе ике тарафҡа йөҙ бороп йүнәлә: Шүлгән — һул яҡҡа — яҡшылыҡ иленә, Урал — уң яҡҡа — яманлыҡ иленә табан. Ҡайһы тарафтар һуң ул?

Әгәр күктәге Дәү Хоҙайҙың ун дүрт йәненең береһен тәшкил иткән фаллосы Тамыр Ҡаҫағаһына — Тимер Ҡаҙыҡ йондоҙона йөҙ менән торһаҡ, һул ҡул яҡ — Көн байышы — әсә яғы; уң ҡул яҡ — Көн сығышы — ата яҡ.

Тимәк, Шүлгән (әсә) — Көнбайышҡа. Ә Урал (ата) — Көнсығышҡа ҡарай китә.

Урал **уңға** киткән һуң,
**Оҙон юлға** төшкән һуң,
Күп һыуҙарҙы кискән, ти,
Күп тауҙарҙы ашҡан, ти;
Бара торғас бер тауҙың
Итәгенә еткән, ти...
(589 — 594-енсе шиғри юлдар).

Әйтелгән «оҙон юл», күренеп тора, бөтә ҡоро ерҙе Көнсығыштан — Көнбайышҡа табан иңлап-буйлап үткән, бөтәбеҙгә билдәле изге Көн-Өфө (Ҡәнифә) юлы, әлбиттә. Шул оҙондарҙан-оҙон Көн-Өфө юлының Көньяҡ Америка ҡитғаһындағы «инәк (инк) императорҙары юлы» тип аталған, ҡаты таштан көпләнгән дәү бер өлөшө әлегәсә яҡшы һаҡланып ҡалған һәм ул иҫең китерлек: хәҙерге Эквадор иленән башланып, Чилиҙы буйлап үтеп, көньяҡ географик киңлектең 35-енсе градусынаса 5250 километрға һуҙыла. Шуныһы ла фәһемле: бөйөк Көн-Өфө юлының ике осонда ла — Египет ҡом сүлдәрендә һәм Мексика ҡарурмандарында ла — әҙәм көсө етмәҫлек таш блоҡтарҙан мәғрур һынлы пирамидалар төҙөлә; беҙҙә лә, тегендә лә ҡәҙимге үлән ҡурайҙан моң тарталар...

Айҙар, йылдар буйы шул юлды үткән Урал батырыбыҙ, ниһәйәт, өҫтәге шиғри юлдарҙан шәйләнеүенсә, төньяҡ Америка ҡитғаһындағы хәҙерге Мексиканың Сьерра-Мадре тигән *«тау итәгенә»* барып еткәнгә оҡшай. Унда, «Урал батыр» эпосында бәйән ителеүенсә, хоҙайҙарына күпләп кеше ҡорбандары салыусы ҡатил-йылан (палач-йылан) Ҡәһҡәһә (истәк индейҙары мифынса Кецалькоатль — ҡанатлы йылан-аждаһа) иле, имеш... Юлда тап булған бер әбей ҡанлы йәштәрен түгеп һөйләй Уралға: ҡатил-батша (йәғни Ҡәһҡәһә), әсәһе рухына арнап, *ҡыҙҙарҙы ҡойоға һалдырта, егеттәрҙе Тәңрегә бағышлап салдырта* (760 — 779)... Беҙҙең ҡитға тарихында булмаған, Америка ҡитғаһында ғына билдәле бик мөһим мәғлүмәт был!

Археолог-тарихсылар был ҡурҡыныс йоланың ысынлап та боронғо Мексика индейҙары тарафынан башҡарылыуын асҡандар. Һәм ул ғына ла түгел: «Урал батыр» эпосында ентекле хәбәр ҡылынған, ҡыҙҙарҙы ҡорбанлап батыра торған

алтмыш метр тәрәнлек «әжәл ҡойоһо» ул ерҙә әле лә бар — Чечен-Ицы ҡалаһы эргәһендә ул. Ҡойо төбөнән, ысынлап та, бик күп ҡатын-ҡыҙ һөлдәләре табылған... Һәм шулай уҡ егеттәрҙе ҡорбан ҡылыу урыны ла билдәле — «ҡанатлы йылан» ҡалаһы үҙәгендәге пирамида башына мендереп салғандар...

Урал батыр ытырғанып күҙәткән, ҡорбан ҡылыу өсөн майҙанға күпләп ҡыуып килтерелгән бахыр бәндәләрҙең күренеше лә тап испан конкистодорҙары осратҡан, рәссамдары һүрәтләгән яланғас тәнле индейҙар бит:

Бер әсәнән тыуғандай,
Барыһы ла шәп-шәрә...
(717 — 719).

Индейҙар батшаһын тәхете менән ҡуша ҡолдары күтәреп йөрөтөү ысулынаса теүәл сағыла бөйөк эпосыбыҙҙа!

Инде икенсе йүнәлеште байҡайыҡ.

Уралдыҡына ҡапма-ҡаршы һул яҡҡа — Көнбайышҡа төбәлеп юлланған Шүлгәнебеҙ ҙә үҙ сиратында:

Ай киткән, ти, йыл киткән,
Күп йылға, тауҙар үткән...
(1718 — 1719).

Һис тә көтөлмәгән хәл: Көнбайышҡа ҡарап дөнгән Шүлгәнебеҙ ҙә, ҡапма-ҡаршы Көнсығышҡа юҫыҡлап олаҡҡан Уралыбыҙ ҙа, бына ғәжәп! — икеһе бер үк тәңгәлдә — Ҡәһҡәһә-йылан илендә (Мексикала) йөҙгә-йөҙ тап килешә (1800 — 1820). Тимәк, еребеҙ шар формаһында түп-түңәрәк икәнлеген, үҙҙәре йөрөп-күреп, бик борондан уҡ яҡшы белгән башҡорттар!

Һәм бына ер тарихынан йәнә мөһим мәғлүмәт.

Ике батырыбыҙ ҙа шулай Ҡәһҡәһә илендә булған саҡта ҡапыл зил-зилә ҡуба:

Һарайҙы томан баҫып,
Быларҙың һушы ҡасып,
Һарайҙа шау-шоу ҡубып,
Ике уртаға ярылып,
Шүлгән, Зәрҡүм икеһе
Ер аҫтына осҡан, ти...
(2098 — 2104).

Тетрәндергес тектоник катастрофа — дөйөм-бөтөн ҡитғабыҙҙың «ике уртаға ярылып» айырымланыуы — хәҙерге Беринг диңгеҙенең һәм боғаҙының хасил булыуы тасуирлана был шиғри юлдарҙа, минеңсә. Ошо дәһшәтле үҙгәреш әҙәм балаһы аңында мифтарҙың да яңыртылыуына килтерә: Евразия ҡитғаһы кешеләре — үҙҙәренә ҡапма-ҡаршы яҡта урынлашҡан Аҫҡы Донъяны (Америка ҡитғаһын), ә Америка ҡитғаһыныҡылар Урта Донъяны (Евразия ҡитғаһын) тере

йән аяҡ баҫмаҫлыҡ «үлектәр иле» итеп һанай башлайҙар, ә ике Донъя араһындағы һыу һәм һауа оҡеандары иң әүәлге замандарҙа үтеп булмаҫлыҡ кәртәгә әүерелә... Ике араны шифалы кендектәй тоташтырған Көн-Өфө юлыбыҙ ана шулай Беринг боғаҙында өҙөлә...

Әмәлһеҙҙән «үлектәр иле»ндә тоткарланып ҡалған Урал батырыбыҙға Тәүтөйәккә ҡайтыу юлын Һомай һылыу тумбыта эпосыбыҙҙа:

Ҡайҙа булһа барырһың,
Үҙең уйлап бағырһың;
Йылан илен **үткән** ир,
**Уңдан һулға сыҡҡан ир,**
Үҙең юлын табырһың...
(2241 — 2245).

Тимәк, Тәүтөйәктән ҡитғабыҙҙың Көнсығышына (уңға) табан сәфәр сыҡҡан Уралыбыҙ Тәүтөйәккә көтөлмәгәнсә кире яҡтан — ҡитғабыҙҙың Көнбайышынан (һулдан) ҡайтып етәсәк: Ер шарының түңәрәклеген, Көнсығышҡа ҡарай бер туҡтауһыҙ киткән әҙәм үҙенең оҙон сәфәренең башланыш төйәгенә төптө ҡапма-ҡаршы тарафтан -- Көнбайыштан ҡайтып килерен әшкәртә бында Һомай!

Самарау-батша, Шүлгән батырыбыҙҙы ла ул «үлектәр иле»нән ҡайтартыу сараһын күреп, ҡыҙына өндәшә:

Урал батыр хаҡына
Шүлгәнде лә сығар һин...
...Шүлгәнде лә сығарған...
(2681 — 2689)

Һомайҙың артынан бер туҡтауһыҙ эйәрһә, тыуған иленә үҙ сиратында ул да тап кире яҡтан — Көнсығыштан ҡайтып инерен әшкәрткәндер, моғайын...

Глобаль күләмдәге тектоник үҙгәрештәр һөҙөмтәһе (ҡитғаларҙың айырымланыуы) бабаларҙан ҡаяташтарға яңы карталар һыҙҙырта. Памир-Алай тауындағы ҡаяла ҡәҙимге «бер үгеҙ тиреһе» (һүр. 16) ошолай тулыландырыла: ҡойроҡ яғынан баш яғына табан йүнәлештә айырым-айырым Австралия, Азия, Европа, Африка, Америка ҡитғалары... Тап шундай уҡ эстәлекле, «бер ҡоралай тиреһе»нә һыйышлы ҡитғаларҙың картаһы Талас үҙәнендә лә бар. Ә теүәллек яғынан иң мөһиме — Ҡыҙылҡом сүле ҡосағындағы Бүкәнтау ҡаяһында. Бөтә донъяның ысын-фәнни географик атласы бында «бер дөйә тиреһе» эсенә һыйҙырылып, тыш яҡлап өҫтәлмә рәүешендә башҡорттарҙың йәшәү урыны махсус рәүештә ҙурайтып һүрәтләнгән (ҡарағыҙ: Йыһат Солтанов. Тамырҙар. — «Ватандаш» 1997/3 журналы, 50-нсе бит).

Шулай итеп, айырымланған ике ҡитға кешеләре бер-береһен «үлектәр иле» әруахтары итеп беләләр һәм аралашыуҙар туҡтала. Меңәр йылдар дауамында бер-береһенән төңөлөп йәшәү арҡаһында ике яҡтың да ҡәүемдәренең тән, тел, рухиәт-мәҙәниәт айырымлыҡтары тәрәнәйә. Фәҡәт яңы диндәр (Христиан, Будда, Ислам һ.б.) барлыҡҡа килеп, әүәлге тәүдин тәғлимәттәре әллә ни һанға һуғылмай башлағас ҡына, Аҫҡы Донъяға йәғни Америка ҡитғаһына оҡеандар аша Урта Донъянан йәғни Евразия ҡитғаһынан караптарҙа сәйәхәт ҡылыуҙар башлана ла

инде тамам онотолған, танымаçлыҡ үҙгәргән «Яңы Донъя»ны (Американы) ҡабат асалар...

## Башҡорттоң ат дағалары...

Әлхасил, беренсе башлап ер йөҙөндә ат менергә Уралда өйрәтелде, көпсәк-тырнаҡ-туғынлы тәүге ысын тәгәрмәс һәм арий бабаларыбыҙҙың ат егеүле ике тәгәрмәсле дәһшәтле һуғыш арбаһы Уралда яһалды; арийҙарҙаң ҡаҙаныштары ошо Күк Уралдан бөтә Евразия ҡитғаһына таралды — фәндәге был хәҡиҡәтте бер кем дә кире ҡаға алмай. Киреһенсә, тарих төпкөлдәрен тентеүсе ғалимдарҙың бөтәһе тиң ошо хәҡиҡәткә таянып эш ҡыла. Әммә был эштәрҙе ат-тәгәрмәс тәүтөйәгендәге нәҡ атҡа табыныусы, ат доғаларын (эпостарын) үҙ аңында тыуҙырыусы һәм быуындан быуынға тапшырыусы бабаларҙың Туп-тура тоҡомдары булмыш башҡорт ғалимдары түгел, ә башҡалар башҡара: башҡорт халҡы үҙенең йортон башҡаларға уларҙың бысраҡ аяҡтарынан теләгәнсә тапатырға башкөлләй биреп ҡуйғандай, үҙенең рухи түрбашын да ана шулай, үҙ белдектәренсә ҡыланырға, башҡаларға тапандыҡлыҡҡа тапшырған...

Ат һәм атҡа табыныуҙың көллө ҡитғаға таралыуы тураһында төплө хеҙмәт яҙған е.е. Кузьмина ханым, мәçәлән,үҙенә тиклемге 366 хеҙмәткә таянып эш ҡылһа ла, шул авторҙары араһында бер генә лә башҡорт ғалимы юҡ (сөнки “остаз”дары эшләгәнде генә көтөп яталар — фәҡәт шулар әйткәндән сүбек сәйнәргә). Ниһәйәт, “образы батыра и его коня в тюрко-монгольском эпосе” (“наука”, м., 1984) тигән китап та сыҡты, уның авторы ла шулай уҡ, үҙенең Урал батыры, һәүбән батыры һәм башҡа атлы батырҙары ер тетрәткән халыҡтың улы булмайынса, ә мөхтәрәм Р.С. Липец үҙе икән дә, рәхмәт төшкөрө! Ошо китабында был автор ҙа үҙе һылтанмыш 117 хеҙмәт эйәләре араһында өс башҡортто күрһәтһә лә, ул өсәүҙең береһенең дә тырышлығы махсус ат һәм атҡа табыныу доғалары (эпостары) хаҡында түгел, ә шуға барып етә алмаған кәбәк, тик еңел-елпе генә... Уның ҡарауы Донъяның күпселек, башҡортҡа тиклем бабалары аттың еçен дә белмәгән, Һинд-европа телле ғалимдары был темаға ҡуш ҡуллап тотонарға һәм, шуға бәйле бөтә нәмәне үҙҙәре (“Иран теллеләр”, “Һинд-европалылар”) итәгенә йылғыр өйөрөп, был теманы төркиҙәр аяҡ баçмаçлыҡ, ҡул һуҙмаçлыҡ кәртәләп тә өлгөргән (юҡҡамы ни мөхтәрәмә Е.Е. Кузьминаның мәҡәләһе лә, бер ниндәй кинәйәһеҙ, ап-асыҡ итеп: “Распространение... *у ираноязычных племен”* тип атала). Шуғалыр ҙа был ғалимә таянған “Иран телле” күп белдекле ғалимдар, башҡорт тәүдинен дә, ҡарыһүҙен дә (мифологияһын) йә төптө белмәүҙәре, йә һанға һуҡмауҙары (сөнки “Иран телле”ләр тирмәненә һыу ҡоймай!) Арҡаһындалыр, хеҙмәттәрендә байтаҡ ҡына мәсьәләләрҙе сисә алмай интегә, йәки уларҙы бер нигеҙһеҙ Һинд-европа теллеләр яғына бора һалып, уҡыусыны ҡаш менән күҙ араһында махсус аймылыштыра. Әммә барыбер европоцентристарҙы борсоған йәшерен хәүеф шауҡымы үҙ көсөндә ҡала бирә һәм ул Е.Е. Кузьмина һөҙөмтәһендә лә ғибрәтле сағыла. Мотлаҡан боронғо “Иран телле”ләрҙеке тип раçланып килмеш атҡа табыныу йолаларының бөгөнгө төрки теллеләр аңында әле булһа шул көйөнсә йәшәп килеүен танып, хәүефле уйға ҡала ул: “төрки халыҡтарындағы беҙ

барлаған атҡа табыныу өлгөләре шуны күрһәтә: төркиҙәрҙең был хайуанға бәйле йолалары һәм дини аң-тоңдары Һинд-европалыларҙыҡына бик яҡын...” Бәй, Урал-Алтай һәм Һинд-европа телдәре ғаиләләренең бер үк ***тәүтел*** олононан ярған ботаҡтар икәнлеген, өҫтәүенә, Уралдан донъяға таралмыш матди хазиналар менән бергә, тәүдин һәм уның үҙгәртелеше булған Сураштора (Зороастризм) диненә бәйле ҡарыһүҙҙәрҙең (мифологияның), табыныу йолаларының да тап Уралдан донъяға таралыуын оноталармы юғиһә?!. “Һорау тыуа: был йолалар, дини аң-тоңдар төркиҙәрҙә үҙ аллы яралғанмы, әллә улар ат-хайуандың үҙе һәм исеме менән ҡуша Һинд-европалыларҙан үтескә алынғанмы? — тип үҙе үҙенә һорау бирә *лә* автор, үҙе үк һипләп ҡуя. — икенсе тоҫмал дөрөҫлөккә яҡыныраҡ, — ти *ул*, — сөнки *тура килешеүҙәр (бер ишлелек) йолаларҙың бөтә булмыш осраҡтарында һәм детальдәрендә лә күҙәтелә*, ә улар иһә б.э. тиклем икенсе мең йыллыҡ яҙма сығанаҡтарҙа Һинд-европалыларҙыҡы булараҡ бер нисә мең йылдар элек теркәлгән”... Бына бит!, — *әлегә лә* баяғы *шул*: һәммәһе *лә* “Иран телле”*ләр*ҙеке!.. Тәүге ат өйрәтелгән тәүтөйәгебеҙҙе мөхтәрәмә автор бына ни өсөн ныҡышмалы рәүештә “урыҫ далаһы” тип атай, әйтерһең дә ул башҡорт далаһы булмаған! Ә инде “боронғо яҙма сығанаҡтар”ға килгәндә, уларҙың хәҙер ҡайһы телдә тип нарыҡланыуҙарына ҡарамаҫтан, уларҙы бөгөнгө ҡайһы халыҡ бабалары яҙғанлығы фәндә әлегәсә бәхәсле, өҫтәүенә, күптәренән башҡорт-төрки еҫе ныҡ аңҡып тора. Авторҙың фекер ағышының дауамы *ла* ҡыҙыҡлы: “атҡа бәйле фольклор һәм ҡарыһүҙ (мифология) сюжеттарының берҙәйлеге бигерәк тә ғибрәтле, — ти *ул*. — төрөк сәнғәтендә “күк аты”н Көн сатрашы (кресть) һәм ат башын ҡайыуламыш нурлы түңәрәк менән һүрәтләү алымы ныҡ таралған. Был һын бәхет символы булып тора... Һыу һәм аҫылташ сығанаҡтарын ҡурсалаусы күк ат-аждаһалар тураһындағы төрөк риүәйәттәре тап шундай “күк аттары” тураһындағы Бәктора һәм фирғәнә риүәйәттәренә бик тартым, был иһә уларҙың уртаҡ сығанаҡтан икәнлектәрен дәлилләй”... Дөп-дөрөҫ, сөнки заманында Уралдан Урта Азия аша Кесе Азияға (хәҙерге Төркиәгә) барып етеп төйәкләнмеш *төрөктәр — тороҡтар* йәғни *Тора тау кешеләре (башҡорт ырыуҙары)* икәнлеге билдәле, ә уларҙың изге атындағы нурлы сатраш (кресть) — үҙебеҙҙең Ер Кендеге Арҡайымдағы изге Көн-Өфө юлы менән изге Ҡуңыр-Буға юлдарының бөтәбеҙгә билдәле символы *ул*. Шулай уҡ йәнә Бәктора дәүләтенең дә (фирғәнә менән ҡуша) боронғо башҡорт дәүләте булғанлығы, Бәктораның баш ҡалаһы (хәҙерге Афғанстандағы бәлх) эргәһендә ошоғаса бер түгел ике ***Иҙел-Бөрйән*** (хәҙерге *диль-баджин* һәм *диль-ваджин*) һәм ***башҡорт*** *(бажгир)* ҡалалары йәшәп килеүе мәғлүм. Ә боронғо (емерек) ***Иҙел-Бөрйән*** *(диль-берджин)* ҡалаһының харабаларынан соҡоп сығарылмыш тәңкәләрҙең биҙәгендә иһә уҡ атыусы *башҡорт кейемле* ирҙәр (күберәген *һыбайлылар*) һүрәтләнгән. XII быуаттың ас-самғани тигән ғәрәп авторы Бәкторала хәҙерге Бәлхтән саҡ ҡына төньяҡтараҡ ***Башҡорт*** һәм ***Ҡыуатйән*** *(Вашгирд, Кубадиан)* ҡалары барлығын яҙа.

“Ниһәйәт, — тип йомғаҡлай ғалимә авторыбыҙ, — Ҡытайҙа *ла* атҡа табыныу булған. Урта Азияның “күк аттары” бында ғәҙәттән тыш юғары баһаланған... Былдай тылсымлы атҡа эйә булыу батшаға ерҙә ғәҙәттән тыш ырыҫлылыҡ һәм ғәйрәтлелек, ә күктә үлемһеҙлек килтерә тип һаналған. Фантастик Ҡытай аттарының исеме *һинд-европалы* “күк”кә ҡайтып ҡала”, — ти ул

— әләгә лә баяғы шул... Был “күк”те иһә һис кенә лә ғалимә юраған бөтмәҫ-төкәнмәҫ ғәйрәтле “Һинд-европалы”ларҙан эҙләнеп тормайынса, башҡорт эпостарындағы бөтә донъяға билдәле тулы ҡанлы ***Күкбуҙат, Аҡбуҙат*** *(күк-боҙ-ат, аҡ-боҙ-ат)* рәүешле асыҡ күрә алыр ине европоцентризмға бирешмәгән әһелдәр...

Ат һәм атҡа табыныу тураһындағы тикшеренеүҙәрҙәге ат өйрәтеү һәм уға табыныу эйәләрен (бабаларыбыҙҙы) “Һинд-европалылар”, “Иран теллеләр” тип әйләнгән һайын нығышмалы тылҡыуҙарҙан арындырһаҡ, донъя ғалимдары был өлкәлә түбәндәгеләрҙе кире ҡаҡҡыһыҙ асыҡлаған.

Ҡулға эйәләштерелгән хәҙерге ат тоҡомдары элегерәк уйлағанса ҡырағай “пржевальский аты”нан түгел, ә Уралдан алып Дунайғаса арауыҡтағы (борондан уҡ башҡорт-скиф ерҙәре! — *Й.С.*) ҡырағай тарпандан килтереп сығарылған (ә ул тарпан-ат иһә башҡорттоң изге таш өйөндә — *Шүлгәнташ мәмерйәһендә* — башҡорт-баба ҡулы менән ҡаяға һүрәтләнмеш! — *Й.С.*), борон-борондан уҡ бабаларыбыҙҙың тире *лә*, ҡаны *ла* мул һеңмеш был арауыҡтағы боронғо кешеләрҙең ҡомартҡылары араһында б.э. тиклем дүрт мең йыл элгәреге ат һөйәктәре табылған. Көньяҡ Уралдың таш быуат һәм бронза осорҙарынан ҡорбанға салынмыш ат һөйәктәре күп ҡалған. Евразиялағы иң эре йөк аттары, нәҙек тояҡлы еңел-йүгерек арғымаҡтар (хәҙерге данлыҡлы *ахалтекин* аттарының бабалары) тоҡомдары тап ошо Көньяҡ Уралда барлыҡҡа килтерелгән. Шуныһын да әйтеп китергә кәрәк: бөгөнгө Көндә ахалтекин ат тоҡомона эйә булмыш төркмәнстанда, һәм ғөмүмән Урта Азияла, ул дәүерҙәрҙә ат заты бөтөнләй булмаған, төркмәнстан тупрағына ат б.э. тиклем ике мең йыллыҡтың икенсе яртыһында ғына Уралдан килтерелгән.

Ат тоҡомоноң Себергә һәм Ҡытайға *ла* Көнбайыштан (Көньяҡ Уралдан) килтерелеүе тураһында ышаныслы дәлилдәр бар. Алтай (төрки) телдәренән ат төшөнсәһе монгол, тунгус-манчжур, дравид (тамил), шулай уҡ тибет-Ҡытай телдәренә күскән, ә Ҡытайҙан япон теленә кергән; ат һәм уның исеме менән бергә, әлбиттә, уға табыныу йолалары *ла* таралған... Шуны киҫәтеп китеү ҙә урынлы булыр: был урында “Алтай телдәре” тип бәғзе ғалимдар, башҡортто атап әйтмәҫ өсөн булһа кәрәк, Ҡытайға кергән “мори” һүҙенең төп эйәһе булған башҡорт телен йәшереп “дөйөмләштергән”, сөнки башҡорт әлегәсә иреү ҡарҙы (ҡар һыуын) да, күләүекте (диңгеҙҙе) *лә* “мәре” (море) ти; был иһә атҡа ҡарата “һыуҙан сыҡҡан мал” (эпостарыбыҙҙа йылҡы малы һыу төбөнән сыға һәр саҡ) мәғәнәһендә әйтелеп, шул уҡ аттың икенсе *ләҡәбе* “йылҡы” — “йылға” (шул уҡ һыу) тигәнгә *лә* тап килә.Ҡытайҙарға уның башҡорт-төркиҙәрҙән барып инеүен нисек тә йәшерер өсөндөр, А. Конради һәм Э. Палибленк кеүек Һинд-европалы авторҙар был башлап ат эйәләштереүҙе, тохарҙар (этноним) “Иран телле” булған, тигән бер яҡлы раҫлауҙы күҙ уңында тотоп буғай, шул тохарҙарға йөкмәтә: “тохарҙар... Б.э. тиклем ике мең йыллыҡтан да һуңламайынса, Ҡытай сиктәренә күсенә һәм үҙҙәре менән бергә аттарҙы һәм арбаларҙы килтерә. Ат, ике тәгәрмәсле һуғыш арбаһы аталыштары, атҡа табыныуҙың ҡарыһүҙи (мифологик) персонаждарының исемдәре Ҡытай теленә тохар теленән кергән”... Әммә “тохар” этнонимы *ла* башҡорттоң уҡ *“тохар-абас-ҡорот”* — *“тәгәрмәс-город”* (Арҡайым) йәки шулай уҡ (шул һүҙҙәрҙән үк) *“тохар-басҡорот”* (тохар-башҡорт йәғни

тәгәрмәсҡала башҡорто)[10] тигән *ләҡәбе* генә икәнен, ул "тәгәрмәс"тәр Алыҫ Көнсығышҡа табан тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайымдан үҙҙәренең изге Көн-Өфө юлы буйлап тәгәрләп киткәнлеген белһәсе шул әһелдәр!..

Уның ҡарауы һары диңгеҙгәсә тартылмыш ул "һары юл" армыттары беҙ фәкирегеҙ башҡорттарға бик мәғлүм. Юҡҡамы ни шул һары диңгеҙгә һыуҙарын ҡойған бөйөк ике йылғабыҙҙы ла сал дәүерҙәрҙә, Күк Уралдан барып сығып, шунда йәшәгән бабаларыбыҙ тап башҡортса исемләгән: тәүбаба исеме ***Имир (Амур)*** һәм ***Ҡыуанһыу***[11] *(Хуанхэ — ҡытайса ла "һарыһыу")*. Боронғо Ҡытай тарихи яҙмаларында ***Һары Өй (Корея)*** ярымутрауындағы бабаларыбыҙ — "хан халҡы" тураһында хәбәр ителә (әйткәндәй, корей телен ғалимдар алтай телдәр ғаиләһенә ҡарата һәм уларҙы бик боронғо төркиҙәр, тип бара), улар яҙын — һабантуй, көҙөн ураҡтуй гөрләтеп үткәрер булған. Һабантуйҙа — Көнгә (яҙ килтереүсегә), ураҡтуйҙа Айға (көҙ килтереүсегә) ҡорбан салыныр, дәүләт мәсьәләләре хәл ителер, аттар сабыштырып, көрәшеп, бәйге үткәрелер икән. Б.э. тиклем III быуатта Корея дәүләтен нигеҙләгән Чхумо-ван үҙе лә, тап үҫәргәндәр башбабаһылай, һауа менән һүлдән (шәренән) яралған, имеш. Уның ҡаһарманлыҡ даны "донъяның дүрт диңгеҙенәсә", тимәк, Көн-Өфө һәм Ҡуңыр-Буға юлдарының остарынаса, таралған. "Вэйшу" тигән VI быуат әҫәрендә Чумон батыр тураһында үтә лә "төрки" яңғырашлы ошо юлдарҙы уҡыйбыҙ: "Чумондың әсәһе — һыу эйәһенең ҡыҙы (Заятүләгебеҙҙең кәләше Һыуһылыу! — *Й.С.*) — Пуе ханы тарафынан ҡараңғы бүлмәгә бикләп ҡуйылған, Көнгә күренмәһен тип. Тәҙрә ярығынан Көн нуры төшөп, ҡыҙ шул ҡояш нурынан быуаҙыған". Был иһә башҡорттоң башбабаһы үгеҙ (оғуз) хан яралышы менән дә, "әхүәл Сыңғыҙ хан вә Аҡһаҡ Тимер" тигән башҡорт тарихындағы алтын (үҫәргән) хан ҡыҙы ғлмәлек-күркле быуаҙыуы тураһындағы ҡарыһүҙебеҙ менән дә ике тамсы һыуҙай тап килә...

Ҡытай бөйөк диуарының көньяғынан буйлап үтмәле Көн-Өфө юл армыты *(Көн юлы)* Уралдағы Ер Кендеге Арҡайымдан алып Көнсығыш Ҡытай диңгеҙенең Тайвань утрауы аръяғында ***Башҡорт*** *(Баски, Баши)* боғаҙындағы ваҡ өс утрауҙан хасил ***Башҡорт*** *(Баски йәки Баши)* архипелагына барып етеп, артабан алыҫ көньяҡтағы Яңы Гвинеянан ары Яңы Зеландияғаса тартыла. Иғтибар итегеҙ, Тайвань янындағы был өс утраулы архипелагтың исеме сап-саф башҡортса: *Баски(р)* — ***Башкир,*** йәки *Баски(рт)* — ***Башҡорт*** (йәйәләр эсенә алынған өн: ҡытай телендә "р" өнө әйтелмәгәнлектән, юйылып, "р"-һыҙ ғына *"баски"* ҡалған). Диңгеҙ уртаһында һомғол тауҙай ҡалҡынып тормош был өс Башҡорт утрауы, моғайын, бабаларыбыҙҙың Алыҫ Көнсығыш ер ситендәге Көнгә табыныу изге ҡорамы булғандыр, сөнки б.э. тиклем 246 — 210 йылдарҙа Ҡытайҙың беренсе императоры булып тәхеттә ултырмыш үҫәргән башҡорто Цинь ши-Хуанди шул "диңгеҙ уртаһындағы өс изге тау һәм унда йәшәгән изге Күк кешеләре"н (үҫәргәндәрҙе) эҙләтеп ҙур экспедиция ебәрә... Көн-Өфө юлының Һары армыты үтмеш хәҙерге Ҡытай ерҙәрен, Ҡытай тарихынан күренеүенсә, б.э. тиклем XIII быуатта уҡ үҙебеҙҙең ***Усун (Үҫәргән)*** фратрияһы биләгән, быуаттар буйна төп ҡытайҙарҙы

---

[10] Был хаҡта "Башҡорт хәтере"ндә ( "Ағиҙел" журналы ) киңерәк мәғлүмәт бирҙем.

[11] Ҡыуанһыу (ҡыуан-һыу ) — башҡортса "һары һыу" тимәк, сөнки үләне ҡыуарып һарғайған көҙгө даланы ла әлегәсә "ҡыуан дала", "ҡыуан үлән" тип әйтәбеҙ.

төньяҡҡа — ҡан ҡәрҙәш башҡорт-һундар яғына ябырылдыртмай бикләп тотҡан, йыш ҡына Ҡытай тәхетен дә биләгән үҫәргән хандары. *Сәнкем (Сян-гун)* исемле бабабыҙ б.э. тиклем 777 йылда ҡытайҙарҙың Чжоу кенәзлеге тәхетенә менеп ултырып, ҡыр-талашып үҙ-ара һуғышыусы ваҡ кенәзлектәрҙе берләштереп, артабан 610 йыл буйынса дауам итмеш *Үҫәргән-Үсен (Цинь)* батшалар шәжәрәһен башлап ебәргән. "Ҡытай тарихының атаһы" Сыма Цянь яҙыуынса,: "Сәнкем батша Үҫәргән (Цинь) дәүләтен нигеҙләне, тирә-яҡтың ҡеүәтлә кенәздәре менән илселәр алыша, дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре урынлаштыра һәм уларҙы ҡунаҡҡа саҡыра башланы. Шунан һуң был Сәнкем Сичжу ҡалаһында Хоҙайға арнап өс һарысай ҡолон, өс һары үгеҙ башмаҡ һәм өс һарыҡ тәкәһе салды". Күренеүенсә, изге ҡорбан боронғо башҡорт йолаһы буйынса килтерелгән: Дәү Хоҙайҙың өс Донъяһы *(Өҫкө Донъя, Урта Донъя, Аҫҡы Донъя)* асманында имен-аман *Көн-ҡояш гиҙһен өсөн* — Көн символы өс бейә ҡолон, ә Ай-Луна йөрөһөн өсөн — Ай символы өс үгеҙ башмаҡ, ә өс Донъяның өс ер йөҙө именлегенә өс һарыҡ тәкәһе арналған. Сәнкем батшаны тыуҙырыусы был Үҫәргән (Цинь) ҡәбиләһе таш быуат аҙағы дәүерендә *Урҙас (Ордос)* тауҙарынан Ҡыуанһыу (Хуанхэ) буйҙарына күсенеп төшкән булған һәм ҡытайҙарға үҙҙәренең улар белмәгән шөғөлөн — әҙәм сирҙәрен уның тәненә таш энәләр сәнсеп дауалау (иглаукалывание) ысулын килтергән. Ҡытайҙар уларҙы "Цинь-и" — "Үҫәргән-яттар" (варварҙар) тип йөрөткән..."Варвар"-башҡорттоң бөйөк мәҙәниәте, шул иҫәптән хатта ат-арба-ыштан һәм атҡа табыныу йолаларынан башлап, дәүләтселеккә тиклем, "варвар түгел" ҡәбиләләрҙең тормошона дөрөп кергән, башҡорт ҡандары ҡанына ла һеңешкән.

Әйткәндәй, "ыштан" тигәндән, бөтә донъяны башлап бөтәйтмеш башҡорт кейем-һалымының тәүгеләренең исемдәрен һәм төрҙәрен бер ыңлай байҡап китеү урынлы булыр, сөнки уларҙың төрләнеше ат менеүгә лә бәйле.

### Ҡатын-ҡыҙ кейемдәре

1. ***Япҡы:*** *әсә-аба-ҡыу* (әсә-апа — аҫаба енси ағзаһын алдан-арттан ышыҡлағыс ҡыу-үлән теҙмәһе) — ҫабаҡыу — ҫабҡы — жапҡы — ***япҡы//юбка ).***

2. ***Алъяпҡыс:*** *ал-япҡы-әсә* — өҫкө осо билбауға ҡыҫтырылып, ҡатын-ҡыҙҙың ал яғын (әсәлеген) япҡыс.

3. ***Накидка:*** *ана-күткә — накүткә* — муйындан алып тубыҡ бөгәренәсә арт яҡтан ҡаплағыс.

4. ***Сапан:*** *әсә-апан (аҫабан)* — ***сапан (жупан, чапан)*** — *япҡыға йәгни юбкаға ҡатлап кейеләкәй өҫ кейеме.*

### Ир-ат кейемдәре

— ***Халат:*** *хәл-ат (фаллос)* — ялanғас тәнле ирҙәрҙең аталығына (хәленә) кейҙерелә торған тоҡсай-чехол. Әйткәндәй:

***Тоҡсай*** — *"котоҡ-әсәй"* (фаллосҡа кейҙертелгән "әсәлек") тигән һүҙ.

***Чехол*** — *"әсәк-хәл"* — шул уҡ тоҡсай: "хәл"гә (фаллосҡа) кейҙертелгән "әсәлек" ("че" — эче — әсә), тигән һүҙ.

***Кейем-һалым*** — шул уҡ нәмә: "кәйем" дә, "һалым (хәлем)" дә "фаллосым" тигән һүҙ бит...

Көн-Өфө юл армытының баяғы алыҫ көньяҡ осондағы Яңы Зеландия утрауҙарының ҡасандырғы башҡорт тоҡомонан аҙмыш **_мәреләр (маориҙар),_** — ә *"мәре"* һүҙе, өҫтәрәк күргәйнек, *шәре-мәренән яралмыш* (*Шүлгән*) һәм *"ат"*, *"атҡа табыныусылар"* тигәнде белдерә, — бына шул маориҙар был кейем-һалымды (фаллос ҡабын) ергә тейер-теймәҫ оҙонлоҡта бамбук көпшәһенән яһап кейҙертеп, *"хәлем" (холим)* тип атайҙар әлегәсә (ир дарманы тап шул "хәлем"енең оҙонлоғона — "хәленә" ҡарап баһалана). Һуңға табан тоташ әҙәм кәүҙәһе һыйышлы *хөлләне (хәллене) лә хәл-ат (хәл-ата — фаллос)* — **_"халат"_** тигәндәр.

2. **_Ыштан:_** *өҫ-әтән — өҫтән* (ир-ат енси ағзаһы *әтән* өҫтөнә ҡаплағыс) — билбауға бер осон алдан, икенсе осон арттан ҡыҫтырып бәйләнмеш тире ярпыһы, туҡыма киҫәге. Аҙаҡ, атҡа һыбайланып менгәс, ул, бер юлы ике балаҡланып (балаланып), баяғы *"өҫтән"* һүҙенән *"эстән"* (салбар эсенән кейеләкәй) — **_ыштан_** булып та әүерелә.

3. **_Салбар:_** *осалы-бар* — осалап (төпләп) һәм ике бар-балаҡлап, ыштанға барлап (парлап йәғни ыштанға ҡатлап) кейәкәй *осолобар — солобар* — **_салбар (шалвар, чалбар, шаровар)..._**

Хәҙерге Ҡытай тупрағында күп быуаттар буйына үҙ-ара ыҙғышып-һуғышыусы ваҡ-төйәк батшалыҡтарҙы бер үҙәккә буйһондороп, Ҡытайҙың ошоғаса дауамланмыш иң беренсе империяһын төҙөү ҙә баяғы Сәнкем баба тоҡомдары өлөшөнә төшә: б.э. тиклем 246 йылда Үҫәргән бәге Чжуан-сян-вандың бер улы **_Цинь-ши-Хуанди_**[12] тигән императорлыҡ ләҡәбе ала; ә уның үҙенең атаһынан ҡалған төп (аҫаба) ер биләмәләре (хәҙерге Сычуань, Хэнань, Хубэй, Шэнси һ.б. өлкәләр) б.э. тиклем XIII быуаттағы Үсүн-Үҫәргән ер биләмәләре менән тап килә (тимәк, аҫаба ерле-сығышлы үҫәргән-башҡорт икән дә һуң был баба!). Тап ошо үҫәргәнле император Ҡыуанһыу йылғаһы буйында Ҡытайҙың бөйөк диуарын төҙөтә башлай. Тирә-яҡтағы батшалыҡтарҙы шул бер үҙәккә буйһондороу арҡаһында хасил булмыш империянан хәҙерге Ҡытай һәм Ҡытай халҡы тарихы башланған, тип һанала. *Ләкин* ул империя тәүҙә *биш ырыулы Үҫәргән* һәм *ете ырыулы Башҡорт* (бөтәһе *ун ике ырыу*) берлегенең — дөйөм башҡорт халҡының дөйөм дәүләте рәүешендә нигеҙләнгәнлеген был "варвар" императорҙың ҡытайҙарға хас булмаған эшмәкәрлеге дәлилләй: ул Уралда — "Көнбайышта тороп ҡалған" *ун ике ырыу эйәләренең ун ике һынын*, бронзанан ҡойҙортоп, *ун ике ҡаланың ҡорамына* ҡуйҙырта, ә ун дүрт улын шул ун ике башҡорт ырыуҙарының башлыҡтары итеп тәғәйенләй (ун икеһе — ырыу башлыҡтары, ә икеһе шамандар булырға тейеш). Башҡорттоң сәсәнлек институты ла беренсе башлап уның һарайында рәсми танылыу ала: барлыҡ ырыуҙарҙан һарайға йыйылмыш аҡыл эйәләренең сәркәтип-етәксеһе һәм император кәңәшсеһе булған әһел унда **_"сәсән"_** тип йөрөтөлә (иероглифтарҙан ҡытайҙар **_"шэжэн"_** тип уҡыйҙар). Император ырыуын, тап башҡорт ҡарыһүҙендәге Үҫәргән башбабаһылай, мәре-һыуҙан яралмыш, тип белгәндәр; император Цинь ши-Хуандиҙың еңеүҙәре лә *Ҡыуанһыу аҫтынан килеп сыҡмыш* **тылсымлы ат һарысай**

---

[12] Цинь-ши-хуанди тигәндең ҡытайҙар аңлатмыш мәғәнәһе: Цинь — ҡәбилә исеме (Үҫәргән. — *Й.С.*), ши — беренши (беренсе), хуан — ҡыуан, ҡыуалаусы йәғни бойороусы, ди — дәү йәғни бөйөк.

*менән асмандағы изге **күк бүре** ярлыҡауы арҡаһында* (тап башҡортса!) өлгәшелгән, имеш: “Чжоу батшалар йортоноң көндәре һанаулы ҡалғас, — ти ҡытайҙар йылъяҙмаһы, — уға алмашҡа шундай уҡ игелекле шәжәрә тоҡомо килмәне[13]. Хакимиәткә Цинь (Үҫәргән) йорто үрләне лә рәхимһеҙ хакимлыҡ башланды. Ҡеүәтле кенәздәрҙең береһе булараҡ, ул, император, ун өс йәшендә үк Күк аҫты донъяһын берләштерҙе һәм, үҙенең һуңғы сиккә етмеш сәмдәренә, ҡырағай теләктәренә ирек биреп, үҙенең ырыуын һәм яҡындарын ғына ашатты ла иркәләне. Ши-Хуандың утыҙ ете йыл хакимлығы осоронда һәр нәмәлә хәрби көс өҫтөнлөк итте, идаралыҡ һәм ҡанундарҙың ҡаты системаһы булдырылып, улар һуңғы замандарҙың батшалары тарафынан да үтәлде. Ши-Хуан үҙенең бөйөклөгөнә изге йәндәрҙән өлгәшкән: тәҡдир яҙмышын Ҡыуанһыу йылғаһының *ат эйәһенән* алған, асмандағы *күк бүрегә* таянған, былар бөтәһе уға дошмандарын еңергә ярҙам иткән. Маҡсаттарына ирешеп, ул үҙен беренсе император — ши-Хуан тип атаған… Халыҡта: үҫәргәнле (Циньский) ши-Хуан енәйәттәргә һәм золомға юл асты, ә уның улы Ху Хай шуларҙы һуңғы сигенә килтереп еткерҙе, тигән риүәйәт йөрөй һәм уларҙа хаҡлыҡ бар”… Күренеүенсә, “варвар”-башҡорттар хакимиәтен ҡытайлылар үҙҙәренсә яман кисереп баһалаған… Шул уҡ ваҡытта императорыбыҙ ши-Хуандиҙың да, ил ҡыҙырып йөрөгәнендә, тап башҡорт халыҡ йырҙарында йырланыуынса, бейек тауҙарға менеп, ©р©©у© быуындарға ядкәрҙәрен ташҡа соҡоп яҙып ҡалдырыу ғәҙәте булған икән, тап үҙебеҙсә бит ул:

Йүгереп кенә мендем тау башына,
Болан килде елеп ҡаршыма.
Һау-сәләмәт ҡайтһам Уралыма,
Тарих яҙыр ©р©©у ташына.

**“Илсе Ғайса”.**

Ҡара ла ғына урман, ҡая бите
Шаулайҙыр ҙа кисен, ел саҡта.
Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым ҡарғыш,
Ейәндәрем уҡыр бер саҡта.

**Тәфтиләү”.**

Хәҙерге заман Ҡытай тарихсыһы Фан Вэнь-линь мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ошо беренсе император Хуанди ырыуы үҙен айыу, барс, леопард, ягуар, арыҫлан тоҡомло (бүре-арыҫлан тоҡомло үҫәргән-шумер!) тип һанаған һәм үгеҙ башлы, әҙәм кәүҙәле башбаба (Урал-Энкиду!) тоҡомло Яньди ырыуы (Башҡорт!) менән элек берлектә йәшәгән илдән — Көнбайыштан (Уралдан!) килгән улар. Ләкин шул ырыуҙар берлегенең юлбашсыһы булыу өсөн тартышта Хуанди (үҫәргәндәр) яғы өҫтөнлөк алып, баяғы Цинь империяһын төҙөгән. “Боронғо күп ҡәбиләләрҙең риүәйәттәрендә, — ти Фан Вэнь-лань, — әҙәм еңә алмаҫ туфан ҡалҡыу ваҡиғаһын

---

[13] Игелекле шәжәрә тоҡомо килмәне — ҡытайҙарҙың үҙ тоҡомо килмәне, ә “варварҙар” (башҡорттар) килде, тип әсенеү. Хәйер, башҡорт Цинь йортон аҙаҡ алмаштырған ҡытайлы Хань йорто шәжәрәһенең һуңғы Хань осорон (икенсе яртыһын) да башҡорт батшалар теҙеме тәшкил итә.

күрәбеҙ. Һәм тик Хуанди менән Яньди (Үҫәргән менән Башҡорт йәғни Шүлгән менән Урал! — *Й.С.*) ҡәбиләләре ҡарыһүҙендә генә туфандың Юй батыр (Урал батыр! — *Й.С.*) тарафынан ауыҙлыҡланыуы, ҡоро ерҙең ипкә килтерелеүе тураһында һөйләнә" (тап "Урал батыр" эпосындағылай! — *Й.С.*). "*Лицзи*" тигән боронғо тарихи яҙмала шул Юй батырға тиклемге йәмғиәт ҡоролошо ла башҡорттоң тап "ожмахҡа тиң Самарау иле" сифатында һағынып иҫкә алына: "*Ул заманда ерҙә бөйөк ғәҙеллек тантана итте, Күк аҫтындағы донъяла бөтәһе уртаҡ булды, ырыу башлыҡтары итеп дөйөм йыйындарҙа иң аҡыллы һәм һәләтлеләрҙе һайланылар, намыҫлы эш ҡылдылар һәм ғөмүми ризалыҡта, тыныслыҡта донъя көттөләр. Әҙәм балалары үҙҙәренең туғандары түгелдәргә лә — туғандарса, үҙ улдары түгелдәргә лә үҙ улдарынса мөнәсәбәттә булдылар.* Бына ниңә ҡарттарға — ҡәҙер-хөрмәт, йәштәргә иғтибар булды; бала-сағаны хәстәрләп тәрбиәләнеләр, ололарҙың һәм толдарҙың, етем-еһерҙең, ҡараусыһыҙ ҡарт-ҡоронoң, зәғиф-зәнкиҙең яҙмышын ҡайғырттылар. Һәр ир-аттың үҙ яраткан шөгөлө бар, ҡыҙ-ҡырҡын үҙ ваҡытында уҡ кейәүгә сыға алыр ине. Аҙыҡ-түлекте түгеп-сәсеп исрафламайҙар, шулай уҡ үҙ өйҙәрендә йәшереп тә тотмайҙар — бөтәһе уртаҡ ине. Эшкә ҡатнашмау уларҙа оят һаналды, ләкин һәр кем бөтә көсөнән килгәнсә шәхсәнә үҙе өсөн генә түгел, ә бөтәһе өсөн тырышып эшләне. Бына ниңә золом алға сыҡманы. Алдау, урлау һәм юлбаҫарлыҡ булманы, шуға күрә ишектәрҙе, ҡапҡаларҙы бикләү ҙә кәрәкмәне. Ошолар бөтәһе бөйөк берҙәмлек тәшкил итте лә инде"... Һәм бына үҙебеҙҙең "Урал батыр"ҙан:

550. Һулға китһәң, юл буйы —
Уйын-көлкө төн буйы,
Ҡайғы-этлек күрмәйсә,
Барлығын да белмәйсә,
Рәхәт йәшәй байманда;
Бүре, һарыҡ яланда,
Төлкө, тауыҡ урманда
Бергә йәшәп, дуҫ булып,
Самарау ҡошҡа баш эйеп,
Ҡан да эсмәй, ит еймәй,
Һис үлемгә юл ҡуймай
Йәшәп килгән бер ил бар;
Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ
Ҡыла торған йола бар...

Эйе, башҡорттоң тап ожмахҡа тиң Самарау илен һағынып иҫкә алыу был!..

### ...доғаланы донъяларҙы

Ат доғаларын (эпостарыбыҙҙы) хасил ҡылмыш атҡа табыныу йолаларын ентеклерәк юллаһаҡ, ҡитғабыҙға уның таралыу юлдары аша ана шул ат эйәһе башҡорттоң быуаттарҙан быуаттарға Күк Уралдан ҡайҙарға тиклем елеп барып

еткәнлеген, ил ҡороп донъя көткәнлеген шәйләйбеҙ. Төп күрһәткес хеҙмәтен бында борон-борондан урта быуаттарғаса (Ислам дине кергәнсе) башҡорттоң *Көнгә, Айға* арнап ат ҡорбандары салыу, мәйеттәрен ҡорғандарға ат менән ҡуша ерләү йолаһы үтәй. Ғалимдар аттың һәм уның менән бергә *башҡорт-арий* бабаларыбыҙҙың Күк Уралдан ҡайһы яҡҡа ҡайһы быуаттарҙа эркелеүен башлыса ана шул ат һалып күмеүле йола ҡалдыҡтарына ҡарап билдәләй. Бигерәк тә был боронғоларҙың, нәҡ хәҙерге башҡорттағыса, аттың ҡыу баш һөйәген һәм тояҡтарын һ.б. изгеләштереүенә ҡағыла — башҡорт ауылдарында бит ошоғаса ат баш һөйәген, бәлә-ҡазанан ҡурсалаусы һәм бәхет килтереүсе *“әмәл ит” (амулет)* рәүешендә, йорт ихатаһының ҡойма баштарына, ситән ҡаҙығына элеп ҡуялар, ә тояғынан ҡупҡан дағаны тупһаға ырымлап ҡағалар. Шулай уҡ юлда тояҡтан ҡатланып сирғып ҡалмыш балсыҡты ла, уңыш мул булһын өсөн, баҡса түтәлдәренә килтереп һалалар... Борон заман мәйетте лә “теге донъя”ға оҙатҡанда ҡәбергә шулай уҡ уны ҡурсалаусы ат менән, һис юғында аттың башы-тояғы менән ҡуша ерләп ҡалдырғандар, шуға күрә ошо йола ҡалдыҡтары, ҡитғабыҙҙың ҡайһы ғына мөйөшөндә табылһа ла, *башҡорт-төркилек күрһәткесе* булып тора.

Көн-Өфө юлының төньяҡ-көнсығыш (Һары юл) армыты буйлап Һары диңгеҙгә табан (Ҡытайға, Японияға) башҡорт аттарының елеп барып етеү осорон (б.э. тиклем ике мең йыллыҡ) ғалимдарға таянып әйткәйнек инде. Ә ошо юлдың көньяҡ-көнбайыш армыты *(Көн юлы)* буйлап Ер Кендеге Арҡайымдан Шүлгән (Үлгән йәки Мертвое море) диңгеҙенә табан Египет яғына ҡарай киткәндә, ул тарафтарҙа ла ат эйәләренең — Үҫәргән ырыу исеменең варианттарын һаҡламыш ер-һыу атамалары ярылып ята әле лә: Үҫәргәндең *Әсәк-мәре (Сакмара)* һыуының бик боронғо, ул Яйыҡҡа ҡушылмаған, ә тура Иҙелгә (Волгаға) аҡҡан сағындағы, оҙон үҙәненең ҡалдыҡ дауамы булған *Сәмәрәү (Самара)* йылғаһы, хәҙерге Волгоград янындағы *Сәр-әсә (Царица)* йылғаһы, *Әсә-Тора-Көн (Әстерхан)* ҡалаһы, баяғы Саҡмар-Самар һыуының йәнә килеп Дағстандағы аҙашы булған *Сагмур (Саҡмар)* йылғаһы, заманында (урта быуаттарҙа) хәҙерге Дағстан ерҙәрен биләмеш “Бүре-әсә-иле” (Берсилия) дәүләте, Төньяҡ Ҡафҡаздағы икенсе Ил-Бүре-әсә (Эльбрус) тауы һәм Каспий диңгеҙе көньяғындағы (Ирандағы) йәнә лә Ил-Бүре-әсә (Эльбурс) тауы, ғәрәп ярымутрауындағы Сәр (Сирия) ҡом далаһы һәм Сирия дәүләт исеме... Тап ошо юл буйлап Үҫәргән (Саргон) батша етәкселегендәге үҫәргән-башҡорт бабаларыбыҙ б.э. тиклем XXIV быуатта Тигр, Евфрат йылға буйҙарына — боронданғы үҙҙәренең Сәмәр хан иленең (эпостарыбыҙҙағы Сәмәрхан иленең!) дауамы булған Сәмәргә (Шумерға) ҡайтып етеп, ундағы шул сәмәрҙәрҙән (шумерҙарҙан) мираҫҡа ҡалмыш һуңғыраҡ осор дәүләтте буйһондороп, бөйөк держава төҙөгән; артабан был Саргон батша “Көнбайыштағы диңгеҙ аръяғы илен” (балсыҡ китаптарҙа шулай яҙылмыш) — Мысырҙы яулап алған һәм уның алтын тәхетенә менеп ултырған — боронғо Египеттың V батшалар шәжәрәһен башлаусы *Усерҡаф*[14] батша. Бабаларыбыҙ үҫәргән-скифтарҙың Көн-Өфө (Ҡәнифә) юлынан Ҡафҡаз аша Египетҡа йөрөүҙәре Геродот тарихында ла (I, 104-105) ныҡ сағыла. Боронғо Египеттың XXII һәм XXIII батшалар шәжәрәләрендә иһә “Үҫәргән” ләҡәпле *Осоркон I, Осоркон II, Осоркон III, Осоркон IV* батшаларҙың исемдәре теркәлгән. Үҙебеҙҙең “Оғузнамә”ләге бөйөк Оғуз башбаба (массагет-

[14] *Үсер-Ҡаф — Ҡафҡаз* тауы артынан (Башҡортостандан) килмеш *Үҫәргән,* тигән һүҙ.

башҡорттар) барымтаһын да хәтерләйек — боронғо Египеттың III батшалар шәжәрәһендәге Хуни (Һун) батша үҙе бит ул... Хатта урта быуаттарҙа ла, шул уҡ Мысыр тәхетен яулап алып, Мәмлүк дәүләтен ҡороп, бер нисә быуат буйына (1250 — 1806) хакимлыҡ иткән, ғәрәп мәҙәниәтенә тос өлөш индергән бабаларыбыҙ араһынан "Күренекле дәүләт эшмәкәрҙәре Насритдин әл-Насири әл-башҡурди, Сәнжәр әл-Руҡны әл-башҡурди, Алаитдин башҡурд әл-Насири, Ғилмитдин әл-башҡурди Беркун, Сарын әл-дин әл-башҡурди тарихи сығанаҡтарҙа күп иҫкә алына. Араларынан Насритдин әл-Насири ғәрәпсә гүзәл шиғырҙар һөйләмеш ғалим әмир булған. Мәмлүктәрҙең 1322 йылдың 3 мартында Дамаскта донъя ҡуйған. Бөйөк падишаһы Ҡыратай хазинадар Ғилмитдин әл-башҡурдиҙы ифрат аҡыллы дәүләт кешеһе, ғалим һәм әхләҡи йәһәттән өлгө булырлыҡ шәхес тип баһалайҙар. Ғилмитдин Сәнжәр әл-башҡурди — уның замандашы. Ғилмитдин башҡурд әл-Насири мысырҙарҙың илханиҙарға (Иран императоры башҡорт Ҡазан-ханға. — **Й.С.**) ҡаршы һуғышы ваҡытында 1303 йылда вафат булған бөйөк әмир ул" (Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Өфө, "Китап", 1994; 22-23-сө биттәр). Тимәк, Нил-Ағиҙел (Аҡ Нил) йылғаһы һыуының тәме башҡорт аттарына борондан танһыҡ булған, Көн-Өфө юлының хоҙайҙары ла бик борондан пирамидалар иленең изге хоҙайҙарына әүерелгән. Улар араһында һын-һүрәттәре ат айғыры ҡаҫағаһы (фаллосы) рәүешендә символлашҡан (Көн-атҡа табынғандар, тимәк!) Көн хоҙайы Амон-Ара (Амон-Ра), һуңғыраҡ дәүерҙәге шундай уҡ Көн хоҙайы Шу (Шүлгән-бейә?!) киң билдәле. Был хоҙайҙар ер йөҙөндә әҙәми затлы фирғәүендәр (Шүлгән батыр, Урал батыр?!) рәүешендә кәүҙәләнеп, баштарына баяғы аҫау-айғыр ҡаҫағаһын ишаратламыш *фалл* кейеп ултырғандар тәхеттә. Ә боронғо Египеттә Көн-әсәбеҙ (ҡояшыбыҙ) *Һары-Шүлгән-әсә* исемен дә йөрөткән булһа кәрәк (сүлгән — һүл-Көн һәм сүлгән-әсә — Солнце!), сөнки ул исем хәҙерге тарих китаптарына боронғо иероглифтарҙан урыҫсаға *Хора Змей (Һары Йылан!) тип* тәржемә ителә, ә "йылан" һүҙе "йылҡы" һәм "Шүлгән" тигәндең үҙгәртелеше генә икәне мәғлүм. Тап бына шул *Һары Шүлгән — Көн-әсәбеҙ* үҙе лә инде, *Йылан-әсә* рәүешендә, боронғо Египеттең донъяға билдәле ядкәр ташына һүрәтләп ҡалдырылған, сөнки бабаларҙың тәүдин тәғлимәтендә ***Өҫкө Донъяны*** һынландырмыш Африка ҡитғаһы күгендәге ***Көн (ҡояш) — Һары йылан*** сифатында, ***Аҫҡы Донъяны*** һынландырмыш Америка ҡитғаһы күгендәге ***Ай (Луна) — мөгөҙлө Аҡ йылан*** сифатында, ә ***Урта Донъяны*** һынландырмыш Евразия ҡитғаһындағы ер йөҙөн яҡтыртыусы ***Көн — Әсә-бүре*** һәм ***ат бейәһе*** *(Аҡһаҡ Ҡола, Һарысай)* рәүешендә,ә ***Ай — бизон-үгеҙ*** һәм ***ат айғыры*** *(Аҡбуҙат, Күкбуҙат)* рәүешендә һынланып, ер аҫтында (һыу төбөндә) иһә шулай уҡ ***Ағасаҡ ҡола*** *(ағасаҡ балыҡ)*, ә ***Ай — Ала буға*** *(алабуға балыҡ)* рәүешендә кәүҙәләндерелгән. Донъя-Ғаләм-Тереклекте башлап ебәреүсе һәм дауам иттереүсе ***Ер торого — Тора-абыз (Тора тау хоҙайы)*** иһә ер йөҙөндә *ат айғыры* ***Ҡара Юрға (Ҡара Ер-аға)*** сифатында юрғалаған... Тап бына ошо изге аттарға бәйле иң боронғо яҙма мәғлүмәтте Үҫәргән-Сәмәр (шумер) бабаларыбыҙҙың б.э. тиклем өс мең йыллыҡ аҙағындағы балсыҡ китабында күрәбеҙ: атын ыҙалап-ыйыҡлатып йәберләүсе һыбайлы һәм, шул ыҙаға түҙә алмай, һыбайлыһын арҡаһынан тәкмәстермеш ат тураһындағы мәҫәл бар унда. Был иһә башҡорттоң әлегәсә ауыҙ-тел ижадын

тәшкилләүсе “Ҡара Юрға”, “Аҡһаҡ Ҡола” доғалыҡтарына (эпостарына) туп-тура бәйле:

“Яҙ ҙа мине менәһең,
Көҙ ҙә мине менәһең,
Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләйһең,
Ҡабырғамды һанайһың.
Яҙ ҙа билем бөгөлгән,
Көҙ ҙә билем бөгөлгән,
Ҡара тирем түгелгән;
Ҡаҡ ҡаҙыҡтың ҡото юҡ,
Ҡабырғамдың ите юҡ...

*Шул саҡ Аҡһаҡ Ҡола имгәнгән аяғы менән ҡанһыҙ хужаһын тибеп осора”...*

Шул уҡ Үҫәргән-Сәмәрҙең (шумерҙың) балсыҡ китабындағы *Шүлгә*(н) батша тураһындағы гимнында ла ат малы телгә алына. Шүлгән-Үҫәргән (Саргон) тоҡомдары батшалыҡ иткән был Кесе Азиянан ат б.э. тиклем ике мең йыллыҡ баштарында яҡындағы Көнсығышҡа — хәҙерге Төркиә ерҙәренә лә ерегә, атты унда үҙебеҙҙең *Ҡатай (хет)* башҡорттары алып барып еткерә (Ғоҫманҡаялы ҡәберлегендәге ат баштары б.э. тиклем XVII-XIV быуаттарҙа ерләнгән). Мысырҙың Нил йылғаһы буйындағы Бухен ҡалғәһендә лә б.э. тиклем 1675 йыл тирәһендәге ат ерләнмеш ҡәбер бар, нәҡ был осорҙа Египет яҙмаһында “ат” тигән махсус иероглиф тәүбашлап барлыҡҡа килә. Нәҙек тояҡлы бейек Египет аттарының Төркиәләге баяғы Ғоҫманҡаялы ҡәберлегендәге *Ҡатай (хет)* аттары менән бер иш булыуы ла уларҙың Көн-Өфө юл армыты *(Көн юлы)* буйлап төньяҡтан — башҡорттарҙан килтерелеүен дәлилләй.

Б.э. тиклем ике мең йыллыҡтың икенсе яртыһында Ҡуңыр-Буға юлының Күк Уралдан Күк диңгеҙгәсә (Һинд оҡеанынаса) тартылмыш Күк юл армыты буйлап та *башҡорт-арий* ат-арбаһы Һиндостанға һәм Иранға киң тарала: мәйет янына ат һалып ерләнмеш боронғо ҡәберҙәр шул юл буйындағы Пакистанда бер нисә урында һәм Иранда бик күпләп мәғлүм; ғалимдар был ҡомарҡыларҙы *ҡумырыҡтарга (киммерийцам)* һәм *үҫәргәндәргә (скифам)* бәйләйҙәр, ә улары иһә сап-саф башҡорттар — әлегәсә башҡорт халҡы ырыуҙары булараҡ донъяға мәғлүмдәр. Ҡуңыр-Буға юлы буйлап алыҫ Көньяҡҡа табан *Инде (Инд)* йылға тамағынаса эркелмеш *башҡорт-арий* ат-арбалары, *Инде* йылға тамағынан көнбайышҡа боролоп, Күк Уралға оҡшаш таулы-далалы Фарсы ҡултығы яр буйҙарын үҙләштерә һәм тап шунда башҡорттоң боронғо ***Ҡуңыр-Буга дәүләте*** барлыҡҡа килә. Һуңынан был исем ***буга — мога*** үҙгәреше кисереп, үткән быуат донъя карталарына Иран империяһының ***“Могистан”*** өлкәһе рәүешендә теркәлеп йөрөй. Моғистандың төньяҡ сигенә терәлеп тағы бер ***башҡорт*** дәүләте төҙөлә, ул иһә баяғы карталарҙа шул уҡ Иран империяһының ***“Башкерд”*** өлкәһе тип яҙып йөрөтөлә (1-се һүрәттәге 1-се түңәрәк). Шул уҡ Фарсы диңгеҙ ҡултығына болғансыҡ һыуҙарын ҡойоусы Тигр һәм Евфрат йылғалары тамағына табан көнсығыштараҡ Көн-Өфө юлынан ҡайырылмыш Үҫәргән-Сәмәр (шумер) башҡорттары ла аҫаба Гөрөш (бөйөк Кир) етәкселегендә хәҙерге Шираз ҡалаһынан төньяҡтараҡ урынлашмыш ***Бүре-әсә (Пәрсә, Фарсы)*** дәүләтен төҙөй.

Был дәүләт тә, икегә бүленеп ҡоролошо буйынса, Күк Уралдағы иң боронғо ***Туған*** тәүдәүләтебеҙҙәй (баш ҡалаһы ***Арҡайым)*** булып, ул да тап шулай *Эске Башҡорт* иҫәпләнмеш *Үҫәргән як яртынан* (баш ҡалаһы *Пәрсә,* грекса *Персе-поль)* һәм *Тышҡы Башҡорт* һаналмыш *башҡорт як яртынан* (баш ҡалаһы *Башҡорт,* грекса *Пасаргад)* ғибәрәт була; тәүдинебеҙҙең дөйөм ҡануны буйынса, бында ла Үҫәргән (Пәрсә) яҡ — көньяҡ-көнбайышта, Башҡорт (Пасаргад) яҡ төньяҡ-көнсығышта урынлашып, Уралдан килмеш ***биш ырыулы Үҫәргән*** һәм ***ете ырыулы Башҡорт*** *(йәмгеһе бергә* ***ун ике ырыулы башҡорт халҡы***) вәкилдәренең дөйөм дәүләте була (1-се һүрәттәге 2-се түңәрәктә ике баш ҡала урындары ҡара өскөлдәр ярҙамында тамғаланған һәм исемдәре яҙылған). Иран дәүләтселлеге нәҡ ошо үҫәргәндәрҙең *Бүре-әсә (Пәрсә, Фарсы)* дәүләтенән башланғанлығы яҡшы мәғлүм. Был дәүләттең баяғы ике яртыһы бер заман шул урындағы үҙ аллы дәүләттәргә ***Пәрсәстанға*** *(Үҫәргән)* һәм Башҡорт (Башжарт) тауҙары итәгендәге ***Огузистанға*** *(башҡорт)* айырымланып, аҙаҡ килеп карталарға Иран империяһының ***Фарсистан*** (элекке *Пәрсәстан)* һәм ***Хузистан*** (элекке *Огузистан)* өлкәләре рәүешендә теркәлеп йөрөй (1-се һүрәттә тәре тамғалап күрһәтелгән). Һәм боронғо Ирандың тап уртаһында (Лот далаһында) *Бөрйәндәр* мәмләкәте лә булған, ә хәҙерен унда ***Бөрйән (Бирджанд,*** 1-се һүрәттәге 3-сө түңәрәктә) ҡалаһы... Күк диңгеҙ буйҙарын үҙләштермеш был *башҡорт-арий* бабаларҙың атҡа табыныуҙары Һиндостан эпосы "Махабхарата"ла батшаның изге ҡорбан салыу йолаһы аша ентекле тасуирланған: йыл һайын көн менән төн тиңәлгәндә (15 октябрҙә) батша үҙенең бикле торған иң шәп Аҡбуҙатын иреккә сығарып ебәрә лә, йыл буйынса шулай үҙ иркендә ҡалдырып, шул Аҡбуҙат тояғы (Хоҙай әмере!) тейгән бөтә ерҙәрҙе лә үҙенең мөҡәддәс биләмәһе итеп беркетә (ҡарышҡандарын һуғышып ала). Көн менән төн тағы ла тиңәлгәс, Аҡбуҙатты һыу буйында салалар, батшаның өлкән ҡатыны алтын энә менән ат башын өҙөп ала, уртансыһы көмөш энә менән — түшкәһен, кесеһе бронза энә менән ҡойроғон шулай эшкәртә. Башын түргә мендерәләр, ә ҡойроғон алтәргә аҫып ҡуйып, ҡанын изге һауытҡа һарҡыталар. Донъяның дүрт тарафының (Көн-Өфө һәм Ҡуңыр-Буға юл армыттарының. — *Й.С.*) вәкилдәре рәүешендә дүрт әжерсе (жрец) атҡа арнаулы доғалар уҡып тора... Һиндостандағы Сураштора (Заратуштра) динен (ул дин беҙҙең Башҡортостандан таралған) тотоусыларҙың изге китабы Ригведала ана шундай ***Бөрйән-эйә (Паржанья)*** тигән ямғыр яуҙырыусы изге атҡа бағышланмыш табыныу доғаһы (гимны) бар:

***Бөрйән-эйәгә доға (V, 83)***

***1***

Ошо маҡтау һүҙе менән саҡыр иң ғәйрәтлене!
Данлы Бөрйән-эйәне! Ал, табынып, ярлыҡауын!
Үкереүсе буға-үгеҙ[15], йәншишмә ағыҙыусы,
Үҫендәрҙе яралғыға орлоҡландырып йөрөй.

***2***

Ағастарҙы көл итә ул, үлтерә өрәктәрҙе.
Бөйөк ҡорал[16] эйәһенән дер ҡалтырай донъялар.

[15] Үкереүсе буға-үгеҙ — был осраҡта Бөрйән-эйә нәҫел үгеҙе сифатында данлана.

Хатта гөнаһһыҙ ҙа сүгә, буға кеүек ҡөҙрәтле
Бөрйән-эйә яуыҙдарҙы үлтергәндә дөһөрҙәп.

3

Толпарҙарын сыбырҡылап ашыҡтырған күсерҙәй,
Ямғыр хәбәрселәрен ул юрғалатып килтерә.
Арыҫландың күкрәүҙәре алыҫтан уҡ яңғырай,
Болоттарҙы Бөрйән-эйә мөлдөрәткән сағында.

4

*Ел-дауылдар ҡоторона, уҡ-йәшендәр атыла,*

Үҫемлектәр ҡалҡыныша, күк йөҙҙәре бүртенә.
Бөтә донъя ғаләмдәре сафлыҡ эсеп яңыра
Бөрйән-эйә апа-ерҙе[17] быуаҙытҡан сағында.

5

Кем ҡануны арҡаһында — мәрхәмәтле апа-ер,
Кем ҡануны арҡаһында — тояҡлылар ырғыша,
Кем ҡануны арҡаһында — мең-мең үҫен гөлләнә, —
Ошо Бөрйән-эйә беҙгә бирһен бөйөк ярлыҡау!

6

*О мәреттәр[18], һауығыҙсы беҙгә ямғыр күктәрҙән!*
*Аҫау айғыр[19] дәрьяларын ергә ағылдырығыҙ!*
*Ошо күк күкрәүе менән килсе беҙҙең яндарға,*
*Шифалы һыу түгелдереп, о атабыҙ аҫыра[20]!*

7

Ажғырып-үкер, дөһөрҙә, донъяға һал яралғы!
Мөлдөрәмә ◎р◎◎ арбаң менән йөрө әйләнеп!
Ауыҙы аҫтан сиселмеш һыу-һабаңды шәп һөйрә!
И Илаһым, тигеҙләнһен уялар һәм түбәләр!

8

*Оло ҡоҙоҡ күнәгеңде күтәр! Уны түгелдер!*
*Быуа йырған йырғанаҡтар йырлап алға урғылһын!*
*Майға ҡандырып һимерт һин йомарт ерҙе һәм күкте!*
*И Илаһым һыйырҙарға бирсе сихәтле һулау!*

---

[16] Бөйөк ҡорал — аталыҡ.
[17] Апа-ер (пайр) — байыр йәғни көндө байытыусы ер.
[18] Мәреттәр (йылҡылар) — ҡар-һалҡынды мәретеүсе, яҙ һәм ямғыр килтереүсе изге көстәр, Бөрйән-эйәнең ярҙамсылары.
[19] Аҫау айғыр — был осраҡта Бөрйән-эйә нәҫел айғыры — үҙенең сифатында һынлана. “аҫау айғыр дәрьяларын” — аталыҡтан ағылмыш ямғыр, тимәк.
[20] Аҫыра (асура, ә Авестала — аһура) — тормош-тереклек эйәһе, тормош килтереүсе, ерҙәге йән эйәләрен аҫыраусы хоҙай.

*9*

О Бөрйән-эйә, ҡасан һин ерҙе тетрәтеп кешнәп,
Күк күкрәтеп, яуыздарҙың йәнен алған сағында,
Быны бөтә Донъя-Ғаләм ҡабул ҡыла алҡышлап —
Ер йөҙөндә моронламыш есемдәрҙең көллөһө.

*10*

Килтерҙең һин безгә ямғыр — үҙ ваҡытында туҡтат! —
Кеше үтмәҫ сүлдәрҙе лә һин үтемле яһаның,
Үҫемлектәр тыуҙырҙың һин туйынырға халыҡҡа,
Һәм һин көллө есемдәрҙән алдың рәхмәт доғаһы!

## Европала елгән башҡорт аттары

Башҡорт бабалар нигеҙләгән боронғо Римда ла шундай уҡ дәүләт тантанаһы шул уҡ көндәрҙә гөрләтеп уҙғарылған. Дүрт ат егелмеш ике тәгәрмәсле арбаларҙы бәйге саптырғандар тәүҙә, еңеп сыҡҡандың уң яҡ (Башҡорт яғы. — **Й.С.**) ҡырыйға егелмеш атын изгеләштереп, ҡорбан итеп салғандар (һөңгө ҡаҙап үлтергәндәр), башын өҙөп, башаҡ-көлтәләр менән биҙәгәндәр. Шунан һуң Римдың изге юл (Ҡуңыр-Буға юлы?) яғы һәм Субура (сувар-сүмәр йәғни Сәмәр-Үҫәргән, Көн-Өфө юлы) яғы кешеләре *(Башҡорт ягы менән Үҫәргән ягы)*, шул изге ат башына эйә булыу өсөн, ҡара-ҡаршы алышҡан. Әгәр ҙә башты изге юл кешеләре йолоп алһа, улар уны батша һарайы диуарына илтеп элгән, ә инде Субура кешеләре эләктерһә, Малым-ат (Малимат) манараһына беркетер булғандар. Аттың ҡанын батша һарайының тупһаһына яғып (һөртөп), ҡалғанын яҙғаса һаҡлағандар һәм, яҙғыһын ҡорбанға салынмыш быҙауҙар ҡанына болғатып, мал-тыуарҙы бәлә-казанан ҡурсалау өсөн, ырымлап яндырғандар (йылҡы ҡанын һәм тирен һөртөп бәлә-казанан ҡурсаланыу башҡортта әле лә бар)... Әсә-бүре улдары Ромул (Урал), Рем (Шүлгән) тарафынан б.э. тиклем 754/753 йылдарҙа нигеҙләнмеш, тип һаналған "мәңгелек" Рим ҡалаһының Тибр йылғаһы ярында ултырғаны билдәле. Бына шул йылға Ромул һәм Рем осоронда шулар телендә башҡаса — *"Альбула*(к)" тип аталғанын белдереп, латин теле түгел был, тиҙәр ғалимдар. Латин авторҙары үҙҙәре уны заманында Ромул һәм Рем теленән *"алһыу-көрән йылга"* тип тәржемә ҡылыр булған икән. Тимәк, ике һүҙҙән хасил (ҡушма һүҙ) ул исем — *"ал-була(к)"* — тап башҡортса (*"ал"* — алһыу төҫ, *"булаҡ"* — йылға) яңғырай — Уралыбыҙҙағы *Ҡыҙыл-йылга* һыңары!.. Ә "р" өнөнөң ҡәҙимгесә *"л"*-ға әүерелеше арҡаһында хасил булмыш һүҙ *"булаҡ"* үҙ сиратында үҙенең тәүге әйтелешендә *"бураҡ" ("бүре")* икәнлеген, һәм, һуңғы рәүешенә күсеп үҙгәргәс тә, үҙенең *"бүре"* мәғәнәһен һаҡлауын *(булаҡ — волак — волк!)*,телебеҙҙең ошо ҡануны һөҙөмтәһендә *"бүрег-әр"* (йәғни *"бүре-ир" — үҫәргән-бүреләр)* ләҡәбенең дә *"болгар"* булып әүерелешен беләбеҙ. Ә боронғо Рим тарихсылары ул тел эйәләренең ысынлап та Һинд-европалы түгеллектәрен *("варварҙар")*,Ҡара диңгеҙ төньяғындағы Скифия (скифтар — үҫәргәндәр! — *Й.С.*) иленән килеүҙәрен, ырыуҙары буйынса *"энотр, авзон, пеласг"* булыуҙарын яҙа. Өҫтәрәк төҫмөрләнмеш башҡорт-иҫке

римдар берҙәйлеге күрһәткестәренә таянып, беҙ сит телгә боҙоп күсерелмеш был ырыу исемдәрен төҙәтеп уҡый алабыҙ: *"энотр"* — инә-тор — һыйыр үгеҙенә табыныусы башҡорт-уғыҙҙар; *"авзон"* — абаз-ан (бәжән) — бәжәнәк-башҡорттар; *"пеласг"* — пеле-әсәк — бүре-әсәк йәғни үҫәргән-бүреләр...

Көн-Өфө юлының Ер Кендеге Арҡайымдан көньяҡ-көнбайышҡа табан Ҡыҙыл (Урта) диңгеҙгә[21] тартылмыш армыты хәҙерге Грецияның шулай уҡ үҫәргән-башҡорт бабаларыбыҙ нигеҙләмеш баш ҡалаһы *Өфөн (Афины)* аша *Талас (Делос)* — Крит *(бас-кирит — башкирт?)* утрауҙарынаса артылып, шунан уңға ҡайырылып, хәҙерге Испанияғаса тартыла. Талас изге утрауында үҙебеҙҙең *һипер-борей (Себер-бурай* йәғни буран яғы — Урал) бабаларҙың *артым итә (Артемида* — Шүлгән ләҡәбе) изге ҡорамы булған, Артымитә ҡорамына улар йыл һайын Көн-Өфө юлы буйлап Уралдан тейешле хәйерҙәрен — бойҙай һаламына төрөлмөш (игенселәр иле, тимәк!) затлы бүләктәрен ебәреп торған. Көн-Өфө юлының Крит утрауына еткәнлеген ундағы *Мин (Минос)* хоҙайҙың изге ҡорамының диуарына һүрәтләнмеш Ҡуңыр-Буға (үгеҙ) арҡаһында бейемеш (Уралдағы *Темәс-Шива* ғәҙәте!) *Мин* хоҙай (башҡорт Мин — *Мең* ырыуының хоҙайы) һәм ундағы шулай уҡ донъяға мәғлүм *Фест дискыһы яҙыуҙары* (улар башҡортса уҡыла!) дәлилләй. Башҡорт Крит утрауын ҡырағай грektар баҫып алғандан һуң да Көн-Өфө юлы кешеләренең мәҙәниәт саҡҡылары уларҙан һутланмыш боронғо грек китаптарында шөйлә һаҡланып ҡалған. Бүре-әсә хоҙайбикәнең әҙәмиләштерелгән һүрәте лә бар — башҡорттоң боронғо осло башлы ("графин") граф кәпәсен кейеп, таяҡ таянып тора ул ҡустыһы арыҫланбай янында; хоҙайбикәнең исеме *Ҡәрсәй (Ҡорт-әсәй,* бында *ҡорт — бүре).* Боронғо грektарға аралаш йәшәгән ошо ғәзиз бабаларыбыҙ теленән ҡайһы бер һүҙҙәр ҙә һаҡланған: *паҡана (бәке-энә* — оҙон хәнйәр), *палта-йау* (яу балтаһы), *яуҡыя* (һөңгө), *ян* (уҡ атҡыс ян), *ики-йә* (ике йәйә йәғни ян-йәйәле ике яугир һыйҙырышлы хәрби әрмә (арба). Ике тәгәрмәсле яу арбаһы күсәрҙәренә бысаҡ — *кера-йапи* (ҡыра-йәбе) йәки *ора* (ура, ураҡ) беркетелеп ҡуйылған — быларын боронғо һүрәттәрҙә лә йыш күрәбеҙ. Боронғо Афина халҡы ла башҡорттоң *Ҡара Юрғаһына* — "ҡара ат"ҡа табынған. Бигерәк тә бөтә аттарҙың эйәһе тип һаналыусы *Ер торогона* — әҙәми зат ҡиәфәтендә кәүҙәләнмеш *Тора тау* эйәһенә табыныусылар күп булған. Уны ғәҙәттә ике (игеҙәк) һыбайлы (Шүлгән менән Урал. — *Й.С.*) араһында аяғөҫтө баҫтырып торғоҙоп һүрәтләгәндәр, сөнки тәүдинебеҙҙә был ике батыр, Дәү Хоҙайыбыҙҙың ярҙамсылары булған башҡа ҡайһы бер хоҙайҙарыбыҙ кеүек үк, Тораның (Тора тау эйәһенең) балалары һәм иң яҡын ярҙамсылары һаналған. Игеҙәктәрҙең береһе — Аҡбуҙатҡа (Урал. — *Й.С.*), икенсеһе Ҡара Юрғаға (Шүлгән. — *Й.С.*) атланған. Йыш ҡына уларҙы, игеҙәк-һыбайлыларҙы, *ике ат* йәки *ике ат башы* ла алмаштырған (*Шүлгән-Көн* менән *Урал-Айҙың* ҡарыһүҙ-мифта,тәүге *әҙәм ҡиәфәтенән* арынып, тулайым *ат ҡиәфәтенә* керә барыуҙарының билдәһе. — *Й.С.*). Башҡортлоҡто тоҫмаллатыусы был *ат башы* билдәһен Көнбайыш Европаның төрлө мөйөштәрендә осратырға мөмкин. Неапольдәге ҡәбер-йорттоң (склеп) диуарына сағыу буяуҙар менән Үҫәргән (скиф) өйө һүрәтләнеп, ҡыйығының ике башына ике *ат башы* беркетелгән. Боронғо Англияла ла өй баштарын ике яҡтан ике *ат башы*

[21] Бик борон заман хәҙерге Ҡыҙыл диңгеҙ менән Урта диңгеҙ бер бөтөн тәшкил итеп, уның хәҙерге Урта диңгеҙ өлөшө лә Ҡыҙыл диңгеҙ һаналған.

биҙәгән, улар баяғы һыбайлы хоҙай-игеҙәктәрҙең *ләкәбе* менән инглиздәрҙә *лә һорса* (үҙебеҙҙең *һарысай* ат — Шүлгән-Көн. — *Й.С.*) һәм *һенгиҙ* (үҙебеҙҙең *һын-үгеҙ* — Урал-Ай. — *Й.С.*) тип йөрөтөлгән. Бөйөк Британияның сал ҡаяларында боронғоларҙың изге *Аҡбуҙат* һүрәттәре әлегәсә һаҡлана... Тәбиғәттең бер үлеп бер терелеүен (ҡыш һәм йәйҙең алмашыныуын) символлаштырмыш *Ҡара Ер-ағаны (Ҡара Юрғаны)* Урта Азияла һәм Иранда — *Сиявуш ("ҡара айғыр")*, Грецияла *Меланиппа ("ҡара ат")* тип, тап беҙҙеңсә атап табынғандар; баяғыса, көн менән төн тиңәлгәндә (15 оҡтябрҙә) шуға арнап *ат бәйгеләре, сәсән әйтештәре* гөрләтеп үткәргәндәр.




Һүр. 9. Би-кинок (викинг) йәғни Бүре-әсә (буржан) тоҡомдарының һуғыш сәфәрҙәре

Көн-Өфө юлының тап ошо армытынан Бүре-әсә (Би-кинок – викинг) тоҡомло Үҫәргән бабаларыбыҙ бөтә Көнбайыш Европаға таралып, мәңгелек иҫтәлеккә унда үҙҙәренең изге *Бүре-әсә* исемен — *Бүре-әсә өйө (Пруссия)* иленә, ҡала исемдәре итеп *Бурзен* (Австрияла), *Буриж* (Париж) ҡалаларына, ә Уралдағы ер-һыу атамаларын иһә ундағы йылғаларға — *Сөн (Сена), Темәс (Темза)* ҡушып ҡалдырып, артабан улар *Бөйөк Брит (“Бөйөк Бүре-эт”тәр — Үҫәргәндәр) — Бөйөк Бөйөк Британия, Ир иле (Ирландия)* утрауҙарына барып сығалар; шул *Ир иле* (Ирландия) утрауында беҙгә таныш һәм беҙҙең хоҙайыбыҙ булмыш (Ибне Фаҙланды хәтерләгеҙ!) фаллос-манаралы һәм ҡойоп ҡуйған башҡорт тирмәле (боронғо Болғар ҡалаһы кеүек!) изге ҡала ҡоралар. *Бриттан — Әсә иле (Исландия)* утрауына өлгәшеп, уның көньяҡ-көнсығыш яр буйындағы караптар тороуға ифрат ҡулайлы диңгеҙ ҡултығына *Боргар (“болгар”*ҙың һыңары *бөрөг-әр* йәғни *Бүре-ир* — Үҫәргән) исемен бирәләр. Көнбайыш Европаның ерле ҡәбиләләре иһә уларҙы,

беҙҙең шул бабаларҙы, *Серк (у-Серк-ан – Үҫәргән)* тип белә, ә бөйөк хоҙайҙар төйәге (Урал тауҙары) йәғни *"ожмах иле" Серкланд (Үҫәргән иле)* иһә ҡайҙалыр көньяҡ-көнсығыштараҡ икәнлеген дә хәтерҙәрендә һаҡлайҙар. Үҙҙәрен *брит (бүрет, бүреләр)* тип атамыш был килмешәк Үҫәргән тоҡомо донъяға *ҡыйыу диңгеҙселәр* рәүешендә танылa, тап ошо *"диңгеҙ бүреләре"*[22] телдән-тәлгә *батыр-ас* (батыр-әсә) — *матрос* тип ләҡәпләнә, хәҙер ҙә диңгеҙселәрҙе *матрос* тибеҙ. Диңгеҙҙәрҙәге караптарҙы баҫып алып талауҙан да тартынып тормай улар. Шуға күрә диңгеҙ юлбаҫарҙарын да шул Үҫәргән ләҡәбе менән *бүрет — пират* тип атап йөрөтәләр. Улар үҙҙәрен *бүре-әсән (бүре-әсәнән таралған тоҡом)* тип тә ләҡәпләгәнлектән, Көн-Өфө юлының *бүрәсән-бүрзән — Бөрйән (йәғни Үҫәргән)* этнонимы был яҡтарға ла ереккән; бәғзеләр уларҙы *бүрег — варяг* тип тә йөрөткән; Алыҫ Көнбайыштағы был *"бүре балалары" варягтарға* илтмәле юл (һыу юлы) Ер Кендегендәге тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайымдан һәм Һаҡмар буйындағы изге Яғалса (Ҡаялса) тауҙан көньяҡҡа табан башланып, үҙенең оҙон һуҙымында бер-бер артлы түбәндәге һыу юлдарынан үткән: *Һаҡмар-Һамар* оҙон үҙәне (борон улар икеһе бер йылға булған) — *Иҙел-Волга — Уңға (Онега) күле — Алдағы (Ладога) күле — Әбин (фин,* Скандинавияға *әбин — алып ин) диңгеҙ ҡултығы — Балдаҡ (Балтиҡ, балдаҡ һымаҡ түңәрәк)* диңгеҙенә ҡоймош һигеҙ йылға тамағынан *(осонан) — ос-ҡан-туң-уба*[23] *(Скандинавия)...* Скандинавияның көнсығыш осондағы Ҡола (Кольский) ярымутрауынан Уралға табан тура илтеүсе икенсе бер (төньяҡ) һыу юлы ла булған: *Аҡ диңгеҙ — Төньяҡ Двина йылғаһы — Вычегда — Биәрме (Биарм, Пермь) ҡалаһы* (2-се һүрәт), унан Норвегия караптары хатта урта быуаттарғаса беҙҙең яҡтарға килгән. Тәүге әйтелмеш иң оҙон һыу юлының *"грекстарҙан варягтарға (күрекстәрҙән бүрекстәргә — бүре-Үҫәргәндәргә) юл"* тип йөрөтөлмөш армыты буйлап *Бүре-әсә (Пруссия)* иленән бер заман *Кейәү (Киев)* ҡалаһына *бүрег (варяг)* тоҡомло өс бер туған — *Ир-орог (ырыу ире), Сөн-әсә (бүре-әсә), Тора-бүре (ата-бүре)* кенәздәр килеп етеп, үҙҙәренең боронғо башҡорт *Бүре-әсәй (Рәсәй)* дәүләтселлегенә *(Киев Русенә) ҡабатлап* нигеҙ һала; боронғо урыҫ йылъяҙмаларына *Рюрик, Синеус, Трувор* тип теркәлгән улар... *Варяг-прустарҙы* йәнә *прутән, пруктән (бүреләрҙән, бүре тоҡомонан)* тип, *Пруссияны Прутения* тип тә исемләйҙәр. Унда барып сыҡҡан урта быуат ғәрәп сәйәхәтселәре ул халыҡтың *атҡа атланған* ғәййәр һуғыш суҡмарҙары булыуын, бейә һөтөнән ҡымыҙ яһап эсеүен, байрамдарҙа бәйгеләп ат сабыштырыуын ентекле хәбәр итә. Ә урыҫ йылъяҙмаларында: "Рюрик — варяг иленән килде... Йәғни прус ырыуынан, прус ере лә шул ырыу исемен йөрөтә, диңгеҙ аръяғында йәшәй һәм варяг атала улар", — тигән мәғлүмәттәр бар. Прус теленең бик һирәк ҡалдыҡтары ошо көндә боронғо латинса манускрипттарҙан көскә сүпләп алынған, башҡа тел эйәләре тарафынан бик ныҡ боҙоп яҙылмыш 800 генә һүҙе билдәле, әммә уларҙың күбеһендә бөгөнгө башҡорт теле һүҙҙәрен еңел танырға була... *Бүре-әсән — Бөржән (Бөрйән)* йәғни Үҫәргән хаҡындағы хаҡ яҙмалар Ибне Хардадбех, Ибне әл-Фәҡиһ, Ибне Рүстә, әл-Мәсғүди, Йаҡут кеүек ғәрәп илгиҙәрҙәре, географтарында осрай. Закария әл-Ҡазвини иһә бына ошоларҙы

---

[22] "Диңгеҙ бүреләре" — диңгеҙҙә йөрөүсе "бүреләр тоҡомо" — Үҫәргән-бөрйәндәр, тигән һүҙ; борондан уҡ (һәм хәҙер ҙә!) иң шәп диңгеҙселәрҙе шулай тип йөрөтәләр.

[23] Ос-ҡан-туң-уба — бында "ос" — йылғаларҙың ос-тамағы, "ҡан" — һыу, йылға, ә "туң-уба" — ҡарлы тау-ярымутрау (Скандинавия).

теркәп ҡалдырған: “Бөржән — төньяҡтағы бер иркен ил. Унда көндөң ҡыҫҡарыуы өс сәғәткә тиңәлә, ә төндөң оҙонлоғо егерме сәғәткә етә һәм йәнә киреһенсә. Ундағы кешеләр (бөржәндәр) маһтар һәм мәжүсиҙәр динен тота һаман (Сураштора дине һәм тәүдин тотоусылар. — *Й.С.*). Славяндар менән һуғыша улар. Күп яҡтары менән франктарға[24] оҡшағандар. Улар (бөржәндәр) төрлө һөнәргә һәм диңгеҙҙәрҙә гиҙергә бик оҫта”. Тап бына ошо ғәййәр “диңгеҙ бүреләре” Үҫәргән-Бөрйәндәр 1001 йылда уҡ караптарҙа Көнбайыш халыҡтары өсөн “билдәһеҙ ҡалған ҡитға” — хәҙерге Төньяҡ Америка ярына барып сығып, “Яңы Донъя”ны аҫҡандар ҙа инде (Колумбҡа тиклем үк), әммә быға уларҙың иҫе китмәгән — асыш тип һанамаған, сөнки башҡорттарҙың егерме биш мең йыл элгәре үк эт тиреһенә лә, ҡаяташ битенә лә һыҙып ҡалдырылған донъя атластары карталарынан (“Ватандаш”/2 – 3, 1997 журналында ул карталарҙы бирҙем) был ҡитғаны ла, башҡа ҡитғаларҙы ла ғәжәп теүәллекле күреп белгәндәр... Бүре-әсә тоҡомо һаналмыш Көн-Өфө юлы кешеләре үҙҙәрен йәнә *бургунд, вургунд (бүрегөндәр — бүре тоҡомдары)* тип атап йөрөткәнен дә онотмайыҡ. Бына ошо *бургундтарҙың (Үҫәргән-Бөрйәндәрҙең) заманында, үҙҙәренең* төп төйәге *Имай (Урал тауҙары)* тәңгәленән ҡубынып, V быуат баштарында Көн-Өфө юлы буйлап Көнбайыш Европаға үтеүҙәрен күрәбеҙ Византия тарихсылары Проҡопий менән Агафий мәғлүмәттәренән. Улар Европаның үҙәгендә нығынып, V быуатта шунда үҙҙәренең бойондороҡһоҙ *Бургунд (Үҫәргән-Бөрйән)* дәүләтен төҙөй, баш ҡалаһы — *Олойән (Лион).* Ул Көнбайыш ерҙәрҙә лә, тап Күк Уралдағылай, *Мөсәл (Мозель), Энә (Эн), Йәнне (Ионна), Об, Миәс (Маас)* һәм *Сөнә* менән *Сона, Әрә (Арру)* менән *Оло-әрә (Луара)* игеҙәк йылғаларыбыҙ ағыла; *Шаралы (Шароле), Ҡотдог-ор, Мәрүән (Морвен), Юрматы (Юр)* тауҙары ҡалҡына. IX быуатта үҙ-ара ыҙғыштар һөҙөмтәһендә Бургунд короллеге ҡап-урталай ике короллеккә бүленә (ҡәҙимгесә *Үҫәргән* һәм *Башҡорт* яҡтарылыр?). 993 йылда ҡабат берләшеп, *Урал-ата (Арелат)* дәүләтен тергеҙәләр, уның мәркәзе *Урал (Арл)* ҡалаһы була. Һуңынан был дәүләтебеҙ, әүәлге ҡеүәтен юйып, “изге Рим империяһы”на буйһоноп, урта быуаттарҙа иһә биләмәләре Францияға һәм Швейцария берләшмәһенә тороп ҡала, *“Бургунд”* тигән ғорур Үҫәргән-Бөрйән исеме генә әлегәсә һаҡлана ул яҡтарҙа, һәм ул ҡәүемдәр әлегәсә ғәййәр һуғыш суҡмарҙары, ат йәнле оҫта кавалеристар һанала...

Шул Үҫәргән-Бөрйәндәр изгеләштереп табынған һәм доғалығы Ригведаға теркәлгән *ат һынлы* баяғы *күк-йәшен эйәһе Бөрйән-эйәнең* исеменән ул яҡтарҙа (Көнбайыш Европала) ла *күк-йәшен хоҙайы* ләҡәптәре яһалған: литовса *“Перкунийа”,* кельтсә *“Һерчуниа”,* иҫке-көнсығыш немецса *“Виргундиа”,* готса *“Фаирдуни”,* иҫке исландса *“Фйергун”,* славянса *“Перун”* һ.б. (көлләһө лә шул Бөрйән-Үҫәргән). Башҡорт бабалар бик боронғо донъя атластарында ҡитғаларҙың карталарын да бүре (эт), үгеҙ, болан, ҡоралай,айыу, ағасбаш айыуы (ленивец), ат тиреләренә шул йәнлектәрҙең һындары рәүешендә һүрәтләгәнлектәре билдәле, шуларҙың тау ҡаяларына күсермәләренең ҡайһы бер өлгөләрен, әйтеп үтеүебеҙсә, матбуғатта ла биргәйнек (“Ватандаш” журналының 1997 йылғы 2-3-сө һандары). Шулай ҙа, ул боронғо донъя атласының бер өлгөһөн бында ла күрһәтеп үтеү хәйерле булыр (3-сө һүрәт); боронғо Үҫәргән биләмәләренә кергән Балхаш күленә

[24] Франктар — *франк, варанг — бүрегтәрҙе (варягтарҙы)* гректар шулай атаған, шул уҡ Үҫәргән-*бөрйән,* тимәк. Французларға ләҡәп шуларҙан ҡалған.

яҡын Тирәкте йылғаһы буйындағы Хантау (хан һүрәттәре — донъя карталары сыйылған тау) ҡаяһына б.э. тиклем IV-III мең йыллыҡтар араһында сыйып төшөрөлгән был мөғжизәлә Америка ҡитғаһы — *айыу* һәм *агасбаш айыуы (ленивец),* ә ҡалған ҡитғалар баяғы *ат Бөрйән-эйә* рәүешле һынландырылып, бабаларыбыҙҙың Ер шарын, ҡитғаларҙың урынлашыу һәм ярҙарының һыҙаттарын бигерәк яҡшы белеүҙәре сағылған (һүр.10):




Һүр. 1. Ҡаяташтағы донъя атласы

А — Төньяҡ Америка (айыу һынында);

Б — Көньяҡ Америка (ағасбаш айыуы — ленивец һынында);

В — тәүҡитғабыҙ тоташ Африка — Евразия — Австралия (толпар *Ҡара Юрға* һынында);

Г — Баффин ере утрауы (Канадаға ҡарай).

**Тәүҡитғабыҙ** тоташ Африка — Евразия — Австралия һынында асыҡ төҫмөрләнә:

1 — Камчатка ярымутрауы, 2 — Таймыр ярымутрауы, 3 — Аҡ диңгеҙ, 4 — Скандинавия ярымутрауы, 5 — Бөйөк Бөйөк Британия утрауы, 6 — Исландия утрауы, 7 — Пириней ярымутрауы, 8 — Урта диңгеҙ, 9 — Африка, — 10 — Гвинея ҡултығы, 11 — Мадагаскар утрауы, 12 — Мозамбик боғаҙы һәм Ҡыҙыл диңгеҙ, 13 — Сейшель һәм Маскарен утрауҙары, 14 — Чагос архипелагы һәм Мальдив, Лаккадив утрауҙары, 15 — Ғәрәп диңгеҙе, 16 — Һиндостан ярымутрауы, 17 — Андаман һәм Никобар утрауҙары, 18 — Суматра утрауы, 19 — Ява утрауы, 20 — Тимор утрауы, 21 — Австралия ҡитғаһы, 22 — Яңы Гвинея утрауы, 23 — Филиппиндар, 24 — Тайвань һәм Рюкю утрауҙары, 25 — Япония, 26 — Сахалин утрауы, 27 — Япон, Һары, Көнсығыш-Ҡытай диңгеҙҙәре тоташлай, 28 — Молукк, Сулавеси, Калимантан утрауҙары, 29 — Һинд Ҡытайы,

30 — Көньяҡ Ҡытай диңгеҙендәге утрауҙар һибелмәһе, 31 — Малакка ярымутрауы.

**Төньяҡ Америка ҡитғаһында:**

32 — Гудзон ҡултығы, 33 — Лабрадор ярымутрауы, 34 — Изге Лаврентий ҡултығы, 35 — Флорида ярымутрауы, 36 — Юкатан ярымутрауы, 37 — Калифорния ярымутрауы, 38 — Алыҫка (Аляска).

**Көньҡ Америка ҡитғаһында:**

39 — ◎р◎◎у-Бранку мороно, 40 — Амазонка тамағындағы ҡултыҡ, 41 — Гальнас мороно, 42 — Панама, 43 — Сан-Диего мороно.

Күренеүенсә, Американың төньяҡ һәм Көньяҡ ҡитғалары араһында (хәҙерге Панама каналы урынында) диңгеҙ боғаҙы (һыу) һүрәтләнгән, был иһә хәҙерге геологтарҙың бынан 25 мең йыл әүәлге Ер шарының неоген дәүер палеографик схемаһына тап килә. Шул уҡ ваҡытта Австралия ҡитғаһы, Һинд оҡеанындағы байтаҡ архипелагтар һәм утрауҙар бик боронғо дәү ҡоро ер ҡитғаһының ул ваҡыттағы айырымланмаған дауамдары рәүешендәге килбәтендә бирелгән. Шуныһы асыҡ: башҡорттар таш быуатта уҡ Ер шарының барлыҡ ҡитғаларында, диңгеҙ-оҡеандарында гиҙеп йөрөгән, ҡитғаларҙың һәм утрауҙарҙың географик координаттарын яҡшы белгән. Шуға күрә таш быуаттың Башҡортостандағы Шүлгәнташ һәм Испаниялағы Альтамира мәмерйәләрендәге һүрәттәрҙең, араларын меңәрләгән саҡрымдар айырһа ла, ◎р◎ үк тоҡом кешеләре (башҡорттар) яһағандай иш килеүҙәренә аптырарға ярамай…

Әйткәндәй, атластағы Төньяҡ Америка ҡитғаһының — айыу, Көньяҡ Американың — ағасбаш айыуы (ленивец) һындарында кәүҙәләнешенең дә сәбәбе бар: бик борон, ат-арба юҡ саҡтарҙа уҡ, Ҡуңыр-Буға юлының төньяҡ-көнсығышҡа тартылмыш бер армыты (Ай юлы) буйында хәҙерге Беринг боғаҙы аша *"Аҫҡы Донъя"*ға ғиҙеп үтмеш бабаларыбыҙ ул ҡитғалағы йылға буйҙарында суҡайып тороп балыҡ тотоусы сәйер айыуҙарҙың күплегенә, ә Көньяҡ ҡитғала иһә ағас баштарындағы бәләкәй генә айыу һымаҡ йәнлектәрҙең ботаҡтарҙа, ергә арҡаһын биреп, уңайһыҙ хәлдә аҫылынып тороуҙарына хайран ҡалған һәм улар аңында был ҡитғалар тап шул айыу-яныуарҙар ҡиәфәтендә һынланған. Алыҫкалағы (Аляскалағы) ҙур йылғаны ла шуға күрә *Аю-кан ("айыу-йылға")* тип исемләгәндәрҙер ҙә, тәүге "а" ҡыҫҡарыу һөҙөмтәһендә, *(а)юкан* — ***Юҡан//Юкон*** хасил булғандыр. Аюҡан (Юкон) йылғаһы буйҙарында әлегәсә айыуға табыныусы *Атапаск* — йәки, *атапаск-ир-ат* тип, башҡорттоң ҡәҙимге "ир-ат" төркөмләүен ялғап әйтһәк, — ***ата-Паскират*** — ***ата-Башҡорт*** тоҡомдары көн күрә; ә улар иһә, телдәре ныҡ үҙгәрһә лә, Уралдағы шулай уҡ *айыуға табыныусы Гәрәй-Ҡыпсаҡ* (С.И. Руденко, 320-се бит) башҡорттарының ырыуҙаштары булып төҫмөрләнә. Башҡорт халыҡ ижадындағы әҙәми ҡатындың айыуға бисә булыуы һәм бала табыуы тураһындағы "Айыуғолаҡ" әкиәте Алыҫка (Аляска) ата-башҡорттарының да (атапаски) бик яратҡан, киң таралған әкиәте икән. Улар ҙа, тап боронғо башҡортса, йәйгеһен — йәйләүҙә ҡабыҡ ҡыуыштарҙа (Башҡортостанда ҡабыҡҡыуыш, туҙлыҡыуыш ауылдары барлығын иҫләгеҙ!), ҡышҡыһын ҡышлаҡта *бураларҙа* (ағас өйҙәрҙә) торалар һәм үҙҙәрен, тап башҡорт ҡыпсаҡтарылай, ҡыу

ағас олоно ҡыуышлығынан — көпсәктән сыҡҡан, тип иҫәпләй; һөйләштәрендә башҡорт һүҙҙәре *лә* (мәҫәлән, *"бүрәнә", "бура", "ҡайыҡ")* бар. *"баски" (башҡорт)* этнонимын бында, Көнсығыш-Ҡытай диңгеҙендәге өҫтәрәк иҫкә алынған *Баски* утрауҙары һәм Испаниялағы шундай уҡ *Баск иле* атамалары һымаҡ уҡ, үҙҙәре менән бергә боронғо башҡорттар килтергәнлеге ап-асыҡ, сөнки тәүге кешеләрҙең Америка ҡитғаһына Күк Уралдан киткәнлектәре фән тарафынан иҫбатланған.

Ҡуңыр-Буға юлының тағы ла бер армыты (*Ай юлы*) шулай уҡ Уралдағы тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайым тәңгәленән Төньяҡ Боҙло оҡеанға — Ҡар диңгеҙенәсә — Төньяҡ Ер утрауҙарына табан тартыла. Был юлдың да башы тап Көньяҡтағы хоҙайҙар иленән (Күк Уралдан) һүтелгәнлеген тундра халҡы *нганасандар* ҡарыһүҙе дөрөҫләй. "Дейбо-нгур тураһындағы ҡарыһүҙ"ҙең "Ерҙең яратылышы" тигән бер сәхифәһендә нәҡ Уралдағы изге Ҡуш тауыбыҙ тураһында бара һүҙ: "Төньяҡтағыһы — ир-ат тауы, көньяҡтағыһы — ҡатын-ҡыҙ тауы", - тип әйтелә; өҫтәүенә, был Ҡуш тауҙы төньяҡтан — ир (Йөрәк тау! — *Й.С.*), ә Көньяҡтан әсә (Шәке тау! — *Й.С.*) терәтә, имеш... Ошондай уҡ бер риүәйәт башҡорт халҡында ла бар: "Борон-борон төньяҡтағы убаны егет батша убаһы тип, ә көньяҡтағыһын ҡыҙ батша убаһы тип йөрөтәләр. Имеш, был тирәлә улар икеһе батшалыҡ иткән була" (Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө, 1980, 66-сы бит). Нганасандарҙың ырыу-ара исемдәрен генә алайыҡ: *асянду* (әсәнде йәғни Әсә-бүре тоҡомо Үҫәргән), *купчик* (ҡыпсаҡ), *коҡары* (күк-гәрә), *нгойбу* (нуғайбәк), *нерхо* (нөркә)...

Ҡуңыр-Буға юлының шул уҡ Арҡайымдан төньяҡ-көнбайышҡа табан Ҡар диңгеҙле Скандинавияғаса тартылмыш армытынан — *ҡара юлдан* да башҡорттоң ат-арбалары, атҡа табыныу йолалары киң таралған Көнбайыш Европаға. Боронғо Византия тарихсылары Проҡопий, Иордан, Агафий һ.б. яҙыуынса, 406 йылда *визготтар (башҡорттар)* Испанияға барып етеп төпләнә; ул яҡтағы европалылар, дөйөмләштереп, *һун* тип атаған ул төрлө ырыу-ҡәбилә башҡорттарын, баҡтиһәң, Урал тауҙарынан алып Пириней тауҙарына тиклем *болан-үгеҙ (Ҡуңыр-Буға!)* юл башлап алып барған, тимәк, ул юл әлеге Ҡуңыр-Буға юлы булған... Шул һун-башҡорт бабаларыбыҙ ундағы *Бискай* диңгеҙ ҡултығына үҙ атамаларын бирә *(Бискай — бискар — башкир, башҡорт),* һәм ярҙары *билбауланып* уратып алған бик тыныс бер ҡултыҡ буйына *Билбау* ҡалаһын ҡороп, үҙенә башҡа бер башҡорт иләүе рәүешендә төпләнә; үҙҙәрен улар *баск-ир-ат (баскират — баскирт — башҡорт)* тип атап йөрөтә, ул иһә хәҙерге Уралдағы башҡорттарҙың улар һымаҡ уҡ быуаттар буйынса милли үҙ аллылыҡ өсөн көрәшеүсе туғандары — *баск иле* һәм *баск халҡы* булып тора. Өҫтәүенә, *баск* халҡын испандар — *васко*, французлар — *баскус*, ә басктар үҙҙәрен-үҙҙәре *вәзкерә* тип атай; был иһә тәүге ике өлгөләге "йотолған" һәм үҙгәргән "р" өнөн, өсөнсөләге "т" өнөн генә кире ҡайтарып тергеҙһәк, тәүгеләрендә — *басҡор (башкир),* һуңғыһында тулы ҡанлы *бәзкерәт (башҡорт)* килә лә сыға (баск телендә ошоғаса байтаҡ ҡына башҡорт һүҙҙәре һаҡланған). Басктарҙы һәм баск телен, дин йолаларын махсус өйрәнгән академик Н.Я. Маррҙың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, хатта XII быуатта ла Баск илендә, христиан дине ғәййәрләнгән мөхит уратыуында, баск-башҡорттоң христианлыҡҡа ла, мосолманлыҡҡа ла һыйышмаған *атҡа табыныу йолаһы* йәшәп килгән, *ат-хоҙайға* арнап буралған "сиркәү" — *ат ҡорамы* эшлгән...

Урал менән Скандинавия араһында б.э. тиклемге бик боронғо замандарҙан уҡ тығыҙ бәйләнеш булғанлығын, ике араны тоташтырғыс оло юлдан (тимәк, Ҡуңыр-Буға юлынан! — *Й.С.*) арбалы, саналы, һыбайлы һәм артмаҡлы каруандар өҙөлмәгәнлеген, боронғо Урал һәм Скандинавия халыҡтары мәҙәниәтенең бик күп уртаҡлыҡтарын да иҫбатланы ғалимдар. Шуларҙың иң ҡыҙыҡлыһы — Уралда һәм Скандинавияла бер үк алым менән яһалған бер иш сана табандарының, ағас ҡалаҡтарҙың шул алыҫ ара ике ерҙәге бик боронғо ҡатламдарҙан ҡаҙып сығарылыуы. Өҫтәүенә, был әйберҙәр Уралдан да көнбайыштараҡ бер ерҙә лә үҫмәй торған һәм Скандинавияла булмаған Урал ҡәҙер (кедр, эрбет) ағасынан яһалған, тимәк, Ҡар (Төньяҡ Боҙло) диңгеҙ яры буйҙарына беҙҙең яҡтарҙан атҡа егеп илтелгән... Боронғо Скандинавия халыҡтары үҙҙәренең ҡайҙан килеп сығышын, бабаларының кем булыуын, ҡайһы телдә һөйләшкәнлеген дә үҙ ҡулдары, ҡәләмдәре менән ап-асыҡ итеп ярып һалған урта быуаттарҙың география китаптарында: "Европа ҡитғаһының иң көнсығыш өлөшө — скиф иле, беҙ уны бөйөк Свитьод тип йөрөтәбеҙ... Каспий тип аталмыш диңгеҙ ярынан алып төньяҡтараҡ бөйөк Свитьодтың үҙенәсә арауыҡта... *Атаййән хан (Ҡатай-йән?! — Й.С.*) дәүләте урынлашҡан... Төньяҡ телдәрендә булған бөтә ышаныслы риүәйәттәрҙә беҙҙең хәҙерге был төньяҡ ерҙәргә (Скандинавияға) тәү башлап *төркиҙәр* һәм Азия кешеләре күсеп килгәнлеге әйтелә. Шуға күрә ышанып раҫларға мөмкин: үҙҙәре менән бергә улар бында төньяҡҡа үҙ әсә телен дә килтергән, һәм ошо тел Саксония, Дания һәм Швеция, Норвегия буйлап һәм Англияның бер өлөшө буйлап таралған. Был халыҡтың башбабаһы *Тор улы Атан (Один)*[25] *булған... **Төркиҙәр** тип аталмыш был халыҡ Нух пәйғәмбәр улы Йәфәттең балаһы Бүре-әсә (Фирәсә)*[26] *башбабанан тыуып таралған,* имеш... Шул яҡтарҙан тәүҙә Швецияға, Швециянан — Норвегияға, Норвегиянан — Исландияға, Исландиянан — Гренландияға күсенеп барып төпләнгән улар"... Һис кенә лә кемдәрҙер һанамыш "һаташыусы", "хыялый" Йыһат Солтанов түгел, ә бөгөнгө Скандинавия халыҡтарының урта быуат заман бабалары яҙып ҡалдырған былар ҙы! Шуларҙы дөрөҫләгәндәй, Исландия утрауының Көнсығыш ярында әле булһа *Фаскурдус (Башҡорт)* һәм *Боргар (Бөрйән)* ҡултыҡтары бар...

## Өс донъяны урап уҙған башҡорттар

Шулай итеп, Ер Кендеге Арҡайымдан Ер шарының 4+4= һигеҙ тарафтарына тартылмыш һигеҙ юл армыты буйҙарында кешелек донъяһының тәүге игеҙәк ике ырыуы (фратрияһы) *Үҫәргән-Башҡорт* билдәләре ер йөҙөндә үҙҙәре хаҡында һөрәнләп-ярылып ята, *башҡорт-арий* ат-арбаһының, *атҡа табыныу* йолаһының ҡомарҡылары башҡортлоҡтарын күҙгә төртөп ҡысҡыра. Улар бабаларҙың теүәллекле донъя атласына һәм ҡитғаларҙың силуэттарына тиклем һүрәтләнмеш сыймаларҙа башҡорттоң Ҡара Юрғаһы һәм Айыуы рәүешле һынланып, *башҡорт-арий* үҙенең ҡанатлы толпарында ҡитғалар һәм оҡеандар өҫтөнән Ер шарын айҡап йөрөгәнлеген, шуға күрә бөтә ер йөҙөн үҙенең биш бармағы кеүек белгәнлеген күрһәтә. Бабаларыбыҙ өлгәшкән был географик һәм космогоник

---

[25] Тор улы Атан (Один) — *Тора тау улы Урал.* Ата фратрияһы башҡорт тураһында бара һүҙ.

[26] Бүре-әсә (Фирәсә) — Шүлгән батырҙың имсәк әсәһе Бүре-әсә. Бында әсә фратрияһы Үҫәргән хаҡында бара һүҙ.

белемдең теүәллеге, Ер шарын һәм йыһандың башҡа есемдәрен үҙ-ара тығыҙ мөнәсәбәттә киң күҙ аллауы ғәжәпкә ҡалдыра беҙҙе: *Көн* һәм *Ай, — Урта Донъяның* (Европа һәм Азияның) күк йөҙөндә *лә*, ер йөҙөндә *лә* йылҡы малы *һарысай бейә (Көн)* һәм *Аҡбуҙат (Ай)* ҡиәфәтендә һынланмыш изге есемдәр, — *Ер Кендеге Арҡайым* аша ер аҫты һыуҙарына төшөп (Ҡояш һәм Ай байыуы), Көнбайыштан Көнсығышҡа "ер аҫтынан" йөҙөп уҙып, *Өҫкө Донъя* (Африка) һәм *Аҫҡы Донъя* (Америка) күктәренә аллы-артлы алмашлап күтәрелә; шул уҡ ваҡытта улар икеһе *лә* ҡайһы донъяла булыуҙарына бәйле үҙ ҡиәфәтен әленән-әле үҙгәртеп, *Көн-әсәбеҙ (апабыҙ)* Африка ҡитғаһы күгендә — *һары йылан,* ә шул уҡ ваҡытта Америка ҡитғаһы күгендә гиҙеп барған *Ай-ағабыҙ* иһә ҡуш мөгөҙлө *аҡ йылан* һынын ала (4-се һүрәт), шуға ла бит боронғо Египет кешеләре — *һары Көн-йыланға,* боронғо Америка кешеләре *аҡ Ай-йыланға* табынған. Ә Евразия ҡитғаһы кешеләренең, мәҫәлән, бөгөнгө башҡорттарҙың бабаларының, хоҙайҙары булып улар *(Көн, Ай)* икеһе *лә* бер үк мал *йылҡы* — изге *Һарысай бейә* һәм изге *Аҡбуҙат* ҡиәфәттәрендә *донъяны* ярлыҡап елгән... Ҡитғаларыбыҙҙың бөгөнгәсә килеп етмеш аталыштары ла бабаларыбыҙҙың шул *өс Донъя* һәм улар аша гиҙеп йөрөүсе *Көн* менән *Ай* булмыштарына бәйле һымаҡ:

1. ***Бозин*** *(боҙ-инә — "буҙ һыйыр")* — төньяҡтарҙа йәшәгәндәрҙең башбабаһының имсәк инәһе *бизон* (боҙ һыйыры), бер үк ваҡытта ул — *Ай* (боҙ-һыу йомарлағы тип белгәндәр Айҙы). Шунан килеп сыға:

*Б-ози-н — ози — ози-өйө —* ***Азия.***

2. ***Әсә-бүре-апа*** — Көньяҡтарҙа йәшәгәндәрҙең башбабаһының имсәк әсәһе *бүре*, ®р® үк ваҡытта ул — *Көн.* Шунан килеп сыға:

Ә-сәбүрапа — сәбүрапа — жәбрапа — ***Европа.***

3. ***Әһәпрәкә-Шүлгән*** *(әсә-апа-үр-аҡа-һүл-Көн — "аҫаба-үрҙән аға һыу-Көн" мәғәнәһендәге термин, йәғни Өҫкө Донъя). Шунан килеп сыға:*

*А) әһ-әпрәкә — әпрәкә —* ***Африка.*** *Һәм:*

*Ә-һәпрә — һәпрә — кәпрә —* ***кобра*** *(һары йылан).*

*Б) Шүлгән — шүлке —* ***йылҡы.*** *Һәм:*

*Шүлгән — шылған — жылйан —* ***йылан.***

4. ***Урал-аҫ-аҡ-ай-ул-ан*** ("Урал — Аҫҡы Донъяның аҡ Айы һәм улы һыйыр-ананың" мәғәнәһендәге термин. Шунан килеп сыға (®р® аҙ ҡыҫҡарып):

*Ур-ал-аҫ-аҡ-а — алаҫаҡа —* ***Алыҫҡа//Аляска*** *(Америка ҡитғаһының боронғо исеме). Һәм (икенсе яртыһынан):*

*Уралаҫ-аҡ-Ай-ал-ан — аҡ-айалан —* ***аҡ-йылан.***

Ошо уҡ есемдәр (*Көн* менән *Ай)* өс Донъяны бер юлы үҙе аша тоташтырмыш баяғы *Ер Кендеге Арҡайым* аша аҫҡа уҙғандарында ер аҫты һыуҙарына тарып, шул һыуҙарға яраҡлы йән эйәләренә әүерелә: байыған ҡояш рәүешендә ер аҫты һыуҙарына килеп төшкән толпар *Көн-һарысай бейә* — һыуҙа йөҙмөш *аҡ әсәк ҡола (ағасаҡ-ҡола*[27]*)* балыҡҡа, ә *ай-Аҡбуҙат — ала буға*[28] *(алабуға)* балыҡҡа әйләнә, имеш. Һәм шул ер аҫты һыуҙарынан ике балыҡ ҡиәфәтле йөҙөп

[27] Ҡола — игеҙәк төҫтөң (ала-ҡоланың) һыңары, үҙе һары, ҡойроҡ-ялы ҡара ат (балыҡ) төҫө.

[28] Буға — нәҫел үгеҙе бүгәй. Был терминда Айҙың йылҡыға алмашынғанға тиклемге тәүге үгеҙ ҡиәфәте сағыла.

үтеп, Көнсығышта ҡабаттан ер йөҙөнә — *Өҫкө* (Африка) һәм *Аҫҡы* (Америка) *Донъяларга* сыҡҡандарында иһә баяғы *агасаҡ-ҡола* балыҡ ҡиәфәтле *Көнөбөҙ* йәнә килеп йылҡыға йәғни *аҡ әсәк ҡола — Аҡһаҡ Ҡола* бейәгә әүерелә *Аҫҡы Донъяның* (Американың) ер йөҙөндә; ә баяғы *алабуга* балыҡ ҡиәфәтле *Айыбыҙ* иһә *аласыбар* атҡа *(Күкбуҙатҡа)* әүерелә *Өҫкө Донъяның* (Африканың) ер йөҙөндә. Был изге йылҡыларҙың ана шулай ер (һыу) аҫтынан ни рәүешле үркеп килеп сығыуҙары башҡорттоң мәшһүр һәм сал ҡарыһүҙендә, эпостарында йәнле һынландырылған:

Сысҡан һыртлы Ҡола бейә,
Шүлгән затлы[29] Ҡола бейә,
Йоморо тояҡ Ҡола бейә,
Тырпаҡ ҡолаҡ Ҡола бейә
Шүлгән күлдән сығып килә,
Күл төбөнән сығып килә...
**"Аҡһаҡ Ҡола".**

"Аҡһаҡ Ҡола" эпосында йәнә ошолар ҙа бар:

"Элек Урал буйында бик татыу ике ырыу йәшәгән", — тәүигеҙәк ырыуҙар (фратрия) *Үҫәргән (Шүлгән тоҡомо)* менән *Башҡорт (Урал тоҡомо)* игеҙәк ырыуҙың береһе (Үҫәргән) "ялан яҡҡа күсеп китә", — Уралдан көньяҡтағы *Өҫкө Донъяға.* Өҫтәрәк күрһәтелгәндәй, эпоста ла шул *Өҫкө Донъяга* ашҡан йылҡы итеп *Аҡһаҡ Ҡола* атала. "ә Уралда, Бишҡолон йылғаһы[30] яғында, тормош ғәҙәттәгесә, үҙ яйы менән аға бирә". Һәм, тәүдинебеҙҙең Донъя-Ғаләм ҡанундары буйынса, Күк есемдәрен биш төҫтә кәүҙәләндермеш "биш ҡолон" — *Һарысай* һәм *Аҡһаҡ Ҡола* ***(Көн),*** *Аҡбуҙат* һәм *Аласыбар* ***(Ай),*** *Ҡара Юрга* ***(Ер)*** үҙҙәре елгән сфераларҙан *Ер Кендеге Арҡайымга* "Бишҡолон йылғаһы яғына") олаға:

Билдәленән бишәү юҡ:

Алтмыш ҡолас ала[31] юҡ,
Сыңғыҙ ерән бейә юҡ,
Тубығы миңле туры юҡ,
Ҡарлуғас ботло ҡара юҡ,
Ялы ерҙән һөйрәтелгән
Аҡһаҡ Ҡола бейә юҡ...
**"Бишҡолон". —**

Үҫәргән тоҡомло йыуасалыларҙың Алтайҙағы Пазырыҡ ҡорғандарынан табылмыш б.э. тиклем V-IV быуаттар ҡомартҡылары араһында биш һыбайлы — "биш ҡолон" һүрәтле келәм бар...

*Көндөң* ер-һыу аҫтынан *Аҡһаҡ Ҡола* бейә ҡиәфәтендә сығыуын шул исемле эпосыбыҙҙа асыҡ күрһәк, *Айҙың* ер-һыу аҫтынан ер йөҙөнә *аласыбар* ат ҡиәфәтендә

---

[29] Шүлгән затлы — Аҡһаҡ Ҡоланың ысынлап та йылҡы ҡиәфәтендә кәүҙәләнмеш Шүлгән-Көн булыуына ишара.
[30] Бишҡолон йылғаһы — өҫтәрәк һаналмыш биш төҫлө йылҡыны өс донъяға ла уҙҙырмалы Ер Кендеге Арҡайым ҡоҙоғо (ер аҫты йылғаһы).
[31] Ала — икенсе урында ул *сыбар-ала (аласыбар)* тип атала.

пәйҙә булыуын *“Алабугат”* тигән икенсе бер гүзәл эпосыбыҙ тасуирлай (“Күк Ирәндек буйында”. — “Башҡортостан” гәзитенең 1994 й. 3 — 4 февраль һандары). Бабаларыбыҙҙың күҙаллауынса, *Һарысайҙы — **Шүлгән-Көн**, Аҡбуҙатты — **Урал-Ай**,* ә *Ҡара Юрға*[32], *Аҡһаҡ Ҡола, Аласыбарҙарҙы **Ҡара Ер-аға** (Ер торого — Тора тау)* эйәләре менеп елгән. Үҙәк Азиялағы Хотан өлкәһенең Будда дине тотоусылар ҡорамдарында тап ошо башҡорт ҡарыһүҙендәге *Аласыбарға* атланған, ҡулына символлаштырып-матдилаштырылмыш *Күк әсә (кәсә)* тотҡан ***Ер-аганы*** һәм кәсәгә тоҫҡалып күктән осоп килеүсе йә *аҡкошто,* йә *ҡарагошто* кәүҙәләндермеш һүрәттәр (5-се һүрәт) күп таралған булған (ҡайһы берҙәре Бөйөк Британия музейында һаҡлана). Бында беҙ башҡорт ҡарыһүҙенең бер өлөшөнөң йәнле һынланышын күрәбеҙ: *аҡкош **(Һомай)*** — Шүлгәндең имсәк әсәһе *Бүре-әсәнең, ә ҡарагош **(Йомай)*** — Уралдың имсәк инәһе *Һыйыр-Инәнең* үлгәндән һуң ҡошҡа әйләнеп күккә күсмеш йәндәре ул; әйтелгән һүрәттәге Ер-ағаның кәсәһен аҡкош-Һомай — Имир тәүбабаның *һул эмейендәге әсә агы (һөт)* менән, ҡарағош-Йомай — Имир тәүбабаның *уң эмейендеге инә агы (ыуыҙ)* менән тултыра, ерҙәге бар тереклектең әсәләренең һәм инәләренең түш һәм елендәренә тиртелһен өсөн... *Тора-ага (Тора тау)* менән *Күк-әсә (Могажар-Әмбә тау)* хоҙайҙарҙың бер-береһенә ҡатланыу *(секс)* символын бабаларыбыҙ, билдәле булыуынса, изге Ер Кендеген һынсыл ишаратлаусы тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайымдың үҙәгенә уртаһы кәсә-ҡоҙоҡло *Тором (терем, тирмә, төрбә)* — түңәрәк бина торғоҙғандар, Донъя-Ғаләм-Тереклектең *бишенсе ҡатламында болот һымаҡ йөҙөп йөрөмөш* мәңгелек *аҡ* тәшкил итеүсе Имир тәүбаба *аҡ-һөтө* менән *аҡ-ыуыҙы* баяғы һүрәттәге Ер-аға күтәреп тотҡан шул кәсәгә ағыла ла ер йөҙөндәге барса тереклектең түш һәм елендәренән тиртә, тип белгәндәр. Донъябыҙҙың *Үҫәргән ягы Эске Башҡортто* (Европа-Африка ҡитғаһын) Имир тәүбабаның мәңгелек аҡ-һөтө менән мәңге аҙыҡландырыусы миһырбанлы *аҡкош* башҡорт ҡарыһүҙендә *һомай* исемендә һынланып, ул иһә үҙе *“әсәм-аҡ”* (бүре-әсәмдең аҡ-һөтө) терминынан моронлағанға оҡшай: ***әсәм-аҡ*** *— әсәмай — **Сомай//Һомай*** һәм шул “сомай”ҙан, ***Сома*** рәүешендә, Ҡуңыр-Буға юлы буйлап Сураштораның (Заратуштраның) изге ***Ригведа*** китабына ла кергән (Һиндостанда), был хоҙайҙың *Вайшравана, Кувера* тигән ләҡәптәре лә булған. Ригведаның иң боронғо өлөштәрендә был хоҙайҙы *төньяҡтагы Сәмәрәү (Сәмәр хан) иленең* ҡурсалаусыһы, ожмахҡа тиң *Ата-Тора-ҡыры (уттара-куру)* йәғни Тора тау батшалығының барса тереклекте йәшәтеүсе эйәһе, тип һанайҙар, уны Ай һәм һыуға тығыҙ бәйләнештә күреп табыналар. Сураштораның (Заратуштраның) Көн-Өфө юлы буйлап Пәрсә (Фарсы — Иран) иленә барып еткән изге китабы ***Авестала*** был Һомайыбыҙ *әсәк-аҡ (захаҡ)* — Бүре-әсә аҡ-һөтө тип исемләнә, шул *“әзәк-аҡ”*тан телебеҙҙәге *“аҙыҡ-аҡ”* термины тыуғанға оҡшай. *“Һомай”*ҙың боронғо *“һомаҡ”* әйтелешенән һүҙ сәнғәте *“һамаҡ”* бар — сәсәндәребеҙ һамаҡлап данлаған

---

[32] Ҡара Юрға (ҡара ер-аға) — үҙ күсәре тирәһендә әйләнгән һәм бер үк ваҡытта йыһанда гиҙгән Ер шары һымаҡ һиҙелдертмәй ҙә тигеҙ елеүсе йылҡы. Аттың елеү сифаты буйынса үҙенсәлеген белдергән “юрға” термины башҡорттан башҡа телдәрҙә юҡ та:төрөктәр, мәҫәлән, “раһуан”, урыҫтар “иноходец” йәғни “башҡаса йөрөүсе”, тиҙәр. Боронғо башҡорт эпосының көҙгөһө һаналмыш Алтай (Алтай һәм Башҡорт борон икеһе бергә — бер халыҡ булған) эпосында, башҡорт сығанағынан ағылыуын белдереп, ат елешенә ҡарата “юрғалау” термины бар: бурыл бейә “һайыҫҡан осмаҫ һары сүлгә йәйелә төшөп юрғаланы”.

*әсәкәйебеҙ Һомайҙы.* Урал тауҙарының көньяҡ яртыһы шулай уҡ бөтә донъяға билдәле *Һомай (Умай)* тауҙары тип аталған.

Донъябыҙҙың *Башҡорт ягы Тышҡы Башҡортто* (Азия-Америка ҡитғаларын) Имир-тәүбаба *аҡ-ыуыҙы* менән мәңге емләндереүсе баяғы миһырбанлы *ҡарагош* башҡорт ҡарыһүҙендә изге *Йомай* исемендә кәүҙәләнеп, ә ул иһә *"инәйем-аҡ"* (Һыйыр-Инәйемдең аҡ-һөтө) терминынан моронлаған: ***инәйем-аҡ** — инә-йемаҡ — Йемай —* ***Йомай*** һәм шул *"Йемай"ҙан,* ***Йема-хвайшта*** рәүешендә, был термин Көн-Өфө юлы буйлап Сураштораның (Заратуштраның) изге ***Авеста*** китабына ла кергән (Иранда). Уны ла тап *төньяҡтагы* ожмахҡа тиң *Сәмәрәү (Сәмәр хан) иленең* ҡурсалаусыһы, ер йөҙөнә тереклек килтереүсе эйәһе тип һанайҙар, Сәмәрәүҙе лә изге Йема иле, тип ләҡәпләйҙәр. *"Инәйем-аҡ"*тан (*"инә-ем-аҡ"*тан) телебеҙҙәге *ем-аҡ* термины тыуған, әле лә ул еребеҙгә *йем* бирә, *йәм* бирә. *"Йомай"*ҙың боронғо *"йомаҡ"* әйтелешенән һүҙ сәнғәте *"йомаҡ"* бар — сәсәндәребеҙ *йомаҡлап* данлаған *Йомайҙы.* Урал тауҙарының төньяҡ яртыһы шулай уҡ *Йомай (Имай)* тауҙары тип аталған.

Ер-ағаның (Ер Терәге Тора тауҙың) тирәһендә өйөрөлмөш йәнлек-хоҙайҙар араһында, *бишенсе ҡат* күктә ак-һөт болото рәүешендә йәйрәп йөҙмөш *Һомай* менән *Йомайҙан* тыш, уларҙан аҫтараҡҡы *өс ҡатта* ла мөһим йән эйәләре булған. Ер-ағаның (Ер Торогo Тора тауҙың) ***Тимер Тирәк*** рәүешендә лә күҙалланыуын иҫләйек, был иһә шул уҡ *Атам-ир (Тимер) Тороҡ* (Атам-Ерҙең торогo, фаллосы) тигән бер үк мәғәнәне аңлата (был бөйөк фаллостың йәне, ***Тимер Ҡаҙыҡ*** йондоҙо рәүешендә, мәңгелеккә күгебеҙҙең төбөндә балҡып тора). Тап ана шул Тимер Тирәк һәм уның изге йәнлектәре рәүешле һынланмыш Ер-ағабыҙ (Тора тау) ишараты боронғо башҡорт ҡағанаттарының ҡурсалаусы символы булып килгән, бының тасуирламаһы иһә башҡорт ҡарыһүҙен үҙенә нык һеңдермеш алтай (элекке башҡорт) ҡәрҙәштәребеҙ эпосында яҡшы сағыла:

Етмеш айры күк тауҙың билтерендә,
Ете яман ҡуйы тайганың ҡултығында
Йөҙ ботаҡлы мәңгелек Тирәк
Айға-Көнгә буйы сағылмыш
Алтын һырлы булып тарбайып ҡатты.
Айға табан эйелмеш был янына
Алтын бөрө шул түгелгән,
Көнгә табан эйелмеш ул янына
Көмөш бөрө шул йәйелгән...
Ете аялы мәңгелек Тирәктең башында
Ике түңгәк — ат башындай алтын Кәкүк
Төнөн-көнөн өн алышып,
Йылҡылдашып ултырҙы...
Үләһенең тынын белер,
Уҙаһының йәшен белер.
Яҡшы йөрөрҙөң йөрөмтәһен
Күкелдәйҙер алтын Кәкүк,
Яман йөрөрҙөң салымтаһын (салынырын)
Аңлаталыр ҡуңыр Кәкүк.

Тимер Тирәктең был башында
Йылҡылдашып былар ултырҙы...
Ете аялы Тимер Тирәктә — урта билдә
Ике түңгәк — Ҡара Бөркөт бар булыптыр.
Тырнаҡтары алмас кеүек,
Тыныштары (һулыштары) һалҡын кеүек.
Тәңре-Күкле ул өс түбәлә (өс Донъяла)
Ай ҡанатлы ҡош үткәрмәç.
Өс Алтайҙың (Донъяның) ул һыртына
Айры тояҡ һынды (малды) үткәрмәç.
Тәңре-Күк төбө ҡарауылсыһы —
Ике Ҡара ул Бөркөтөм
Тимер Тирәктә — урта билдә
Ояланып, саңҡылдашып улар ултырҙы…
Ете аялы Тимер Тирәк төбөндә
Ике түңгәк — Ҡара Тойғол (эт),
Имеш, яталыр ҡан көçәп…

Башҡорт аңында хәҙер ҙә кәкүк кешеләргә ғүмер һанап бирә һәм кешеләрҙең ғүмерен саҡырып ала; бөркөт — күктә, эт ерҙә дошмандан һаҡлай. Башҡорт ҡағаны төрбәһенең түрендә (тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайым көпсәгендә) тап ана шундай — иң өçтә ике кәкүкле, урта билендә ике бөркөтлө, төптә ике тойғол-этле Тимер Тирәк торғоҙолор булған (хәҙерге яңы йыл шыршыһы шунан килә); был иһә ҡағанаттың Эске Башҡорт (Европа-Африка) һәм Тышҡы Башҡорт (Азия-Америка) ҡитғаларын бер юлы ҡурсалаусы тылсымлы символы булған. Шул символдағы *“ике бүкән — Ҡара Бөркөт”* ҡушарлығын (ике башлы бөркөт һүрәтен) Византия империяһы башҡорттарҙан үҙенең дәүләт символы итеп үҙләштерә; кафырлашҡан шул һөмһөҙ символ аҙаҡ, Византия империяһы емерелгәндән һуң, яуыз Рәсәй империяһының дәһшәтле дәүләт символына әүерелә...

## Ҡорбан салып баш өҙөү

Донъялағы абруйлы күп ғалимдарҙың ат һәм атҡа табыныуҙың ер йөҙөнә таралыуы тураһындағы һөҙөмтәләрен бергә йомғаҡлағандан һуң, мөхтәрәм Е.Е. Кузьмина ханым фән өсөн ифрат та хәүефле хәлде белдерергә лә мәжбүр: күктәге етмеш тылсымлы аттар тураһындағы риүәйәттәрҙең һәм атҡа табыныу йолаларының ҡасан, ҡайҙа һәм ни рәүешле килеп сыҡҡанлығы әлегәсә фәндә билдәһеҙ ҡала, тип эскәрһеҙ көйәләнә ул...

Бының өсөн ғәжәпләнер урын юҡ: глобаль күләмдәге был салдарҙан-сал мәсьәләне сисергә тырышҡан ғалимдар бит, үкенескә ҡаршы, Күк Уралда (Тәүтөйәктә) тыумыш *тәүкарыһүҙҙең (мифологияның)* төрлө-төрлө ҡитғаларға, халыҡтарға һибелгән “көршәк ярсыҡтарын” ғына йыйып алып, ҡуша йәбештереп, ҡасандырғы бөтөн көршәкте тергеҙергә маташалар, әммә ул барып сыҡмай, сөнки көршәктең барыһын бергә тоташтырғыс төп-ирнәүен — тере башҡорт ҡарыһүҙен (мифын) ситтә торғоҙоп ҡалдыралар, уны юҡҡа һанайҙар (“Донъя халыҡтары

мифтары" тигән энциклопедик һүҙлектә лә тап шулай, "башҡорт мифологияһы юҡ" тип, ап-асыҡ шаҡырайтылған)...

Мәсьәләнең төп асылы ҡорбан салып *баш өҙөүгә* төйнәлеп йомаҡланғанға, һәм ул йоланы үтәүҙә йә әҙәм башы, йә ат башы өҙөлгәнгә, "ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы" тип, икеһе бергә бер кимәлдә йөрөгәнгә, фән асыштары менән ҡарыһүҙ (миф) табыштарын ҡауыштырып, әҙәм менән йылҡының бергә бауланмыш төп шәжәрәһен барлайыҡ. Һәм шуны ла киҫәтеү урынлы булыр: түбәндә бирелмеш *сексҡа* (оят мөнәсәбәткә) бәйле йөмләләрҙән уҡыусы баҙап йә оялып ҡалмаһын, сөнки был юлдарҙың авторы уйлап сығарған уйҙырма түгел улар, ә бөйөк бабаларыбыҙҙың Донъя-Ғаләм-Тереклекте танып-белеү тәғлимәте һәм шуларҙы хәҙерге заман донъя ғалимдарының тикшеренеп асышы. Шулай итеп:

***Донъя-ғаләм-Тереклек яратылғанда:***

Ер ағаһы (тороғо) Тора тау менән Күк әсәһе (Әмбәһе) Моғажар-Әмбә убаһы бәрелешкәндә *(ғаләми секс йәғни),* Әмбәләге ҡыҙлыҡ пәрҙәһе — Донъя-Ғаләми хәрәкәтте быҒаулап тотоусы "йылан" дың башы — Әмбәгә бәрелеүсе Тора тау тарафынан өҙөлөп (башҡортта әлегәсә осраған һәр йыландың башына ҡаҙыҡ — фаллос! — ҡағыу йолаһы бар), шул бәрелештә Ер һәм Күк бер-береһенән айырылып, ике-ара урталыҡта өсөнсө ҡатлам — Донъя-Ғаләм-Тереклек хасил була, йәнле тормош башлана **(Ф.Б.Я. Кейпер).** Тора тауҙың тап ошо "йылан өҙөү" батырлығы Ригведала — Индраның, "Урал батыр"ҙа — Уралдың, ә христиан динлеләр риүәйәттәрендә ***аға-ер-ағай*** *("фаллос — ер фаллосы"* тигән һүҙ) — *а-гаерағай — гаерағай —* ***Георгий-****еңеүсенең (Святой Георгий-Победаносец)* батырлығы рәүешендә данлана...

Бәрелешкәндә ике яҡ та тәүге яра-йәрәхәткә (зәғифлеккә) дусар була: Күк Әмбәһенең ҡыҙлыҡ пәрҙәһе ("йылан" башы) өҙөлә (шунан, имеш, ҡатын-ҡыҙҙағы килем-күрем), Ер Тороғоноң да осло башы мөнтәлә (шунан, имеш, ир-атты сөннәтләү). Был тәүге зәғифлек ҡарыһүҙ һәм риүәйәттәрҙә ғәжәйеп тә үҙенсәлекле сағыла: һыңар ботло бөркөт Гаруда (Ер-ата), Аҡһаҡ Ҡола һәм аҡһаҡ Ҡара Юрға, аҡһаҡ Гермес (Ер-абыз), Аҡһаҡ Тимер йәки Тимер-ләң ("Тимер-фаллос")...

Донъя-Ғаләм-Тереклектең *сексуаль* йәһәттәге ошо *тәүге хәрәкәтенең* — ер йөҙөндә тереклек йәшәй башланышының тәүге шарты рәүешендә бер юлы "өҙөлгән" ике "баш", күренеүенсә, ябай ғына баштар булмайынса, ике яҡтан ҡотолғоһоҙ бер-береһенә тоҫҡалып уҡталыусы *аталыҡ ҡото* (сперматозоид) һәм *инәлек түле* (яйцеклетка) үҙҙәре булып сыға... Вафат булып ҡара гүргә (ергә) әйләнгән Имир-тәүбаба тәненең әле һаман тере ҡалған төпкөлөндә — гүр (ер) ҡарынында бына ошо ике "баш" бергә ҡушылып, бер-береһен *ҡотайтып* та *бөтәйтеп,* донъялағы барса буласаҡ кешеләрҙең башбабалары һәм бер юлы *Көн* менән *Ай* булып гүрҙән (ерҙән) тыуасаҡ[33] игеҙәктәрҙең — Шүлгән менән Уралдың — яралғыларына әүерелә лә икеһенә лә йән керә (6-сы һүрәт). Әммә был ваҡытта инде гермафродит-хөнәсә (ир-ҡыҙ) тәбиғәтле Имир-тәүбаба Донъябыҙҙы хасил

---

[33] Төрки халыҡтарҙа "Гүр улы" тигән эпостар, тау ҡаяһын ярып тыуған батырҙар тураһындағы риүәйәттәр билдәле.

итеү хаҡына үҙе вафат булып өлгөргәнлектән, был тәүге игеҙәктәр *(Шүлгән-Көн* менән *Урал-Ай),* донъяға тыуып өлгөрә алмайынса, гүр (ер) ҡарынында ҡалалар, үҙҙәренең донъяға тыуыр — гүрҙән (ерҙән) сығыр мөҙҙәттәрен зарығып көтәләр. Күренеүенсә, "баш өҙөү" йолаһы, һуңынан кемдәрҙер уйлап сығармыш ҡына ырым булмайынса, тәүге Донъя-Ғәләми секс фәлсәфәһенә үк һалынған булған, ул иһә ергә тереклектең тыуыуы, дауамланыуы өсөн кәрәк — "береһен үлтермәй тороп, икенсеһен терелтеп булмай", ти бит башҡорт мәҡәле...

2. *Машаҡ тау* ҡарынынан (гүрҙән) изге Бүре-әсәбеҙ — Шүлгәнде *(Көндө),* ә *Нары тау* ҡарынынан (гүрҙән) изге Боҙан-инәбеҙ (бизон-һыйыр) Уралды *(Айҙы)* тыуҙырып алып, имеҙеп үҫтерәләр. Шуға күрә, *"әсә (инә) һөтө ебәрмәй",* тигән башҡорт мәҡәле буйынса, Шүлгән *(Көн),* Имир-тәүбабанан килмеш кешелек ҡиәфәтенә өҫтәп, ошо имсәк әсәһенең *бүре* (йәки арыҫлан) ҡиәфәтен, ә Урал *(Ай),* шулай уҡ Имир-тәүбабанан килмеш кешелек ҡиәфәтенә өҫтәп, имсәк инәһенең *һыйыр* (үгеҙ) ҡиәфәтен ала (шумер балсыҡ китаптарындағы Һүлгөмөш менән Инәкүгеҙе — Гильгамеш менән Энкиду ҡиәфәттәре) һәм улар шулай ярым әҙәми, ярым януари ҡиәфәтендә гиҙә. Бына ни өсөн Шүлгән тоҡомо Үҫәргәндәр үҙҙәрен — *бүреләр* (бөрйән, бургар, болғар, бургун, бургунд, варяг) тип, ә Урал тоҡомло башҡорттар үҙҙәрен — *үгеҙҙәр* (уғыҙ, оғуз, ғуз, оғур, уйғур) тип йөрөтәләр. Шумер балсыҡ китаптарында яҙылыуынса, был игеҙәк башбабаларҙың (Шүлгән менән Уралдың) кәүҙәләренең өстән бер өлөшө *(башы)* — үлемһеҙ Илаһи зат *(Көн* һәм *Ай),* ә ҡалған өстән ике өлөшө *(кәүҙәһе)* үлемесле бәндәүи тоҡом *(әсәбеҙ Һауа* һәм *атабыҙ Әҙәм),* имеш...

3. Йылҡыны ҡулға эйәләштереү, һыбайланып менеү һәм арбаға егеү ҡаҙанышы бабаларыбыҙҙың матди ҙа, рухи ҙа донъяһын ҡырҡа үҙгәртә һәм аңыбыҙҙағы Шүлгән *(Көн)* һәм Урал *(Ай)* бәндәүи-Илаһиҙарыбыҙ икеһе лә *йылҡы* ҡиәфәтен ала. Һөҙөмтәлә *Көн-әс* (Көн-әсә) терминынан — *Көн-аҫау* (бейә), ә *ат-Ай* (ата-Ай) терминынан *йылҡы* мәғәнәһендәге *ат* һәм а-*тай* — *тай* терминдары моронлай. Ә боронғо телебеҙҙәге *Көн-аҫау Ай-ҡары* (Көн һыуы һәм ай ҡары) — *Көн-аҫау айғыры* (аҫау-бейәнең айғыры ), *аҫау айғыры* тип әйтелә әлегәсә. Башҡорттоң шул "Көн-әсәү"енән Көн (конь йәғни йылҡы) — урыҫҡа, әсәү (әсәүә, шул уҡ йылҡы) иһә фарсыға йәғни "Иран теллеләр"гә термин булып ерегә. Төрлө осорҙарҙағы төрлө — бүре, үгеҙ, әҙәм, йылҡы ҡиәфәттәрендәге *Көн* менән *Айға* табыныу йолаларыбыҙ ҙа төрлө осорҙарҙа башҡорт аты, башҡорт ҡарыһүҙе (мифологияһы) барып еткән тарафтарҙың бөтә халыҡтарына ла тарала. Шулар араһында ҡорбан (кеше ҡорбаны, мал ҡорбаны) салып *баш өҙөү* йолаһы ғалимдар өсөн әлегәсә иң серле лә, әһәмиәтле лә бер йомаҡ булып тора: өҫтә күрһәтелгән иң тәүге, Ер менән Күк сексындағы "баш өҙөү" йолаһын ҡабатлаумы әллә был, ни өсөн?.. Бер кемдең дә башы етмәҫтәй шуның асылын аңлау — ҡарыһүҙҙең (мифологияның) йомаҡ асҡысын бирер.

Төркиҙәрҙә күп быуаттар буйынса, *йылҡы башын өҙөү* йолаһы менән бер ҡатарҙан, *кеше башын өҙөү* йолаһы ла үтәлеп килгәнлеге билдәле: башҡорттарҙа дошман һаналмыш "кешене кеше осратһа, башын ҡырҡып алып китә, кәүҙәһен яткырып ҡалдыра", ти бит Ибне Фаҙлан да... Шул уҡ X быуатта, Ф. Энгельс яҙыуынса, герман ҡәбиләләрендә үҙ ата-әсәләрен ашау йолаһы булған. Ә башҡортта әлегәсә ҡан дошманына ҡарата "башыңды ашармын", "ҡаныңды

эсермен” тигән оторо янау бар, “дошманы уның башына етте”, “башын дошман ашаны” тип тә әрнейбеҙ ҡайһы саҡта:

Ут яғалай шеш күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем...
Имәнесле баш күрҙем,
Баш күрҙем, ау, баш күрҙем...
**“Иҙел йорт”.**

Ҡатай императорҙарының XII быуатта ла кеше ҡанын эсеү йолаһын үтәүҙәре империяның тарихынан яҡшы мәғлүм. Каннибализм күренештәре, Ф. Энгельс әйтмешләй, ер йөҙөндәге бөтә халыҡтарға ла хас булған, бының үткер сағылышы үҙҙәрен “цивилизаторҙар” тип иҫәпләүселәрҙең христиан динен дә тылсымлаған: христиандар әлегәсә, сиркәүҙәрендә “Причащение” йолаһын үтәп, поп ҡулынан кескәй көлсә — “Ғайса пәйғәмбәр тәне”н ашайҙар, һәм йотом шарап — “Ғайса пәйғәмбәр ҡаны”н эсәләр... Ғалимдар был йолаларҙы, ашалған кешенең көс-дарманын үҙенә һеңдереү маҡсатында үтәлгән, тип аңлата, тик был ғына был йоланың төп сәбәбен һәм үтәлешенең төп мәғәнәһен аса алмай тулыһынса. Әйтеп үтеүебеҙсә, әлбиттә, ҡарыһүҙҙәге Донъя-Ғаләм-Тереклек яралыу кимәлендәге *тәүге секс* та ята бының башында: Илаһиҙарҙың тәүге сексуаль йәһәттән “баш өҙөү”ҙәре кешеләрҙең ысынбарлыҡтағы баш өҙөү йолаларында ҡабатлана. Ләкин ир һәм ҡатын араһындағы тәбиғи секс йолаһының битәбиғи ҡанлы ырым — әҙәм, мал үлтереү йолаһына әүерелеше һуңғыраҡ тарихи осорҙарҙа булған булырға тейеш, ә элек ул шул уҡ Илаһи тәүге енси “батырлыҡ”ты бәндәләрҙең шул уҡ *секс* йәһәтендә бермә-бер ҡабатлауы рәүешендә генә башҡарылған, бының дәлилдәре бар. Көньяҡ Америка ҡарурмандарында емеш-еләк йыйыу менән көн күреүсе, әлегәсә бик боронғо таш быуат дәүерендә йәшәүсе бер “ҡырағай” ҡәбилә, мәҫәлән, шул тирәләге аҡ тәнлеләрҙең биш йәшлек ҡыҙын урлап алып китеп, бәлиғ йәшкә еткергәнсе аҫырап үҫтерә (аҙаҡ был ханым, аҡ тәнлеләр яғына ҡасып ҡайтып, “ҡырағайҙар” араһындағы тормошон китапҡа яҙа). Ҡыҙҙың өлгөрөүе — беренсе килеме күренеү менән үк, ҡәбиләнең бер төркөм ир-егете сексуаль йәһәттән уны “тереклек тыуҙырыусыға әүерелдереү” — баяғы быуып-бығаулап тотмош “йылан башын өҙөү” йолаһын үтәй, һөҙөмтәлә был ханым — тулы хоҡуҡлы ҡатын-ҡыҙға, ә “йылан башын өҙөүсе”ләр тулы хоҡуҡлы ир-атҡа әүерелә...

Ләкин сексуаль йола ниңә ҡанлы ҡорбан салыу йолаһына әйләнгән, әйләнеүҙең сәбәптәре, маҡсаттары ни булған? Үткәндәребеҙҙән һорау алыу саралары инде юҡлыҡтан, ошо егерменсе быуатта ла алыҫ үткәндәребеҙҙә йәшәп ятмыш таш быуат ҡәрҙәштәребеҙгә мөрәжәғәт итәйек.

## Көн-Өфө юлы буйынан — оҡеан утрауҙарына

Ҡытайҙың Тайвань утрауы көньяғында өҫтәрәк әйтелгән Башҡорт (Баски йәки Баши) диңгеҙ боғаҙындағы шул уҡ исемле “изге” өс утрауҙан артабан көньяҡҡа уҙып китеп, Филиппиндарҙың Ыласын (Лусон), Самар, Меңдана (Минданао) утрауҙарын артта ҡалдырып, шундағы “сәйер” ҡәбиләләр тураһында

китап яҙған Арне Фальк-Ренне оҙатыуында Индонезияның *Яңы Гвинея* утрауына киләбеҙ. Тап шундағы таш быуат кешеләренең йәнле көнкүреше баяғы беҙҙе ҡыҙыҡһындырған сетерекле һорауҙарға ни әйтер?

Боронғо башҡорт *азаматтарының* аҙмыш ҡалдығы булыуы ла бик ихтимал *асамат* ҡәбиләһен генә алайыҡ. 1961 йылдың 18 ноябрендә бындағы *кеше баштарын өҙөүсе* ошо азаматтарҙың йолаларын өйрәнергә, өҫтәүенә, сувенирға берәй "кеше" (куши )[34] алып ҡайтып китергә тип, американлы Майкл Кларк Роҡфеллер (Нью-Йорк штаты гөбөрнаторы атаҡлы Нельсон Роҡфеллерҙың улы) утрауға килгәс, күп тә үтмәй, баяғы Арне Фальк-Ренне әйтеүенсә, *асаматтар* уның үҙенең башынан "кеше" яһап, "кәүҙәһенең итен бешереп, саго бутҡаһына ҡушып ашайҙар". Ә 1968 йылдың сентябрендә шул "ҡырағайҙарҙы" суҡындырырға тип килмеш Стэн Дейл һәм Фил Мастерс тигән ике миссионер-попты ла һәүетемсә бешереп ашаған *яли* ҡәбиләһе кешеләренән бының маҡсатын һорағас, "көсдармандары беҙгә күсһен өсөн ашаныҡ беҙ уларҙы", тип кенә аңлаталар. Ләкин был, күренеүенсә, ғалимдарға күптән мәғлүм дөйөм аңлатма ғына; йоланың асылын яҡшыраҡ төшөнөр өсөн, баяғы Яңы Гвинея азаматтарының (асаматтарының) аҡ тәнлеләр араһында полицейский булып хеҙмәт итеүсе Мбисин тигән уҙаманына һүҙ бирәйек:

" — Үҫмер йәшемдән уҙғас һәм үҙемде егет итеп тойғас, — ти ул, — атайҙарым (малайҙар ауылдың *ир-ат йортонда — "түбә"*лә йәшәүселәрҙең бөтәһен дә *"атайҙарым"* тип атай) миңә һынау үтергә ваҡыт еткәнлеген иҫкәртте.

-- Ә һин нисек итеп тойҙоң ул хәлеңде?

-- Миңә ҡатынлы булырға ваҡыт еткәнлеген, орлоғома ир-ат ҡеүәте керергә ваҡыт еткәнлеген тойҙом мин. Ә бының өсөн "ан" (кәрзин-һауыт) һәм ир-аттың *ҡыу баш һөйәге* кәрәк, юғиһә баштарға һунарсылыҡ ҡылыуға бәйле йоланы үтәп булмай... Мине ир-ат итеү өсөн, *баш өҙөү кәрәк...* Атайҙарым (11 ир) менән кәмәлә төндә Ти ауылына барымта яһап, Бонти тигән кешене үлтереп (үлтерерҙән алда исемен һорап белдек), "соко" (соҡой торған ағас бысаҡ) ярҙамында башын өҙөп алдыҡ, аҙаҡ унан бик матур итеп "кеше" (ҡыу баш һөйәге) яһаныҡ...

Был айҡанлы ауылда ҙур байрам булды. Ир-ат ҡоро киҫкә тиклем көнө буйы бейене, ә бер-нисә атайым Бонтиҙың кәүҙәһен, өлөштәргә бүлгесләп, Ир-ат йорто Түбә алдындағы ерҙе ҡаҙып ут яғылған соҡорҙа быҡтырып бешерҙе. Ҡатын-ҡыҙҙарға ла аҙ-маҙ өлөш сығарылды, ләкин иң тәмле ҡалъяларҙы — бауырын һәм енси ағзаһын атайҙарым ашаны… Миңә ит тәтемәне, сөнки мин Ир-атлыҡ һынауын үтмәгәйнем әле…

Баш һөйәген тишеп, бамбук көпшә тығып, шаман уның мейеһен һурып алды, "ан"ға (кәрзин-һауытка) һалды. Атайҙарым ул мейене саго тәлгәштәренән тирелгән һимеҙ ҡарышлауыҡтарға һәм саго бутҡаһына ҡушып ашаны, ашағанда баш һөйәген таҙартып, күҙ һәм танау соҡорҙарын һумалалап, унда ваҡ ҡабырсаҡтар һәм ынйылар батырҙы. Аҙаҡ "кеше"не (ҡыу баш һөйәген) казуарҡош ҡаурыйҙары менән биҙәнеләр".

Күренеп тора: *кеше башын өҙөү* йолаһы, Илаһи тәү йолалағы *"йылан башын өҙөү"ҙө* ҡабатлап, әҙәм балаларының тереклеге, үрсеүе хаҡына атҡарыла. Сөнки

---

[34] "Кеше" ( куши ) — ундағы асаматтар ( азаматтар ) үҙҙәре һунарсылыҡ ҡылып алып ҡайтҡан кеше баштарын шулай атайҙар.

кеше башына һунарсылыҡ ҡылғанда ла, башын өҙөрҙән элек, баш эйәһенең исеме һорап алына — баш өҙөүсенең яңы тыуар балаһына ҡушыу өсөн кәрәк был (шулай эшләнмәһә, бала исемһеҙ ҡала). Тимәк, был ҡәбиләлә бала тыуһын һәм исемле булһын өсөн, теге (ят) ҡәбилә кешеһенең, исемен әйттертеп, *башын өҙөргә* кәрәк — *әлеге лә баяғы шул*, "береһен үлтермәй тороп, икенсеһен терелтеп булмай", тигән башҡорт мәҡәле... *Ләкин* ниңә был йола, өҫтәрәк әйтелгән Америка "ҡырағайҙар"ының хәүеф-хәтәрһеҙ сексуаль йолаһы рәүешенән уҙып китеп, кеше-дошман башын өҙөүгә әүерелгән? Быға тормош үҙе этәргән булһа кәрәк боронғо бабаларҙы. Сөнки ҡәбилә ерҙәре сиктәренең аръяғындағы ҡәбиләләр, был ҡәбиләнең кешеләрен үҙ ерҙәре аша артабан уҙҙыртмай, сиктәр ҡыҫаһында *быуып-быгаулап* тотҡан, был иһә тәүге Илаһи секс ваҡытындағы Донъя-Ғаләм-Тереклекте *быуып-быгаулап* тотоусы дошман-йылан һәм уның *"башын өҙөп"* ырыҫланыу төшөнсәһен көндәлек тормошҡа күсергән: яңы ерҙәргә ынтылыусы бәрәкәтле хәрәкәтте ҡәбилә сиктәрендә быуып-бығаулап тотоусы ике аяҡлы кеше-дошман һәм уның *башын өҙөп* тотҡарлыҡтан ҡотолоу, ырыҫланыу кәрәклегенә килтергән...

"Ниһәйәт, мин оҙаҡ көткән мөҙҙәт тә килеп етте. Ауылдың бөтә йәш ҡыҙҙарын бер-бер артлы теҙеп ултырттылар. Улар боттарын киң айырып ултыра, ә мин, теҙем буйынса уҙып, шуларҙың береһен һайлап алырға тейеш. Мин Мипуҙы һайланым ҡатынлыҡҡа. Шаман уның бот араһына "кеше"не (ҡыу баш һөйәген) ҡуйҙы, ә мин уның тәңгәлендә баҫып торған килеш алға-артҡа бәүелеп (ир менән ҡатындың енси ҡушылыуын ишаратлау. — *Й.С.*) һәм ҡыу башҡа ҡарап һөйләнәм: "Банту был. Ул Ти ауылынан килде һәм бында мәңге ҡаласаҡ, ә һин, мин ер йөҙөндә йәшәгәндә, ҡатыным буласаҡһың". Шунан мине тәүбаба хөрмәтенә торғоҙолған иң ҙур Тораҡ (Тирәк) төбөнә (Ер Тороғо Тора тауҙы ишаратлаусы ағас-бағана төбөнә. — *Й.С.*) ултырттылар, шаман минең боттарымды айыртты, "кеше"не (ҡыу баш һөйәген), Мипу боттары араһынан алып, минең бот арама ҡуйҙы. Мин, ҡыу баш һөйәгенә күҙ йоммай текләп, өс көн, өс төн ултырырға тейеш булдым"...

Шаман, *өҙөлгән башты* икеһенең дә бот араларына ҡуйып, тәүге Илаһи секс ваҡытындағы *"йылан башын өҙөү"ҙе* ишаратлаған...

Шул өс көндән һуң йәш егетте "кеше" ҡыу баш һөйәге менән бергә кәмәлә йөрөтәләр ҙә, ярға килтереп төшөрәләр. Ә унда ауылдың барлыҡ ҡатын-ҡыҙы, ярҙан алып ир-ат йорто Түбәгәсә арауыҡта бер-бер артлы теҙелеп, боттарын киң айыра баҫып тора. Шуларҙың бот араларынан мүкәйләп үткәс кенә, һынау үтмеш азаматыбыҙ ысын ир-ат ҡорона керә. Быны мәғәнәһе, моғайын, *"йылан башын өҙөү"ҙән* килмеш тәүге мәңгелек ҡоттоң, өҙөлгән "кеше" (ҡыу баш) аша яңырып, ауылдың бөтә ҡатындарына ырыҫлы күсеүендәлер (яңынан-яңы Шүлгәндәр һәм Уралдар тыуһын өсөн)...

"Донъя яратылғандан алып үтәп килә минең халҡым был йоланы, — тип аңлата азамат. — Хәҙер ҙә беҙ тап шулай тип һанайбыҙ: бер ир ҙә, үҙ тыуған ауылының ир-ат йортона "кеше" (ҡыу баш һөйәге) килтермәй тороп, нәҫел таратырға хоҡуҡлы түгел"...

Был утрауҙа тағы *кәкүк* (куку-куку) ҡәбиләһе ир-аты ла кеше баштарына һунарсылыҡтың ифрат ғәййәрҙәре булып данлана, ә дошмандың ҡырҡып

алынған аталыҡ ағзаһы уларҙа кәләшкә егеттең иң шәп туй бүләге булып тора — буласаҡ ҡатын уны ашарға тейеш, был иһә уға тупырлатып улдар табырға ҡот-ҡеүәт бирәсәк. Кәкүк ҡәбиләһе ир-аты баштарға һунарсылыҡ ҡылғанында өҙөләсәк баш эйәһенә әҙәплелек күрһәтә: бысаҡ тотоп ҡорбанына яҡынлашҡас ул, уның һуңғы сәғәте һуҡҡанлығын, *"кәк-күк!"* тип, кәкүк булып саҡырып иҫкәртә; бамбук бысаҡ менән башын өҙөп алырҙан элек, исемен һорашып белә (был исем баш өҙөүсенең тыуар балаһына ҡушылырға тейеш). Башҡортта ла кәкүк ҡошо кешеләрҙең ғүмер сәғәтен билдәләүсе шомло ҡош һанала бит: кемдеңдер башы өҫтөндә осоп үтешләй, йәки өйөнөң түбәһенә ҡунып *кәкүк саҡырһа,* ул кешегә әжәл йәки бәлә-ҡаза килерен көт тә тор...

Инде Яңы Гвинеянан уғата көньяҡҡараҡ артылып, фольклорсы А. Рид оҙатыуында *Яңы Зеландия* утрауҙарындағы *мәре*[35] (маори) ҡәрҙәштәргә *лә* һуғылайыҡ бер юлы.

"Һис шикһеҙ, — ти инглиз яҙыусыһы Энтони Троллон, — маориҙар тураһында шиғыр менән генә һөйләргә кәрәк", — шул тиклем сағыу уларҙың тарихы һәм мәҙәниәте. Урыҫ ғалимы А. Кондратов яҙыуынса, "маориҙарҙың бөтә тарихы героик поэма рәүешендә уҡыла. Уның һынланыш урыны — Тын оҡеандың икһеҙ-сикһеҙ киңлектәре. Һынланмыш ваҡыт арауығы — һуңғы мең йыллыҡ башынан алып беҙҙең көндәргә тиклем". Автор ваҡыт мәсьәләһендә генә яңылышып ҡуйғандай — барлыҡ билдәләр, шул иҫәптән Зороастризм диненең тәүдиндәге Дәү Хоҙай Имир функцияларын да үҙенә йөкмәгән төп хоҙайы Ахура-Мазда йәки Урал батыр кеүек "берләштерелгән" хоҙайҙың маори ҡарыһүҙендә осрамауы маориҙарҙың был утрауға Сураштора (Заратуштра) реформаһына тиклем үк йәғни б.э. тиклем XVII быуаттан да элегерәк йәки шул осорҙа килгәнлеген дәлилләһә, улар бында тейәлеп килмеш легендар ҡәбилә кәмәһенең *"арава" — арба* тип аталыуы иһә был датаның боронғо сиге, кәм тигәндә, Уралдан тәү башлап Көнсығыш Ҡытай диңгеҙе яр буйҙарына башҡорттоң атлы арбаһы килеп етмеш б.э. тиклем ике мең йыл башы менән билдәләнергә тейеш.

Маориҙар үҙҙәренең башбабалары, бында күсенгәнгә тиклем, *һаваики* илендә йәшәгән, тип белә; башбабаларҙың әрүәхтәре шул элекке илдә ҡалған, маориҙарҙың йәндәре *лә* үлгәс шул илгә ҡайта, имеш. Диңгеҙ аръяғындағы ул *"аитаң"дар* (Ай-атаңдар – аруахтар) илендә, имеш, башҡорттоң тап ожмахҡа тиң Самарау илендәгеләй, йән эйәләре "ҡартлыҡты *ла,* ҡартайып үлеүҙе *лә* белмәйҙәр", мәңге йәп-йәш йәшәйҙәр... Бында беҙ *"һаваики"* иленең *а-һава-ики — **аһаба-аҡа*** йәки ***аҫаба-аға*** *—* башҡорт аҫабалар иле икәнлеген күрәбеҙ; бөтә кешелек донъяһына башланғыс биргән *башҡорт ун ике ырыуы* башбабаларының әрүәхтәре ысынлап та башҡорт-аҫаба иле булмыш Урал тауҙарын төйәкләй бит (һәр ерееһенең үҙ тауы бар). Шул аһабалар иленең алыҫ көньяҡ-көнсығыш сигендәге ( Тайвань аръяғында урынлашҡан Башҡорт утрауҙарындағы, тип аңлайыҡ. — *Й.С.*) *Көпө* исемле балыҡсы, балыҡ артынан ҡыуып, кәмәлә бер туҡтауһыҙ көньяҡҡа киткән дә киткән һәм ошо "ао-теа-роа" ("оҙон аҡ болот") утрауына — хәҙерге Яңы Зеландияға юлыҡҡан...

Балыҡсы бабаның исеме "Көпө" — көбө, көп, көпсәк (эсе ҡыуыш ағас олоно) икәнлеген шәйләһәк, термин тергеҙеү (реконструкция) ярҙамында килеп

---

[35] Мәре — һыу-һүл, Үҫәргән башҡорт ырыуының башбабаһы Шүлгәнде яралтыусы.

сыға *көпө-әсәк* (көпө-уҫаҡ) ***Ҡыпсаҡ*** — үҙҙәренең килеп сығышын *ағас көпсәге эсенән*, тип иҫәпләмеш башҡорт ырыуы *Ҡыпсаҡ*. Маориҙар бабаһы *Көпө лә шул уҡ Ҡыпсаҡ* түгелме?!. Маориҙарҙың күренекле юлбашсыларын тап боронғо башҡорт ҡыпсаҡтарындай, *көпсәк-табут* эсенә һалып күмеү йолаһы ла быға ишара, буғай...

Маориҙар хәтере һаҡлауынса, Көпө баба үҙе асҡан гүзәл утрау тураһында ырыуҙаштарына хәбәр итергә ҡайтып китә, ә улын утрауҙа торғоҙоп ҡалдыра: "Бәхил бул. Мин китәм. Инде бында әйләнеп килә алмамын"...

Көпө баба юлынан утрауға Хатупату юлбашсылығында ырыуҙаштары ағыла һәм шуныһы ғибрәтле: диңгеҙ юлын был ҡәбилә баяғы башҡортса "арба" (арава) исемле оло кәмәлә кисә — ҡитға буйлап ҡоро юлда уларҙы йөрөткән башҡорт атлы арбаһының иҫтәлегелер, моғайын... Хатупату юлбашсы етәкселегендә Яңы Зеландияға килеүсе шул бабаларын маориҙар *"арики"* тип ололай, был да ҡәҙимге үҙебеҙҙең *"арий"* бабалар булһа кәрәк.

Башҡорттағы кеүек үк, маориҙарҙа ла ырыу-ҡәбилә шәжәрәләрен ифрат яҡшы беләләр: ике маори осрашһа, баяғы Хатупату бабаға эйәрмеш бабаларының был утрауға ни исемле кәмәлә килеүен асыҡлап, бөгөнгө кемдең шәжәрәләге ҡайһы тармаҡтан шытыуын бик асыҡ билдәләйҙәр. Беҙҙәге ер (ир) хоҙай — уларҙағы күк хоҙайы "ранги" — *Оранғы (ороусы*, йәғни ир хоҙай).булып тора. Шул Оранғының "тане" — *тәнәй* (беҙҙәге Ер-оранғының фаллосы Тора тау) исемле малайы атаһы Оранғыға ҡыҙыл төҫлө (Көн-Өфө юлының төҫө!) сәкмән бүләк итеп, уны "төньяҡтан — көньяҡҡа, көнсығыштан көнбайышҡа" (Ер Кендеге Арҡайым аша киҫешеп үткән сатраш — *Көн һәм Ай юлдарына* ишара!) табан йәйеп һала ла, дүрт мөйөшөнә дүрт йондоҙ беркетә (Ер Кендеге Арҡайым аша киҫешеп үтмеш Көн-Өфө һәм Ҡуңыр-Буға юлдарының дүрт осона ишара!). Өҫтәүенә, беҙгә билдәле Көн һәм Ай юлдарын да, "сатраш" (кресть) рәүешендә, "биш йондоҙ беркетеп билдәләй": сатраш киҫешкән урталыҡта — бер йондоҙ, дүрт яҡ оста дүрт йондоҙ, был иһә башҡорттоң йондоҙло сәкмәнен хәтерләтә (С.И. Руденко китабынан ҡарағыҙ). Күренеүенсә, тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайым (Ер Кендеге) аша киҫешеп үтмеш һигеҙ юл армытын маориҙар ҙа хәтерҙәрендә ныҡ һаҡлаған...

Яңы Зеландияның тап Уралдағылай һалҡынса (бәрәңге йылына бер генә уңыш бирә), ҡарағай урмандары ҡаплаған таулы, йылғаларға бай тәбиғәте лә ике аралағы оҡшашлыҡты көсәйтә генә һымаҡ. Ҡарағай унда ла *"каури"* (ҡаури-ағай — ҡарағай!) тип, беҙҙәгеләй тип әйтерлек атала, бүрәнәнән бурап һалынған йорттарҙы ла *"фаре" — бура* тип йөрөтәләр. Бөтә ауыл йыйыла торған оло *бура* алдына изге һындар — игеҙәк башбабалар (үҙебеҙҙең Шүлгән менән Уралмы?!) ҡиәфәтендәге ырып-биҙәлгән ике бағана, тирә-яғына кесерәк бабалар ҡиәфәтле илле (беҙгә билдәле илле аҡ — иләк, ил?!) бағана ҡуйғандар. Маориҙарҙың ағастан осланған һөңгөһө лә *"тиаха" — таяҡ* тип аталып, эт йөнө (Үҫәргәндең бүреһе!) менән суҡлап биҙәлгән, таяҡ башына телен һәлендермеш эт-бүре ауыҙы ырып яһалған. Гәрсә Яңы Зеландияла бүре заты булмаһа ла, маориҙар ҡарыһүҙендә уның ләҡәбе — *изге бүре* бар; уны, тап башҡорттағылай, *"виро" — бүре* тип тә, *"мури" — мүре* тип тә әйтәләр; бүре теше уларҙа ла тылсымлы көскә эйә. Маори ирҙәре түштәрендә, тап Ибне Фаҙлан яҙған башҡорттарҙағылай, *"хәй-тәкә"* (фаллос) ишаратын йөрөткәндәр. Европа сәйәхәтселәре "ҡыҫҡа флейта" тип

атамыш, ә маориса *“коауау”* (ҡурай?!) исемләнмеш көпшәнән улар, көй сығарыу менән бергә, өзләп йырлағандар ҙа. Башҡорттоң тәүдинендәге хоҙайҙарҙың дүртеһенә табынғандар, шуларҙың береһе уларҙа ла *“тангароа” — Тәңре* тип бөйөкләнә (диңгеҙ төбөндә ултыра). Ләкин бөтәһенән дә өҫтә, — быныһы ла тап башҡорт тәүдинендәгесә! — Донъя-Ғаләм-Тереклекте бар ҡылыусы *“эйә”* (Дәү Хоҙай Имир) үҙе урынлашҡан. Башҡорттағы һымаҡ уҡ, маориҙар донъяһында ла вағыраҡ эйәләр мыжғыған: урман эйәһе, тау эйәһе, һыу эйәһе, һ.б. Башҡорт юхалары ла, *“патупаиарехе”* исемләнеп, берсә, ир-атҡа, берсә, ҡатын-ҡыҙға әүерелеп, маориҙарҙы борсоған. Үлгән кешенең йәне, башҡорттағылай, кәүҙәһен ҡалдырып осҡан, ҡайтып-китеп йөрөргә лә һәләтле булған. Һәр төрлө дейеүҙәрҙе, убырҙарҙы, ен-бәрейҙәрҙе *“мана”һы — мәнеһе* булған кешеләр генә тылсымлап еңә алған (белдекһеҙ бәндәне башҡорт хәҙер ҙә “мәнеһеҙ” ти бит). Изге тыйыу *“тапу”ҙы — тубаны* аша атлаған йән үҙенең йәшәү дарманынан — *мәнеһенән* яҙыр булған...

Маориҙарҙың ошолай үҙ тәбиғи ағылышында барған тыныс ҡына тормошон, тап үҙебеҙҙең Көк Уралдағы “ҡырағай” башҡорттарҙыҡындай, “цивилизаторҙар” селпәрәмә килтергән: хәҙерге Яңы Зеландия тарихсыһы Синклер әйтмешләй, “Европа Яңы Зеландияға яман үләт (чума) ауырыуындай килде”. 1642 йылдың 13 декабрендә европалылар ярға аяҡ баҫыу менән үк унда ҡоралды бәрелештәр, ихтилалдар башланды. 1843 йылда инглиз колонизаторҙарына ҡаршы ҡабынған ихтилал 30 йыл дауам итә (башҡорттоң татар-монгол яуына ҡаршы 35 йыл һуғышы кеүек). Артиллерия менән ҡоралланған инглиз ғәскәрҙәренә ҡаршы *нгапух* ҡәбиләһенең бөйөк юлбашсыһы Хоне Хеке етәкселегендәге дәһшәтле һуғыш бер йыл буйына бара. Был юлбашсының: “Юҡ, бирмәйәсәкбеҙ үҙ еребеҙҙе! Аҡ тәнле кешеләр әгәр беҙҙең ерҙе алырға теләһә, быға үлемесле һуғыш аша ғына ирешер, сөнки беҙ үҙ еребеҙ өсөн аҡтыҡҡаса һуғышып үләсәкбеҙ!”, - тигән ҡанатлы һүҙҙәре һәм ғөмүмән маориҙарҙың: “Ир-егеткә лайыҡ иң яҡшы әжәл — тыуған ерең өсөн һуғышып үлеү”, - тигән ҡануни мәҡәле башҡорт милли гимны “Урал”дан алынған, тип әйтерлек:

Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын...

“Бәндәләр килә лә китә, ә ер ҡала”, — быныһы ла яугир маори мәҡәле. Шул уҡ ваҡытта маориҙар, тап башҡортҡа оҡшап, бигерәк бер ҡатлы ла икәндәр — һөжүм итер көндәрен дошманға алдан уҡ киҫәтер булғандар. Ә бер ваҡыт, инглиздарҙың ҙур ғәскәрен үлемесле ҡамағас, шуларҙы, асыҡмаһындар өсөн, аҙыҡ-түлек менән тәьмин иткәндәр. Ә бер заман ҡорал, аҙыҡ-түлек тейәлгән инглиз карабын ҡулға төшөрөү форсаты булып та, ниңә шуны эшләмәнегеҙ, тип европалы бер кеше уларҙан һорағас, маори юлбашсыһы аптырап ҡала: “Ниңә? Аҡылһыҙ һин. Әгәр ҙә беҙ уларҙың дарыһын һәм аҙығын тартып алһаҡ, шунан һуң улар ҡайһылай итеп һуғыша алыр ине?”

1857 йылда маори ҡәбиләләренең юлбашсылары йыйынында тантаналы рәүештә маори короле һайлана һәм ул ҡәбиләләрҙең ерҙәре *Король Иле* тип иғлан ҡылына, баҡан башына маориҙарҙың милли флагы күтәрелә. Элек яҙмаһыҙ

һаналмыш маори халҡы үҙ телдәренә ярашлы төҙөлгән алфавитты тиҙ арала үҙләштереп, уҡый-яҙа белеүселәр һаны аҡ тәнле колонизаторҙар араһындағынан да артып китә. Австриянан бүләк ителгән бәләкәй генә типографияла маори телендә иғланнамәләр, *"Яу ҡошо"* тигән гәзит тә баҫыла башлай.

Маориҙарҙың ихтилалдары 1872 йылда ғына баҫыла — үҙ аллылыҡ өсөн 230 йыл буйына (тап башҡорттарса!) голландтарға, инглиздарға, французларға ҡаршы барған дәһшәтле көрәш Уралдағы башҡорттарҙың быуаттарға һуҙылған шундай уҡ дәһшәтле алышын хәтерләтә... Башҡортостандағы кеүек үк, Король Иленең дә ике-ара килешелгән автономияһы колонизаторҙар тарафынан "ҡағыҙ ярпыһы"нда ғына танылып, А. Кондратов яҙыуынса, маориҙар һайлау хоҡуҡтары һәм юғары парламентта ике депутат урыны ғына ала. Ләкин, бер маори ҡарты мәргән итеп әйтмешләй, "аҡ тәнлеләрҙең тыныслығы һуғыштан да хәтәрерәк" булып сыға. Сөнки маори ерҙәре, тап Башҡортостандағылай, төп халыҡ ҡулынан күпләп һатып һәм тартып алына. Маориҙарҙың йән иҫәбе биш тапҡырға (тап башҡорттарҙыҡылай!) кәмей — европалылар килгәндәге 200 меңдән 40 меңгә генә ҡала ул XX быуат башында. Европа яҙыусылары был халыҡты, XX быуат башындағы урыҫ демоҡрат яҙыусылары башҡорттарға ҡарата әсенеп әйткәндәй, *"үлеп бөтөп барыусы раса"* тип таный. "Әммә, — ти А. Кондратов, — ошо быуатта был ғәййәр халыҡтың ысын-ысындан яңырып тыуыуы башлана. Маори йәмәғәт эшмәкәрҙәре, маори зыялылары барлыҡҡа килә. Маориҙарҙың йән иҫәбе туҡтауһыҙ арта бара. 1970 йыл башына маориҙар һаны 250 меңгә етә, был иһә европалылар колонизацияһы башланған осорҙағынан да күберәк һәм Пасха утрауынан алып Гавайяғаса һәм Тонга архипелагынаса булған бөтә Полинезия халыҡтары һанынан да ишлерәк!"

"Маори яңырып тыуыуы" — халыҡ һанының артыуы ғына түгел ул, — тип дауамлай автор. — ағас ырыу сәнғәте йәки шиғри ижад булһынмы, йорт төҙөү йәки үҙҙәренең ырыу шәжәрәләрен яттан белеү булһынмы, маориҙар үҙҙәренең бабаларының мираҫын үтә лә ҡәҙерләп һаҡлай. Маориҙар бигерәк тә бабалары тарафынан ҡалдырылған бай фольклор хазиналарын — әкиәт һәм ҡарыһүҙҙәрҙе, риүәйәт һәм хикәйәттәрҙе, тылсымлы тарихтарҙы һәм ғәмәли ваҡиғаларҙы хәтерҙәрендә ныҡ тота". Был иһә бөгөнгө маңҡортлаша башлаған башҡорттарға ла яҡшы өлгө булырлыҡ!

Маориҙарҙың Донъя-Ғаләм-Тереклек яратылыш тураһындағы ҡарыһүҙҙәрендә тәүдинебеҙҙең беҙгә таныш тәғлимәте ята ярылып: "Борон-борон заманда — көн дә, төн дә, Ҡояш та, Ай ҙа, йәшел яландар ҙа, алтын төҫлө ҡомдар ҙа булмаған саҡта, Оранғы йәғни Күк-атайыбыҙ үҙенең ҡатыны *Бабаның* йәғни Ер-әсәйебеҙҙең ҡосағында хәрәкәтһеҙ ойоп ятҡан. Күп быуаттар буйына улар шулай бер-береһен ҡаты ҡосаҡлап ятҡан (ир-ҡыҙ йәки гермафродит!), ә уларҙың бала яралғылары (буласаҡ хоҙайҙар), һуҡыр көсөктәрҙәй, икеһенең араһында ҡаты ҡыҫылып тотолған. Был ҡыҫым, ниһәйәт, түҙә алмаҫлыҡ хәлгә еткән"... Ирҡыҙ (гермафродит) Имир тәүбабабыҙҙың ҡуш йомарлаҡ рәүешендәге — үҙебеҙҙең Балхаш күле буйы Төлкөлөтау ҡаяһында һүрәтләнмеш тәүге хәле күҙ алдыбыҙҙа! Шуға ла иғтибар ҡылайыҡ: Яңы Зеландия бит ул *Аҫҡы Донъяға* илтеүсе *Ай юлында* (1-енсе һүрәттәге 1— 3 йүнәлешендә) булғанлыҡтан, ундағы ер-күк есемдәре үҙҙәренең енестәре буйынса беҙҙекеләрҙән *(Көн юлындағынан)* киреһенсә йөрөтөлә:

Ер — әсә енесле, Күк — ата енесле; ә иһә *Өҫкө Донъяга* илтеүсе *Көн юлында* (шул уҡ һүрәттәге 3 — 1 йүнәлешендә) иһә шул уҡ Ер — ата енесле, Күк — әсә енесле (боронғо Египет һүрәттәрен ҡарағыҙ).

Атай-әсәйҙе ике яҡҡа ҡайырып, Донъяны киңәйтеү һәм барса буласаҡ йәндәрҙең яралғыларына йәшәү мөхите тыуҙырыу өсөн, *"тәнә" — тәнәй* йәғни Ер-атайҙың тороғо (фаллосы) Тора тау, ятҡан урынынан тороп, "бар көсөнә арҡаһын турайта ла ата-әсәнең икеһен ике яҡҡа ҡайырып ебәрә... Оранғы (Күк) һәм Баба (Ер) бер-берeһенән айырылып, алыҫлаша ла алыҫлаша, киң асылған Күк менән Ер араһына ел-ямғыр үтеп керә". Күренеүенсә, башҡорттоң тәүдин ҡарыһүҙендәге Донъя-Ғаләм-Тереклек яратылышын тасуирлаған һәм шул тәүдиндән Зороастризм диненә лә барып кергән тәғлимәт менән маори тәғлимәте араһында бер ниндәй айырма юҡ — икеһе лә башҡортса, үҙебеҙсә.

Маориҙар фольклорында Көн-уттан яратылмыш ер (һыу) аҫты ҡыҙы Ниварека (үҙебеҙҙең Һыуһылыу!) һәм, уға ғашиҡ булып, ер (һыу) аҫты донъяһына төшөп әйләнгән Матаора (Заятүләгебеҙ!) ҙә, Ай үҙенә ерҙән күтәреп алған һәм Ай битендә тарбаҡай ағас (беҙҙеңсә, көйәнтә) тотоп баҫып торған ҡыҙ Рона (Ай битендәге көйәнтәле Зөһрәбеҙ!) ҙә бар. Туфандан һуң Ер Тороғо һәм унан күсәги Урал батыр ҡоро ер (Урал тауҙарын) өйгәндәй, маори батыры Мауи ҙа оҡеан төбөнән ҡоро ер киҫәге *"те-ика-а-Мауи" — төйәге-Мауи* (Мауи төйәге йәғни Яңы Зеландия) утрауын тартып сығарған (Урал батыр һымаҡ уҡ, әжәлде еңергә генә көсө етмәй уның). Башҡорттоң Саҡ менән Суғын *әсә ҡаргышы* һауаға сорғотоп-осорһа һәм улар аҙаҡ ике сағыу йондоҙға әүерелһә, маориҙарҙа быны, өҫтә әйтелгәнсә, *Ай юлында* әсә енесе ата енесенә алмашыныу ҡанунына бәйле, *атай ҡаргышы* алмаштырған — үҙ ике улын Мауи күккә сорғолтоп, ике сағыу йондоҙға әйләндергән. Ике риүәйәттә лә улар бер үк: береһе — таңғы, икенсеһе киске яҡты йондоҙ. Башҡорт ҡарыһүҙендә — Ер тороғоноң (Тора тауҙың) йәне, маориҙарҙа *"таки-ар" — тәкә-ер* (ер тәкәһе — шул уҡ Тора тау) йәне Күк төбөндәге юл күрһәткес Тимер Ҡаҙыҡ (Таки-ар) йондоҙона әүерелә... Тора тауға (Ер Терәгенә йәки Тирәгенә) бәйле маори риүәйәте ифрат фәһемле. Әйтәйек, бала таба алмаған башҡорт ҡатындары атайыбыҙ Тора тауға менеп үҙенә бала ялбарғандай, шундай уҡ маори ҡатындары ла шул уҡ изге атайға — *"те-ихо-о-ҡатаҡа" — тейһә ҡот ага* тирәгенә табынырға киләләр имеш. Тирәк олононоң көн*сығыш яртыһы — ир-ат, көнбайыш яртыһы — ҡатын-ҡыҙ* яғы һанала (яҡтар — тап башҡорт ҡарыһүҙендәгеләй!). Малай табырға теләгән ҡатын ул изге олондо — көнсығыш яғынан, ҡыҙ табырға теләгәне көнбайыш яғынан ике ҡуллап ҡосаҡлай ҙа мораҙына ирешә (буйға ҡала)...

Аҙаҡ килеп, бабаларыбыҙҙың *Көнгә* арнап ҡорбан салыу йолаһына бәйле һуңғы һәм төп һорауыбыҙға ла яуап бар маори ҡарыһүҙендә: Мауи батыр, уның ҡартәсәһе "мури" — бүре һәм үҙ юлы буйлап йүгереүсе Көн тураһындағы риүәйәт.

Мауи батырҙың сабыйлығы үҫәргәндәрҙең һыуҙан табып алынмыш башбабаһы Шүлгәндекенә тап килә (шунан ул Муса пәйғәмбәр, Көн-би, Ек-Мәргән һ.б. шәжәрәләренә лә күскән): "Алыҫ оҡеанда диңгеҙ ылымыҡтарынан үрелгән сәңгелдәк тирбәлә тулҡындарҙа. Уның тәңгәлендә өҫтә диңгеҙ ҡоштары сыулашып бөтөрөлә. Сәңгелдәктә әсәһенең сәстәренә биләүләнмеш сабый ята,

ылымыҡтарҙан башҡа бер кем дә ҡош-ҡорттан һәм оҡеан йыртҡыстарынан ҡурсаламай уны. Сәңгелдәктә Мауи, әсәһе Таранганың сәстәренә биләүләнгән сабый Мауи, ята. Мауи — *бишенсе,* көтөп алынған улан, әсәһе уны үҙенең сәс лоҡманына ураған да диңгеҙгә ташлаған"... *Бишенсе* ул, тигәне лә ҡыҙыҡлы — *Үҫәргән биш ырыуының* бишенсе баш бабаһына (Муса пәйғәмбәргә?) табыныу түгелме был?!. Үҫәргәндең Сураш араһынан сыҡҡан Сураш-Тора (Заратуштра, Зороастр) бәк кеүек үк, уның ырыуҙашы һәм ҡан дошманы булған Муса пәйғәмбәр ҙә, бәлки, Үҫәргәндең *бишәй араһынандыр?..*һәр хәлдә, Үҫәргән башбабаларын Бүре-әсә имеҙеп һәм тәрбиәләп үҫтергән, ә маориҙарҙа ла Мауи батырҙың *Аҫҡы Донъялағы* ҡартәсәһе *Бүре* хаҡында һүҙ бара. Мауи батыр уны юллап Аҫҡы Донъяға төшә: "Бүре-ҡартәсә уңға боролоп һауаны еҫкәне, ләкин унда кеше еҫен тойманы. Ул төньяҡҡа әйләнде — унда ла юҡ. Көнсығышҡа әйләнһә, унда ла тойолмай. Ниһәйәт, бүре көнбайышҡа боролоп һауаны еҫкәне:

-- Оһо-һо! Тоям мин уны. Мауи, кинйә ейәнем, һинме был? Ни кәрәк һиңә, ейәнем?

-- Эйе, мин был, Мауи... Миңә һинең *яңаҡ-тештәрең* кәрәк, Бүре-ҡартәсәй... Бир миңә яңаҡ-тештәреңде...

Бүре уйға ҡалды.

-- Мин ҡартайҙым инде. Яңаҡ-тештәрем кәрәкмәй инде миңә. Ал яңаҡ-тештәремде, оҙаҡламай кәрәге тейер һиңә.

Ҡурҡыу белмәҫ Мауи ҡартәсәһенә яҡынланы. Ул Бүренең изге яңаҡ-тештәрен алып ҡайтып китте"...

Күренеүенсә, Аҫҡы Донъяға киткән (үлгән) бүре яңаҡ-тештәрен бабалар бысаҡ-бысҡы итеп файҙаланғандар (хәҙерге ҡул бысҡыһының бабаһы), һуңынан шул рәүешле ҡорос бысҡылар яһағандар. Бүре-әсәктең осло аҙау теше ("энә"һе) яңаҡ һөйәгенән айырым да ҡулланылып, *"бүрәсәкэнәк"* тип йөрөтөлгән, Үҫәргән-скиф бабаларыбыҙҙың шуға оҡшатып бронзанан ҡойған хәнйәр-энәһе лә шулай *"бүрәс-әкэнәк" — аҡинәк* исемләнгән...

Мәсьәләнең *төбөнә туҙ ҡуябыҙ*[36] ("тоҙ ҡоябыҙ"):

"Мауи ир ҡорона керҙе. Өҫкө Донъя ҡыҙына өйләнде ул (Өҫкө Донъя ҡыҙы Айһылыуға өйләнгән Урал! — *Й.С.*)...Иртә һайын *Тама-Көн (ҡояш)* бер ырғыуҙа күккә аша ла бер ҡырыйҙан икенсе ҡырыйға бик шәп йүгереп үтеп, күҙҙән юғала ине. Кешеләр ашыҡ-бошоҡ бешергән аштарын ашап та өлгөрмәйҙәр, тағы ҡараңғы төшә. Өҫкө Донъя халҡы, көндәр шундайын ҡыҫҡа, ә төндәр оҙон, тип һуҡранды, ләкин был тәртипте үҙгәртеү уйы береһенең дә башына килмәне. Фәҡәт Мауи ғына, елеп бармыш Көндө ҡарашы менән оҙатып, нисек итеп уны күктә тотҡарлау яйын эҙләне һәм эҙләп тапты, ниһәйәт"...

Иң элек ул Үҫәргән-шумер бабаларыбыҙҙың ҡурҡынıслы яу ҡоралы *йәтмә* менән ҡораллана — Көндө көрмәп алырға. Бүре-ҡартәсәһенең тылсымлы яңаҡ-тештәрен дә (бысҡыны) тотоп, Көнсығышҡа йүнәлә һәм күккә ырғыған мәлендә Көндө йәтмәгә эләктереп, муйнын ҡороҡлап өлгөрә — бөтә көсөнә быуа уны (Үҫәргән-скиф бабаларыбыҙҙың ҡорбан малын, ҡороҡлап йыҡҡандан һуң, быуып үлтереү йолаһы). Ахырҙа Мауи Көндөң "башын" йәғни муйынын бүре-

[36] Төбөнә туҙ ҡуйыу ( "тоҙ ҡойоу" ) — бабаларҙың ҡанундарын ҡайын туҙына яҙған дәүерҙәрҙә мәсьәләнең сиселешен дәлилләү өсөн алға ҡуйылған туҙ-китап.

ҡартәсәнең тылсымлы яңаҡ-тештәре менән быса башлай... Һөҙөмтәлә “Тама-Көн инде үҙенең ҡәҙимге юлын бер нисә ырғып ҡына үтеү һәләтенән яҙа, күк буйлап ул талғын ғына хәрәкәтләнә башлай һәм әлегәсә ул шулай”.

Күренеүенсә, Көнгә арнап кеше йәки ат ҡорбаны салыу — *“баш өҙөү”* йолаһы, төптән тикшереп ҡарағанда, ***Көндөң үҙенең “башын өҙөү”*** булып сыҡты; был иһә Көндөң байырға ашыҡмауы, ер йөҙөн тигеҙ һәм етерлек яҡтыртыуы хаҡына үтәлә. Маори ҡарыһүҙендә Көндөң башын имгәтеү ныҡ тасуирланып, “башын өҙөү” асыҡ ҡына әйтеп еткерелмәһә *лә*, ғәмәлдә ул өҙөлгән, йүгерек аяҡлы кәүҙәһенән айырылған булырға тейеш; сөнки, әгәр шулай булмаһа, хәтәрлекле башты түгел, ә аяҡтарын имгәтеү етер ине. Әммә-ләкин шулай ҙа, мәсьәләне аныҡлап бөтөр өсөн, Көн-Өфө юлының Яңы Зеландияға маори бабалары күсеп килгән ошо *Ай юлы* армытының урта билендәге беҙгә инде таныш Яңы Гвинея утрауына кире әйләнеп ҡайтайыҡ та ундағы *маринд-аним* ҡәбиләһе папуастары ҡарыһүҙенә ҡолаҡ һалайыҡ:

*“Көн* — ҡурҡыныс эйә ул... *Ямдан* ҡотосҡос эсе бөркөлдө. Унда *Көн эйәһе* ята — ҡып-ҡыҙыл малай ҡиәфәтле”... Башҡорттоң “Әйнә менән Ғәйнә” ҡарыһүҙендәге эсе бөркөп *ямда* ятмыш *Көн* үҙе.

“Боронғо замандарҙа *ла* Көн булған, тик ул күктә булмаған һәм Көнсығыштан Көнбайышҡа табан елмәгән. Ул замандарҙа шулай уҡ яҡтылыҡ та, йылылыҡ та булмаған, эңгер-меңгер генә көндөҙҙө төнгөлөктөн айырған. Ул саҡта *Көн эйәһе* ерҙә торған. Ул ир ҡиәфәтле булған һәм тәрән *ямда* ер аҫтында йәшәгән”... Был юлы беҙ Көндөң *әҙәм ҡиәфәтендә* кәүҙәләнеүен абайлап, *“Көн эйәһе”* тигән терминға иғтибар итәйек: Көн — кәүҙәләге баш булһа, ул баштың эйәһе — кәүҙә булалыр, тимәк. Дөйөм алғанда, башҡорт-шумер ҡарыһүҙендәге Шүлгән был: өстән бер өҫкө өлөшө *(баш-Көн)* үлемһеҙ, ә өстән ике аҫҡы өлөшө (кәүҙә-уба) үлемесле булған башбаба маринд-аним ҡарыһүҙендәге кеүек уҡ, башҡорттоң Шүлгән-Көнө *лә* элек (башы өҙөлмәҫ борон), Илаһи күктә түгел, ә бәндәүи ерҙә йәшәгән (әммә-ләкин, үлемесле аяҡтары менән ергә баҫһа *ла*, үлемеһеҙ башы күкте айҡаған).

“Кешеләр Көн эйәһен ямдан сығарҙылар. Улар уның ***башын өҙөп*** алдылар ҙа, ҡыуанышып, ауылға алып ҡайттылар. Байрам итеп бейенеләр”... Башҡорттоң Әйнә менән Ғәйнәһе ҡуржынға һалып алып ҡайтҡан Көн үҙе. Ә байрам-бейеүҙәре — боронғо Иран, Һиндостан, Рим башҡорттарының Көнгә арнап салған ҡорбан башын батша һарайына алып ҡайтып оло байрам-бәйге уҙғарыуҙары.

“Иртәнсәк ирҙәр Көн эйәһенең эшкәртелгән һәм буяулап биҙәлгән башын иң аҫкы урындыҡҡа һалдылар... Баш ҡыҙара башланы, ҡолаҡ, танау тишектәренән, күҙҙәренән, шулай уҡ ауыҙынан да нурҙар сатҡыланып, баш тулайым балҡыны... Баш аҡрын ғына урындыҡтан-урындыҡҡа юғарыраҡ ырғылды. Барғаны һайын ул юғарыраҡ күтәрелеп, ниһәйәт, иң өҫкө урындыҡҡа ҡунаҡланы... Шул саҡ ике ҡыҙ — Көн эйәһенең һеңлекәштәре килеп, уны күккә сөйҙөләр, донъя нурға мансылды. ***Баш Көнгә әүерелде”...*** Һәммәбеҙҙе әлегәсә миһырбанлы яҡтыртҡан һәм йылытҡан *Көн-әсәбеҙҙең (ҡояш-апайҙың) ерҙән күккә ҡалҡыныуы хаҡына башбабабыҙ Шүлгәндең* ***башы өҙөлөүе*** — алдыбыҙҙа. Уны күккә сөйгән ике һеңлекәше — *Саҡ* менән *Суҡ* икәнлеген дә беләбеҙ (1996 — 1997 йылдарҙа “Ағиҙел”дә “Башҡорт хәтере” тип ташҡа баҫылмыш хитапнамәмдән

ҡарағыҙ). Ошо урында һорау тыуыуы ихтимал: “Шүлгәндең башын башта уҡ бер ошолай өҙөп осорғас, Көн тыуғас, ниңә тағы шуға арнап яңынан-яңы ҡанлы ҡорбандар салыуҙар — баш өҙөүҙәр кәрәкле? Шунһыҙ ҙа көлөр, елер ине бит күктә Көнөбөҙ?” *Ләкин*, маринд-аним ҡарыһүҙҙәрен таҫлап йыйған һәм ентекләп тикшергән немец ғалимы Г. Неверман ул хаҡта былай ти: “Боронғоларҙың эскерһеҙ инаныуынса, был Донъяның “хоҙай-эйәләр тарафынан ҡасандыр барлыҡҡа килтерелгән бөтә нәмәһе яйлап үҙенең йәшәү көсөн юғалта. Шуға күрә кешеләр әленән-әле тылсымлы тәьҫир ярҙамында Донъя-Ғаләм-Тереклекте өр-яңынан тыуҙырырға тейештәр, быны улар үҙҙәренең йола байрамдарында эйәләр тураһындағы ҡарыһүҙҙәрҙе тергеҙеүсе махсус тамашалар уйнау арҡылы башҡаралар. Был тергеҙеү *бик теүәл һәм ентекле* булырға тейеш, сөнки саҡ ҡына тайпылыу йәки төшөрөп ҡалдырыу ҙа Донъяның емерелеүенә йәки тәртипһеҙлегенә дусар ҡылыуы мөмкин. Шулай итеп, хоҙай-эйәләр тураһындағы риүәйәттәр ябай хикәйәт сиктәренән ныҡ сығып китеп, тылсымлы мәғәнә ала”... Әгәр ҙә ки *“баш өҙөү”* йолаһын әленән-әле үтәп-яңыртып тормаһаң, Көнөң һәм Айың һүнер, ерҙә тереклек туҡталыр, тигән сал хөрәфәт был. Инде ошо Донъяла тәү тапҡыр *кеше башын өҙөүҙән башланган* сал йоланың *мал башын өҙөүгә әүерелешен* асыҡлайһы ғына ҡалды беҙҙәргә.

## Ҡайтабыҙ Күк Уралға

Тәүдин ҡарыһүҙебеҙ буйынса Үҫәргән башбабаһы Шүлгән-Көн — бүре башлы, башҡорт башбабаһы Урал-Ай — үгеҙ башлы булғанлығын иҫләйек. Тәүдин ҡарыһүҙе менән һуғарылмыш “Гильгамеш”, Авеста, Ригведа риүәйәттәренә нигеҙләнгән Бундахишна (Һиндостан) изге китабында уларҙың тәүтөйәге лә күрһәтелгән: үгеҙ *“Эранвеже*[37] тигән яҡта... изге йылға *Дайтианың*[38] *уң ярында*[39] яратылған, ул үгеҙ ап-аҡ төҫлө һәм Айҙай нурлы булған”. Был текста үгеҙ-Уралдың ай башлы булыуы сағыла.

Үгеҙ-Урал “үлгәс, кәүҙәһе *уң яҡка*[40] ауҙы... *һәүес урван*[41], үгеҙҙең йәне, үгеҙ кәүҙәһенән сыҡты һәм әйтте: “Мин Ахура-Маҙда яралтҡан Тереклектәрҙе һуғарасаҡмын”... Тимәк, кәүҙәһе үлһә лә, үлемесһеҙ йәне (башы) *Айга* әйләнде — нәҡ *Айҙы* бит Илаһи һуғарыусы һанаған боронғолар.

“Үгеҙ үлгәс, уның мейеһе ятҡан ерҙән илле биш төрлө иген, ун ике төрлө шифалы үләндәр үҫте. Мөгөҙҙәренән — емеш ағастары, танауҙарынан — һуған ҡыяҡтары, ҡанынан йөҙөм үркәндәре үрсене”... Урал батыр үлгәндән һуң кәүҙәһенән хасил булмыш байлыҡтар кеүек.

“Үгеҙ орлоғонда булған бөтә яҡтылыҡ һәм аҡлыҡ Ай булмышына күсте, шунан бөтә булған мал-тыуар яралды”, — йәғни үгеҙ-Уралдың Илаһи өстән бер өлөшө (башы) Илаһи Айға әүерелде...

---

[37] Эранвеже — *ирәм-башы* йәғни Ирәм-Имир тәүбабаның башы — Уралдағы *Баштау.*

[38] Дайтиа — *Дай-ыҡ, Яйыҡ* йылғаһы.

[39] Уң ярында — Башҡорт яғында, сөнки үгеҙ-Урал Башҡорт тәүырыуының башбабаһы.

[40] Хәҙер унда уның ҡатҡан кәүҙәһе — *Уралтау.*

[41] Һәүес урван ( һыйыр-ир-абан ) — һыйырҙың ир-апаһы үгеҙ-Урал.

Бер үк ваҡытта изге Яйыҡ йылғаһының *һул ярында*[42] үгеҙ-Урал игеҙәге — "кешеләрҙең башбабаһы *Һайомарт*[43] та яратыла һәм ул *Көн* булып балҡый", — Шүлгән башбабабыҙ нәҡ үҙе булыр быныһы. Үгеҙҙән һуң Һайомарт та вафат булып, кәүҙәһе *һул яҡҡа*[44] ауа. Һайомарт орлоғондағы бөтә яҡтылыҡ һәм паклыҡ *Көн* булмышына күсә лә шунан кешеләр ярала, — йәғни бүре-Шүлгәндең Илаһи өстән бер өҫкө өлөшө (башы) Илаһи *Көнгә* әүерелә...

Уҡыусыларға беҙҙең аша "Ағиҙел"дән билдәле булмыш башҡорт ҡарыһүҙендә *лә* игеҙәктәрҙең баштары *Көн* һәм *Ай* рәүешендә кәүҙәләренән өҙөлөп осоусы тәбиғи үлемгә бәйле (ә шуның ҡанлы ҡорбандар аша ҡабатланыу сәбәбен өҫтәрәк профессор Г. Неверман аңлатмаһында биргәйнек). Игәҙәктәрҙең ләҡәптәре күп булыуы ла билдәле, шуларҙың боронғо Рим варианты (Ромул — Урал, Рем — Шүлгән) аша Уралдағы тау булып ҡатмыш кәүҙәләренең исем-аталыштары аңлашыла. ***Имир*** тәүбабаның "кирегә әйләндереп" әйтелмеш исем-аты ***"ирим//ирәм"де*** алһаҡ (ожмахҡа тиң Самарау иле Күк Урал борон ***"Ирәм*** *багы"* тип тә йөрөтөлгән[45]):

**Ирәм-ул ( Ирәмдең улы ) — Ирәмәл — Рәмәл//Ромул;**

*һәм* ***Ирәм*** *(Ирҙең әме – ҡыҙ яҡ яртыһы)* — ***Рәм//Рем.***

Шүлгән башы, өҙөлгәндән һуң, *Көн* рәүешендә Ер Кендеге Арҡайымдың көпсәк-ҡойоһо үтәләй Көнбайышҡа (4-се һүрәттәге 3 — 1 йүнәлешендә — *Көн юлынан*) осоп китә *лә*, уның аша *Өҫкө Донъяга* сығып, осошон артабан дауамлай — Арҡайымда үҙ-ара сатрашланмыш һәм артабан дауамланмыш игеҙәк түңәрәк (восьмерка) сифатындағы *Көн юлы* һәм *Ай юлы* буйлап үҙенең мәңгелек сәйәхәтенә күсә.

Урал башы, өҙөлгәндән һуң, *Ай* рәүешендә Ер Кендеге Арҡайымдың көпсәк-ҡойоһо үтәләй төньяҡҡа (4-се һүрәттәге 1 — 3 йүнәлешендә — *Ай юлынан*) осоп китә *лә*, уның аша *Аҫҡы Донъяга* сығып, осошон артабан дауамлай — баяғы игеҙәк түңәрәк (восьмерка) сифатындағы *Ай юлы* һәм *Көн юлы* буйлап үҙенең мәңгелек сәйәхәтенә күсә. Уларға арнап тәүге дәүерҙәрҙәге кеше баштары өҙөү йолаһын һуңға табанығраҡ бүре башы өҙөү (Көнгә арнап) һәм үгеҙ башы өҙөү (Айға арнап) алмаштыра. Аҙаҡ икеһенә ла арнап йылҡы башы өҙә башлайҙар: Айға — аҡбуҙ ат, Көнгә — һарысай ат. "Йылға" — "йылан" — "йылҡы" һүҙҙәре бер тамырҙан икәнлеген иҫләһәк, *Өҫкө Донъя* күге йылғаһындағы *Көн-һарыйылан — һарысай йылҡыга* әйләнгәнен, *Аҫҡы Донъя* күге йылғаһындағы *Ай-аҡйылан* иһә *аҡбуҙ йылҡыга* әүерелгәнен күрәбеҙ — икеһенә лә (Көнгә *лә*, Айға *ла*) ат ҡорбаны салыу йолаһы киләләр ана шунан.

---

[42] Һул ярында — Үҫәргән яғында, сөнки бүре-Шүлгән Үҫәргән ырыуының башбабаһы.

[43] Һайомарт ( әһәй-мәре-т ) — әсәй-бүре-Шүлгән.

[44] Хәҙер унда уның ҡатҡан кәүҙәһе — *Шылган тауы.*

[45] Боронғо бер шағир олатайым Хәлил Солтановтың мөхәббәт шиғырынан:

***Ирәм*** *багында сән үстең,*
*Йөрәгем парәсен кистең,*
*Саба еле булып истең,*
*Хәнифәкәй, гөлбостаным...*

Тәүдиндең ошо ҡарыһүҙ йолалары ҡитғаларға туп-тура *башҡорт-арийҙарҙан* таралыуын, ер йөҙөндәге атҡа һәм ат культенә бәйле бөтә яҙма һәм ҡаҙылма ҡомартҡыларҙан тыш, башҡа бер халыҡтарҙа ла булмаған башҡорттоң ат тураһындағы бөйөк изге доғалары — эпостары дәлилләй. Шуға күрә бөтә башҡорт ҡарыһүҙен (мифологияһын) бергә туплап, "Башҡорт ҡарыһүҙе (мифологияһы)" тигән тос-тос томдар нәшер итеү мотлаҡан.

## Америка ҡитғаһында ҡалған «бүре кешеләре»

«Беҙ — бүреләр ырыуы. Элек Үҫәргән булғанбыҙ. Ата-бабайҙар күсеп-ҡунып йөрөгәндә, уларға бер инә бүре осраған... Һунарсы уны алып ҡайтҡан да бергә тора башлаған... Шунан һунарсы ситкә китеп, үҙе бер ғаилә яһап, балалары булып, ҙур бер ил ҡороп ебәргән. Әсәләре бүренән булғас ни, уларҙы бүреләр тип йөрөткәндәр»... (Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө, 1980; 82-нсе бит). — Үҫәргән ырыуының үҙҙәрен Бүре-әсә тоҡомдары тип һанаған көнбайыш тармағы башҡорттарының мифы был. Ошо уҡ ырыуҙың Күбәләк-Тиләү тигән көнсығыш тармағы иһә үҙҙәрен хан ҡыҙы менән ҡушылған Бүре-ата тоҡомдары итеп иҫәпләгән (Әхүәл Чыңғыз хан вә Аҡсаҡ Тимер. Ҡазан, 1824; 10 — 11-енсе биттәр һәм: Н.Я. Бичурин (Иакинф). Собрание сведений о народах, обитавших в Средней Азии в древние времена, т. 1, М. — Л., 1950; 214 — 215-енсе биттәр).



Һүр.18. Әҙәмә -- Бүре-ир

Бына шул Бүре-ата менән хан ҡыҙынан тыуған тоҡом, йәғни беҙҙәге Күбәләк-Тиләү башҡорттары бабаларының бер өлөшө, Америка ҡитғаһының иң боронғо ҡәүемдәренән иҫәпләнә, күп быуаттар элек улар хәҙерге Мексика тупрағында төйәкләнеп ҡалып, үҙҙәрен бүре (ягуар) кешеләре тип атаған, ә шул ерҙәге истәк (ацтек) индейҙары уларҙы «ольмек» («каучук табыла торған ил кешеләре») тип йөрөткән, дөрөҫө "үлмәк" (үлектәр иленә -- "үлергә" киткән кешеләр) булғандар. Был «бүре кешеләре»нең атаҡлы Ла-Вента исемле дин мәркәзендә табылған таш ҡомартҡылар араһында, ысынлап та, әҙәми зат ҡатын менән ҡушылыусы ата бүре һындары бар (һүр.18). Һәм дә беҙҙең һымаҡ уҡ, бүре-үлмәктәр ҙә үҙ риүәйәттәрендә бүрене изгеләштергәндәр, үҙҙәрен «бүреләр» һанағандар һәм бүре теше-тырнағы уларҙа ла, тап беҙҙәге кеүек үк, ҡара көстәрҙән ҡурсалаусы, ҡот килтереүсе тылсымға эйә булған. Ошо бабалар Америка ҡитғаһында беренсе тапҡыр күктәге йондоҙҙарҙың нисек урынлашыуын, хәрәкәтен ентекле өйрәнгән, теүәл календарь төҙөгән (уның буйынса, тарихтары б.э. тиклем 3113 йылдан башлап иҫәпләнә), һуңыраҡ тыуасаҡ «майя» цифрҙар



Һүр.19. Аяҡ бөкләп…



Һүр.20. Теҙ сәнсеп…

системаһын, яҙмаһын нигеҙләгән. Америка ҡитғаһында фәҡәт үлмәктәр генә ***тәгәрмәсте*** белгәндәр (М. Стингл тапкан балалар уйынсығы тәгәрмәсле эт) -- был ҡәүемдең ысынлап та беҙҙең Уралдан киткәнлегенә дәлил. Таштан ғәжәп оҫта эшләп ҡалдырылған «бүре-үлмәк» кеше һындарында уларҙың тап башҡорт йөҙҙәрен, тап башҡортса аяҡ бөкләп һәм теҙ сәнсеп ултырыу рәүештәрен күрәбеҙ (һүр.19,20)... Һәм, ғөмүмән, үлмәктәрҙең төҫ-ҡиәфәте лә башҡортто̆ко (һүр.21).



Һүр.21. Үлмәк-бабаларҙың төҫ-ҡиәфәте



Һүр.22. Баш



**Һүр.23. Баш-бина**

Был хеҙмәттең "Тәүдиндән ҡыҫҡаса һабаҡ" тигән бүлегендә башҡорт-үҫәргән бабаларыбыҙҙың, тәүдин тәғлимәте буйынса, ни өсөн үҙҙәрен "Баш кешеләре" һәм "Түш кешеләре" тип атап йөрөткәнлеге аңлатылып, һүрәт-схемаһы ла бирелгәйне; беренселәренең -- Баш-хоҙайсыҡҡа, икенселә-ренең Түш (Ҡуш Эмей)-хоҙайсыҡҡа доға ҡылыуҙары иҫкәртелгәйне. Башҡа табыныу ғәләмәтен ошо үлмәк-бабаларҙа ифрат сағыу рәүештә күрәбеҙ (һүр. 22,23). Баш рәүешендәге изге ҡорам-бинала (һүр.23) Баштың ете тишек-ҡапҡаһының эйәләре -- ете ырыу бабаларының аруахтары итеп яһалмыш ҡурсаҡтар (ҡурсаусылар, урыҫса – куклы-обереги) торған, үлмәк-бабалар уларҙан ырыуҙарын зәхмәттән, бәлә-ҡазаларҙан ҡурсауын һорап ялбарған (М. Стингл. Тайны индейских пирамид. М. – 1982, стр. 153).



Һүр.24. Яҙыусы. Тәхеттәге батша. Әбей-ҡарсыҡ

Билдәле булыуынса, боронғо үлмәктәр цивилизацияһының бөйөк дауамы булып беҙҙең эра баштарында шул Мексикалағы Юкатан ярымутрауында майя (был этноним Үгеҙ-Буға атамаһына бәйле, буғай: *буға – мага – майа –* ***майя***) цивилизацияһы сәскә атҡан, майя кешеләренең дә төҫ-ҡиәфәте шул бер үк (һүр. 24) – башҡортто̆ко. Ҡанбабалары үлмәктәрҙеке кеүек үк, уларҙа ла Уралдағы

башҡорт мәҙәниәтенә бәйләүсе ҡыҙыҡлы факттар бар, тик береһенә иғтибар итәйек.

Изге Ҡоба тауындағы хәҙерге баш ҡалабыҙ Өфөнөң -- сал-боронғо дин мәркәзебеҙ булған Көн-Өфө (йәки Үр-өфө -- Рифей) ҡалаһының нигеҙендә ултырыуын беләбеҙ. Изге Ҡоба тауға беҙ белмәгән замандарҙа уҡ дүрт тарафтан һыу юлдары һәм аҙағыраҡ ҡоро юлдар тартылып сатрашланған, Башҡортостандың «дүрт юл» төшөнсәһе барлыҡҡа килгән (хәҙергәсә ул шулай)... Инде килеп меңәр-меңәр саҡрым алыҫлыҡтағы Америка ҡитғаһына баҡһаҡ, ошондай уҡ изге Ҡоба (Кобе) исемле дин мәркәзе баяғы сал тарихлы Юкатан еренда — үлмәктәрҙең туп-тура вариҫтары майяларҙа ла булған, ундағы Ҡобаға ла, тап беҙҙәгеләй, дүрт тарафтан дүрт түтә юл тартылып сатрашланған! Майяларҙан арыу уҡ ҡына ғөрөф-ғәҙәт мәғлүмәттәре, хатта яҙма ҡомартҡылары һаҡланып ҡалған.

## Майя -- башҡорт ғөрөф-ғәҙәттәре

Теҙгенде ҡыҫҡараҡ тотоп, китап (Мифы и легенды народов мира. Америка, Австралия и Океания. М. – 2006, стр. 7 – 42) биттәренән барлап үтәйек.

Риүәйәт: майя бабаларына диңгеҙ аша бында күсенеү өсөн Хоҙай ун ике (12) юл асҡан (башҡорттоң 12 төп ырыуыналыр).

Әсәләре уларҙың баш һөйәктәрен бала саҡтан уҡ “йәмшәйткән” (деформация) – башҡорттоң боронғо Исәт йылғаһы буйында йәшәгәнТаҙлар (исседондар) ырыуының йолаһы.

Ирҙәре һәм ҡатындары айырым табындарҙа иҙәндә ултырып ашай, ашағас ауыҙ сайҡайҙар, ҡул йыуалар; “ҡунаҡ ашы – ҡара-ҡаршы” тәртибендә ҡунаҡҡа саҡырышалар – тап боронғо башҡортса.

Башҡорттағы кеүек үк, үлән ҡурайҙа төрлө көй уйнағандар, был ҡурай *коломче* (көйләмсе) тип аталған. Ир-ат, ғәҙәттә, ҡатын-ҡыҙ менән ҡуша бейемәгән.

Сәсеү, урыу эштәрендә -- ҡулалмаш, күп көс талап иткәндәрендә *өмә* яһап эшләгәндәр.

Бер-береһенә -- “һин” тип, өлкәндәргә -- ағай, апай, инәй, олатай тип, вазифалыларға түрәлектәрен әйтеп өндәшкәндәр.

Боронғо башҡортса, ҡыҙ яғында никах туйынан һуң кейәү кеше ҡайны йортонда ҡалып, 5-6 йыл (башҡортта 2 йыл) буйы ҡайныға хеҙмәт иткәндән һуң ғына килен төшөргән. Күп ҡатынлыҡ булмаған. Ҡайһы саҡта бәләкәс ҡыҙҙың ҡолағын бәләкәс малайҙан тешләтеп, улар – балиғ булғас ҡушылырға тейешле кейәү-кәләш, ата-әсәләре ҡоҙа-ҡоҙағый һаналған.

Дин ҡабул итеү – ҡабаттан тыуыу һаналып, тап башҡортса ***капут сихил*** (ҡабат сығылыу, сығыу) тип әйтелгән. Баланы дингә фатихалаған әжерсегә (жрецҡа) туҫтаҡ менән ***ҡойом*** (бер ҡойом) шарап биргәндәр һәм әжерсе уны, тап башҡортса, бер тынала бөтөргәнсе эсергә тейеш булған.

Майяларҙа әҙәм балаһы, тап төрки-башҡорттарҙағылай, сабый саҡтан алып бәлиғ булғансы, ғүмеренең төрлө осоронда төрлө исемдәр йөрөткән.

Майяларҙа кеше ҡорбаны салыу ырымы булған, “Урал батыр” эпосында иһә бындай ҡанлы йола ҡаты хөкөм ителәә.

## Майяларҙың үҫемлек календары

Боронғо майя яҙмаларын уларҙы Ю.В. Кнарозов уҡыуының (Ю.В. Кнарозов. Иероглифические рукописи майя. *Л.*, 1975) һөҙөмтәләренә таянып фекер йөрөтһәк (бында һәм артабан майялар хаҡындағы мәғлүмәттәр шул китаптың 230-235, 240-241-се биттәрҙән алынды), майяларҙың игенселек ысулында орлоҡтарҙы ямғырҙар яуыу миҙгелендә сәсергә кәрәк булған, юғиһә ямғырҙар миҙгеле артынан ҡоролоҡ — *кин-тун йаабил* миҙгеле килгән, был иһә хәҙерге башҡортҡа ла “көн-төн яға (яндыра мәл) биләй” тип аңлашыла. Һалҡын болоттарҙы ҡыуып килтереүсе хоҙай *каш* — башҡ. *Ҡыш; каш-иш* — башҡ. *Ҡыш-өшөү.* Уйһыулыҡтарҙы (баҫыуҙарҙы) ямғыр-һыуға ҡандырыусы йомарт хоҙай *шаңом* — башҡ. *Шаңым, шаң* “оло һыу һауыты”, *саңдау* -- “һулау, һыулы урын”. Был хоҙайҙың ләҡәбе *иш аном* — башҡ. *Иш-анам* һәм *ышанам* “хоҙайға ышанам, өмөт итәм”.

Күк хоҙайы *ицам-ңа//ицамна* — башҡ. *Әсәм-уңа//әсәм-10-ы* -- “иген уңдырыусы, календарҙың 10-сы айына еткереүсе”. Майя доғалығынан: “Болотло күктең бөйөк эйәһе, кукуруз өсөн яҡшы йыл килтер беҙгә!” Был хоҙай майя календарындағы 4 йыллыҡ әйләнештең иң яҡшы (уңышлы) йылында бойорған, ул йыл *“иҡ”* тип аталып, башҡ. *Ик* “иген ик” һәм *ыҡ* “һыу” (һыулы йыл) тигәнгә тап килә. Боронғо майялар ҙа, башҡорттар (ҡатайҙар) ҙа болоттарҙа күсенеп йөрөүсе аждаһа-йыланға табынған; уның төйәге ямғырлы-еүеш төньяҡ *тамоанчан* — башҡ. *Томансан* “томанлы” урында икән. Ю.В. Кнарозов буйынса, майя иленең үлмәктәр (олмектар) хакимлығы осоронда аждаһа-йыландың ҡурҡынысла ҡанатлы ҡош ҡиәфәтендәгеһе барлыҡҡа килә — башҡ. *Семрегош.* Күктең 9-сы ҡатындағы йылан-хоҙай *йашчилан* “йәшен-йылан” — башҡ. *Йәшен-йылан.*

Ямғыр яуҙырыусылар *чичик соот — башҡ. Сисек (сиселгән) һауыт //тишек һауыт.*

Ямғырһыҙ йәшен эйәһе *саҡ соот* — башҡ. *Саҡ (сағыу) һауыт//сыуаҡ һауыт* “аяҙ күк”.

Ямғыр эйәһе ҡушҡар *хо ваай тун* — башҡ. *Һыу-баҡай-тунлы* (көпөлө) -- башҡ. һәм урыҫ әкиәттәрендәге әҙәми ҡиәфәткә (һылыу ҡыҙ) керә торған хоҙай-баҡа (тәлмәрйен).

Күктәге йәшен-эт *цул ҡаан* — башҡ. *Сүл ҡағаны* “сүл бүреһе”; был хоҙайбикә, имеш, күк күкрәтеп, “күҙенән йәшен ата” — башҡ. шулай уҡ “йәшен ата” төшөнсәһе “күҙ йәшен ата” тип тә аңлашыла.

Йәйғор *че-ле//се-ле,* шуға йәнә майяса *баай//уаай* “байҡай” һәм *ат* “ут” һүҙҙәрен ҡушып әйткәндә — *селеуаайат* — башҡ. *Салауат* күпере “йәйғор”.

Игенселек терминдарына килгәндә, *ҡол* “ағастарҙан таҙартылған ялан” — башҡ. *ҡола-ялан.*

Ҡыр эштәре осоронда бағыуҙа ҡоролған ҡыуыш *паа-сел* — башҡ. *бағыл//бағыу.*

Күрәләтә ҡоролоҡта ахмаҡланып иген сәсеү *тикин мук* — башҡ. *тиген (тигенһеҙгә) мүкәйләү.*

Орлоҡ сумырыу өсөн ерҙе тишекләгес осло таяҡ *шул* — башҡ. *шыла* һәм *шу-шул//шөшлө*, урыҫ. *шило*; ә был эштәрҙе башҡарып сығыу *ҡобен паҡал* — башҡ. ерҙең *көбөн баҡал//һабан пахал.*

Орлоҡ һалып муйынға аҫмалы тубал *чим* — башҡ. *жим//йем* "орлоҡ" һәм *жим-инә//семена* "орлоҡ".

Ҡоролоҡ осоронда тап хәҙерге башҡорттарҙағылай ямғыр теләү *ча чаак//сә сәәк* — башҡ. *сәсәк//сәскә* "хоҙайҙан ерҙең сәскәләнеүен теләү".

Үткер таяҡ осо менән бағыуҙағы сүп үләндәрҙе утау *паак* — башҡ. *багаҡ//пак* "бағып таҙартыу" һәм *пааке//бәке* "үлән киҫкес үткер ҡорал", *пике* "һөңгө".

Майя календарын Ю.В. Кнарозов "егерме көнлөк" тип атаһа ла, "егерме айлыҡ" тип әйтеү дөрөҫ булыр (260 көн 13-әр көнлөк 20 айға бүленә). Был иһә уларҙағы кукуруздың уртаса үҫеү ваҡытын (40 һәм 60 көн) һәм тылсымлы 13 һанын күҙ уңында тотҡан төрлө арауыҡтарҙарҙың -- 364 көнлөк йылды 28-әр көнлөк 13 айға бүлеүсе (364:13=28) боронғораҡ календарҙың булыуы менән дә, һәм һуңғыраҡ замандарҙағы 65 көнлөк (13 көнлөк 5 ай), 52 көнлөк (13 көнлөк 4 ай) һәм 26 көнлөк (13[46] көнлөк 2 ай) ваҡ әйләнештәрҙең булыуы менән дә дөрөҫләнә. Ә тәүҙә әйтелгән 260 көнлөк йыл календары иһә, Ю.В. Кнарозов иҫбатлауынса, бик боронғо "игенселек ядкәре" булып тора һәм ул боронғо майя теленән, һуңғы быуындар тарафынан, өлөшсә тәржемәләп тә, боҙоп та күсерелгән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, текст теле беҙгә шаҡтай аңлайышлы терминдар менән тулы.

**1. Ин,** боронғоса әйтелеше **имиш** "орлоҡ" — башҡ. *ик-ин — иген* "орлоҡ" һәм *емеш* "орлоҡ". Яҙғы сәсеүгә орлоҡ әҙерләү айы.

**2. Иҡ** "ел" — башҡ. *ик* "орлоҡто ик (сәс)" һәм *ике* "икенсе ай". Яҙғы батҡаҡтан ер елләп, сәсергә яраҡлы ваҡыт.

**3. Аҡ** "яуынлы-болотло көн — ҡараңғылыҡ", "ямғыр" — башҡ. *аҡ-яуын* "томалаған өҙлөкһөҙ яуын" һәм *аҡ* "һыу-аҡ".

**4. Һа (һу?)** "сәселгән бөртөктәр" — башҡ. *үһә//үҫә* һәм *үһү//үҫеү.* Игендең шытыуы.

**5. Чан,** боронғоса **Чик-чан** "болотло йылан" — башҡ. *шан* "һыу һаҡлағыс" һәм *ысыҡ-шан.*

**6. Чам** "сәселгән игендең үлеүе" (һарғайып өлгөрөүе) — башҡ. *сәм* "мин-минлек, ғорурлыҡ тойғоһо" (иген уңышына ҡарап сәмләнеү), *сәмә//сама* "уңыш күләмен билдәләү", *сәмәрт//смерть* "үлеү", *мәрт* "уянмаҫлыҡ (летаргик) йоҡо", *сәм-ала//сүмәлә* "урылған иген көлтәләренең өйөмө". Ураҡ ваҡыты.

**7. Чи** "болан?" — башҡ. *жи//йей* "аша" һәм *йый* (игенде йый), *чите//йете//етте* (етенсе ай). Яңы иген уңышының, йыйылып бөтөп, ауыҙға етеүе.

---

[46] 13 — майя календарҙарына хас "иблес һаны" (13) уларҙың "иблес иле" һаналыусы аҫҡы донъяла (Америка ҡитғаһында) йәшәүҙәренең билдәһелер; өҫкө донъяны (Африка ҡитғаһын) "Дәү Хоҙай һаны" 14, ә урта донъяны (Евразия ҡитғаһын) "хоҙай-бәндә һаны" 12 билдәләгән.

**8. Еч,** боронғоса **Ич-аҡ** “йондоҙ?” — башҡ. *эс* “ҡорһаҡ” һәм *эс* “ашап-эс”; **ич-аҡ** — башҡ. *эсәк, эсәк-эс//сәкес* “һигеҙ” (һигеҙенсе ай).

**9. Тох,** боронғоса **Мулук** “байлыҡ” — башҡ. *туҡ* “тамаҡ туҡ”, *муллыҡ* “байлыҡ”, *туҡ-уҙ//туғыҙ.* Туҡлыҡта уҙған 9-сы ай.

**10. Оч,** боронғоса **Оҡ** — башҡ. *ос* “нимәнеңдер осо”, *уҡ* “осло уҡ”, *уҡ-табар//октябрь.* Йылдың 1-се яртыһының осо — 10-сы ай.

**11. Ки (чи?)** — башҡ. *кей, сис* “кейен-сисен” (кейем-һалым). Ҡышҡылыҡҡа кейем-һалым әҙерләү айы.

**12. Ееб** “томан, быҫҡаҡ ямғыр” — башҡ. *ейеб//ейеү* ебшеп-һыуланыу”. Көҙгө батҡаҡ.

**13. Бен, беен** — башҡ. *бейен* “бейе”, *бөйән* “майлы эсәк”; иҫке төркисә *бекин* “ныҡлыҡ, ҡатылыҡ” (ДТС, 92-се бит). Ер туңған ваҡыт.

**14. Хиш** “ягуар” айы — башҡ. *ҡыш* һәм *кеш* (ҡышҡы һунар йәнлеге). Һунарға йөрөмтәл ҡыш айы.

**15. Мен** “эш” — башҡ. *мен* (ҡояш юғары менә — яҙға тарта) һәм *мен* (атыңа мен — эш башла). Яҙ айы.

**16. Чиб** “ныҡлыҡ”, боронғоса **Киб** “балауыҙ” — башҡ. *чиб-ир//сибәр* “ныҡлы, матур” һәм *чиб-ик//сибек* “ҡорошҡан”, *киб//көп* “бал көбө — балауыҙ”. Баҫыу тупрағының балауыҙланып кибеүе — сәсергә яраҡлашыу айы.

**17. Чаб-ан,** боронғоса **Каб-ан** “ер геүләүе”— башҡ. *сабан//һабан* “ер һөрөү ҡоралынан ерҙең геүләүе” һәм *ҡабан* “суска” (ер һөрөүсе яныуар). Һабанға төшөү айы.

**18. Хец** “ҡеүәтләнеү” — башҡ. *көс.* Киләһе иген уңышы өсөн ерҙең көс туплау айы.

**19. Ку** “күк күкрәүе”, “ямғыр”, боронғоса **Кавак** “оҙайлы” (ямғыр) — башҡ. *күк* “күк күкрәү”, *ҡабаҡ//ҡапаҡ* “яҡшы, шәп”.

**20.** *Ла* “оло”, “хаким” — башҡ. *оло.* Майяларҙа был ай *ицамна* (әсәм-ана — үҫәргәндәрҙең Аҫаба хоҙайбикәһе) миҙгеле һаналған — сәселәсәк игендәргә уңыш теләп табынғандарҙыр, моғайын.

Майяларҙа календарҙарҙы әжерселәр (жрецтар) төҙөгән, аңлатҡан һәм һаҡлаған, ә улар үлгәс календарь-яҙмаларын мәйет менән ҡуша ҡәбергә — “бабалар өйө”нә һалғандар, тап боронғо башҡорттарҙағы кеүек.

Инде килеп боронғо башҡорт-бүре бабаларыбыҙҙың океан аша ҡайһы юлдарҙан ҡасан һәм нисек итеп Көньяҡ Америка ҡитғаһына барыуҙарын бәйән итәһе ҡалды.

## Көньяҡ Америка “бүре”ләре

Үткән бүлектәрҙә башҡорт бабаларҙың донъяла иң тәүге диңгеҙ гиҙеүселәре булғанлығын, Алыҫ Көнсығышта Һары һәм Ҡытай диңгеҙҙәренән караптарҙа алыҫ көньяҡҡа табан Океания утрауҙары теҙмәһе (архипелаг) буйлап Яңы Зеландияғаса барып еткәнлеген комплекслы мәғлүмәттәр аша сискәйнем. Инде шул юлдың урта бер тәңгәленән улар көнсығышҡа ҡарай тоҫҡалып, 15 градус көньяҡ арҡау

(широта) буйлап Көньяҡ Америка ҡитғаһына еткән маршрутты фашлайһы ҡалды; тик шунан элек бабаларҙың ысынлап та иң тәүге диңгеҙ гиҙеүселәр икәнлеген дәлилләүсе халыҡ-ара диңгеҙ терминдарының иң мөһим бер килкеһен тамаша ҡылдырырҙан алда аҙ ғына сабыр итеп, бөтә ҡитға (һәм Ер шары) буйлап үткән, башҡорт Уралында (Арҡайымда) бер-береһен арҡыры киҫешеп сатрашланған ике изге юлды иҫкә төшөрәйек ("Хәтерхитап"та тулыраҡ мәғлүмәт бар):

1. Көн-Өфө (Хәнифә) юлы -- ҡитғабыҙҙа төньяҡ-көнсығыштағы Һары диңгеҙҙән алып көньяҡ-көнбайыштағы Ҡыҙыл диңгеҙгәсә.

2. Ҡуңыр-Буға юлы -- көньяҡ-көнсығыштағы Күк (Һинд) диңгеҙенән алып төньяҡ-көнбайыштағы Ҡара (Карское) диңгеҙенәсә.

Икеһененең дә диңгеҙ-океанға барып сыҡҡан остарында ул юлдарҙы караптарҙа "диңгеҙ бүреләре" -- мифик Әсә-Бүрене имеп үҫкән Шүлгән (һыу стихияһына бәйле башбаба) тоҡомдары (үҫәргән башҡорттары) һыу өҫтөнән дауамлаған. Ғүмере буйҙарына диңгеҙ-океан гиҙеүсе, изге Әсә-Бүренән ярлыҡаныусы был әҙәмдәрҙе, һүҙ аҙағына "-т" күплек ялғауы теркәп, "батыр-әсә-бүре-т" (батыр әсә-бүреләр) тип ләҡәпләгәндәр; бына шул ләҡәп һөйләштәрҙә ҡап-уртаға бүленеп ике исем: "батырәс-бүрет" (матрос-пират) һүҙе барлыҡҡа килгән; ул "диңгеҙ бүреләре", боронғо сығанаҡтарҙа күренеүенсә, ысынлап та диңгеҙ юлбаҫарлығы (морской разбой) менән шөғөлләнгәндәр. (Ошо көндәрҙә лә диңгеҙ-океан гиҙеүҙе үҙенең ғүмерлек һөнәре иткән кешене "диңгеҙ бүреһе" -- морской волк -- тип ләҡәпләйбеҙ). Был батыр "диңгеҙ бүреләре" борон "бүре-әсән" (бүржән, бүрәс -- прус, перс-фарсы) йәғни Бүре-Әсәнән тыуған, тип тә ләҡәпләнгән; көнбайыш диңгеҙҙәрҙе айҡаусы шул маһирҙарҙы урта быуат ғәрәп географтары тап шулай "бүржән" (хәҙергесә әйтелештә "бөрйән") тип яҙа (Востоковедение, 4. Исторические исследования. Л., 1977; 195 -- 197-нсе биттәр). Боронғо шул "бүрет" ("бүреләр") тигән һүҙебеҙ халыҡ-ара телдә әлегәсә -- борт (карап), порт (караптар туҡталышы) булып йөрөй; ә "бүре-әсә" һүҙебеҙҙең боронғо формаһы бурс -- хәҙер ҙә пирс (караптар килеп терәлмәле яр сите). Ҡуңыр-Буға юлының Күк (Һинд) диңгеҙенә сыҡҡан осоноң яр сите лә тап шулай бурс -- пәрс (перс), фарс (фарсы) исемләнгән (әлегәсә унда Фарсы диңгеҙ ҡултығы һәм яр буйҙары); ул тирәнең диңгеҙ-океан гиҙәрмәндәре (матрос-пираттары) шулай уҡ бүрс (бүрсән -- бөрйән), перс (фарсы) тип ләҡәпләнгән, илдәре лә Персия -- Фарсыстан йөрөтөлгән (хәҙерге Иран). Ҡуңыр-Буға юлының Ҡара (Карское) диңгеҙгә сыҡҡан осондағы "диңгеҙ бүреләре"нең бейҙәре лә, шул баяғы Әсә-Бүрегә бәйле би-ҡунаҡ ("ҡунаҡ" тип бабалар изге бүрене әйткән; шунан килә кинок -- грекса бүре-эт) ләҡәпләнеп, би-кинк -- викинг атамаһы барлыҡҡа килгән. Ҡитғабыҙҙың алыҫ көнбайыш осондағы бүрет-брит ("бүреләр") барып етеп төйәкләнмеш ҙур утрау ҙа тап шулай "бүрет-ән-өйө" -- Британия аталмыш...

Изге ике юлдың ҡоро ер өлөштәрендә лә "бүре"ләрсә гиҙеп йөрөүселәрҙең ырыу башлыҡтарын Көн-Өфө юлындарында -- "би-атас" -- витязь тип, ә Ҡуңыр-Буға юлындағыларын "бәк-ат-ир" -- баһадир, батыр тип йөрөткәндәр.

Инде ҡарашыбыҙ Алыҫ Көнсығышҡа -- Көн-Өфө юлының Һары диңгеҙ, Ҡытай диңгеҙе осондағы "диңгеҙ бүреләре"нә -- пираттарға йүнәлтелә, сөнки караптарҙа Көньяҡ Америка ҡитғаһына (Аҫҡы Донъяға) юлығыусылар тап шулар

бит. Улар үткән юлдың тәүге өлөшө ошолай тоҫмаллана: Яңы Зеландияғаса һуҙылған һәм “бүре”ләргә яҡшы таныш диңгеҙ юлының урта биле тәңгәленәнерәк көнсығышҡа тоҫҡалып, Санта-Крус утрауҙарынан 15 градус көньяҡ арҡау (широта) буйлап бара-бара Маркиз утрауҙары -- Туамету утрауҙары -- Питкерн утрауы -- Дюси утрауы аша үтеп, ҡола-ялан уртаһында, тип әйтерлек, яңғыҙы юғалып ҡалған, күпселек донъяға билдәһеҙ булған ергә -- серле Рапа-Нуи йәки Пасха утрауына килеп етәләр. Был хәл, моғайын, беҙҙең эраның беренсе мең йыллыҡ урталарында була.



Пасха утрауының географик картаһы

Тарихтан бер күренеш киң билдәле: диңгеҙ-океан пираттары кеше аяғы баҫмаған һил утрауҙарҙы үҙҙәренең йәшерен төйәге -- базаһы итеп ала торған булғандар, Пасха утрауы ла, моғайын, тап шул яҙмышҡа дусар ителгән: мыҡты матрос-пираттарыбыҙ бында хатта үҙҙәренең ҡәҙимге дәүләт ишаратын ҡорғандай. Утрау хужалары (пираттар), әлбиттә, ҡоро ерҙең ялҡытҡыс көнкүреш эштәрен өнәмәгән, һәр йәһәттән үҙҙәрен хеҙмәтләндертергә Полинезия утрауҙарынан кәрәгенсә эш ҡулдары (ярым ҡолдар) килтергәнгә оҡшай, был ҡәүем утрау-дәүләттең “ҡыҫҡа ҡолаҡ”тар тип аталмыш түбән ҡатлам кешеләрен тәшкил иткән. Уларҙың теле Полинезия халыҡтарының, бигерәк тә өҫтәрәк мәғлүмәт бирелгән маорийҙарҙың, теленә яҡынлығы, ә аҫыраған тауыҡтарының да Полинезия тауыҡ тоҡомонан икәнлеге уларҙың тап шул тарафтан -- көнбайыштан килгәнлеге хаҡында һөйләй.

Урындағы легендалар буйынса, б.э. V-VI быуаттарында Рапа-Нуиға тәүбашлап ике катамаранда Хоту-Матуа етәкселегендәге 50-ләп “ҡыҫҡа ҡолаҡ” тарыған, улар менән бергә тауыҡтар, файҙалы үҫемлектәр һәм кәмә төбөндә, осраҡлы рәүештә, бер-нисә ҡомаҡ та килгән; быуаттар дауамында ҡомаҡтар 20 миллионғаса яман үрсеп, утрауҙағы мөһәбәт пальмаларҙың төшкән һәр сәтләүеген шытмаҫтан элек үк ашап бөтөрә тороп, урмандың тамам юҡҡа сығыуының төп сәбәпселәренең береһе булған.

Ә ғалимдар радиоуглерод ысулы менән билдәләүенсә, Пасха утрауында кеше эшмәкәрлегенең башланыуы беҙҙең эраның 400 -- 700 йылдарына тура килә, ә был иһә ерле телде тикшереүсе лингвистарҙың билдәләүе менән дә яраша, тип һанай ҡайһы бер авторҙар. Әммә иң һуңғы ғилми һөҙөмтәләр мәсьәләгә яңыса ҡараш талап итә: Калифорния университеты (АҠШ) ғалимдары Терри Хант һәм Карл Липо тарафынан яһалған радиоуглерод анализ Пасха утрауында кеше йәшәй башлау осорон тәүҙә әйтелгәндән 400 -- 800 йыл һуңыраҡҡа сигертеп, б.э. 1200 йылы тирәһенә ҡайтарып ҡалдыра. Был осорҙа Евразия ҡитғаһында (Урта Донъяла) башҡорттарҙың бөйөк Ҡатай-Көҙән империяһы сәскә атҡан; уның биләмәләре Япон диңгеҙенән алып Каспий диңгеҙенәсә һуҙылған һәм, дәүләттең ҡоро ер хәрби көстәренән тыш, Тын океан киңлектәрендә мәғрур диңгеҙ флоты

айҡап йөрөгән -- тап шул дәүерҙә "оҙон ҡолаҡ" тип аталмыш башҡорт "диңгеҙ бүреләре"нең Пасха утрауында төйәкләнеүе лә, аҙаҡ Көньяҡ Америка ярҙарынаса үтеүе лә, минеңсә, шик тыуҙырмай. Билдәле булыуынса, был "оҙон ҡолаҡ" матрос-пираттар утрауға буйҙаҡ килеп (тәбиғи!), "ҡыҫҡа ҡолаҡ" ҡатын-ҡыҙҙарға өйләнгәндәр; уларҙың ҡолаҡ шәрифтәре ысынлап та "йәйпе" (оҙон) булып, аҫҡа ныҡ һәленеп төшкән (сәбәбен һуңыраҡ асырбыҙ). Улар үҙҙәренә башҡа бер ҡәүем тәшкил иткән: үҙенсәлекле мәҙәниәте, теле, яҙмаһы, таштан балбалдар һынландырыуы менән "ҡыҫҡа ҡолаҡ"тарҙан ныҡ айырылған -- улар өҫтөнән рәхимһеҙ идара ҡылған.


Пасха утрауында "оҙон ҡолаҡ" балбалдар

Инде ошо серле утрауҙа таштан юнып торғоҙолған, әлегәсә бөтә донъя халыҡтарын хайран ҡалдырған мәғрур балбалдарға -- ғорур-серле һындарға иғтибар йүнәлтәйек: үҙенсәлекле ҡиәфәттәре менән бергә дәүмәлдәре лә шаҡ-ҡатырғыс бит -- ҡайһы-ларының бейеклеге биш-ете ҡатлы йортҡа тиңә-леп, ауырлығы һикһән тоннағаса етә, ә арала береһенең күкрәгендә ул саҡтағы полинезиясы-ларға хас булмаған елкәнле карап һүрәте! Өҫтәүенә, майҙаны 164 квадрат километрлы утрау өсөн балбалдар һаны ифрат күп: 200 данаһы яр буйҙарына теҙелеп, 700-ләбе төрлө урындарҙа торғоҙоп һәм яткырып ҡалдырылған. Йәнә лә бер фәһемле объект бар -- "Ер Кендеге"; ул, Уралдағы "Ер Кендеге" Арҡайымдың кескәй күсермәһеләй, таштан түңәрәкләп буралған. 1962 -- 1964 йылдарҙа бында соҡсонған иң һуңғы археологик экспедиция башлығы Ф. Мазьер һәм уның иптәштәре ерҙән ҡаҙып сығарылған бер таш һынды күреп хайран ҡала: өҫтәрәк бәйән ителгән тап Мексика "бүре"ләре үлмәктәрҙең (ольмектарҙың) ҡомарткыһы кеүек, һаҡаллы был бабай ҙа тап шул беҙгә таныш бер үк ҡиәфәттә -- тап башҡортса аяҡ бөкләп ултыра...


Пасха утрауындағы Ер Кендеге

Донъя ғалимдары һаман шуға баш вата: кемдәр һынландырған был тотандарҙы (титандарҙы), ни өсөн? -- серенә төшөнә алмайҙар. Ә сер асҡысы, минеңсә, бәғзе берәүҙәр баштарына ла килтермәгән башҡорт бабаларында -- баяғы "диңгеҙ бүреләре" матрос-пираттарҙа!

Һәммәбеҙгә лә мәғлүм: “теге донъя”ға киткән (үлгән) батырҙарыбыҙ, бейҙәребеҙ иҫтәлеген бабаларыбыҙ уларҙың таш һындарын -- балбалдар ҡалҡытып мәңгеләш-тергән; был һындар Япон диңгеҙе ярҙарынан алып Ла-Маншҡаса ҡитғабыҙ буйлап теҙелгән. Ошо изге йоланы, әлбиттә, мәғрур “диңгеҙ бүреләре” -- матрос-пират бабаларыбыҙ ҙа тырышып башҡарған кеүек: атаҡлы таш “бүре”ләрҙең “оҙон ҡолаҡ”лы ҡиәфәттәрен, үҙҙәренең донъяһы һаналған һыу битенә теҙеп булмағанлыҡтан, әлеге лә баяғы шул төйәккә -- Пасха утрауына торғоҙған. Күргән һәр кем хайран ҡала: ҡолаҡтары йәйпе-оҙон, сәстәре ҡыҙыл-ерән... ни өсөн? Бынығына ла яуап бар. V быуат ҡытай тарихсылары яҙып ҡалдырыуынса, ошо “диңгеҙ бүреләре”н тыуҙырып үҫтергән үҫен-үҫәргәндәрҙең “сәсе маймылдыҡылай ерән, күҙҙәре зәңгәр” булған. Матрос-пират әһеленең йәйпе-оҙон ҡолаҡтары ла тәбиғи -- сәбәбе бар. Сөнки диңгеҙҙәрҙе айҡап, юлбаҫарлыҡ ҡылып тапҡан байлығын ул алтынға әйләндергән һәм шул хазинаһын, карап батҡанда ла юғалтмаҫ өсөн, даими үҙендә -- ауыр алтын алҡа рәүешендә ҡолаҡка элеп йөрөткән, ғүмере буйына шул ауырлыҡ тартымынан ҡолағы оҙонайған. Бындайҙар вафат булғас, алҡаһын дөйөм ҡаҙнаға һалдыртып алып, аяҡтарына гер тағып диңгеҙгә күмгәндәр, шуға күрә лә утрауҙағы аруахтары алҡаһыҙ һынландырылған...


Пасха утрауындағы “боронғо-боронғо” яҙма

Диңгеҙҙәрҙе гиҙеп, хатта Ер шарын урап, донъя күреп ҡайтҡан “оҙон ҡолаҡ”-тар илдәгеләргә иң мөһим яңылыҡтарҙы хәбәр иткәндәр; шуға күрә әлегәсә алыҫтан килгән яңылыҡты “оҙон ҡолаҡтан ишеттем” тип һөйләйбеҙ.

“Оҙон ҡолаҡ” бабалар-ҙың үҙенсәлекле яҙмаһы булған, тигәйнек. Бына шулар-ҙан ҡалған, “боронғо-боронғо” (ронго-ронго) тип аталмыш яҙма ҡомартҡыларҙы утрау-ҙың “ҡыҫка ҡолаҡ”тары тыл-сымлы бетеү рәүешле һаҡлаһа ла, береһе лә уны уҡый белмәгән, сөнки пират бабаларҙың үҙ телендәге, үҙҙәре уйлап сығарған йәшерен яҙмаһылыр ул -- ошоғаса ғалимдар ҙа серенә төшөнгәне юҡ. “Оҙон ҡолаҡ”тар үҙҙәре, бөтә билдәләр буйынса, XII быуатта (бөйөк Ҡатай-Көҙән дәүләте тар-мар ҡылынған осорҙа) ҡапыл ғына утрауҙан юҡка сыҡҡандар, хатта эшләнгән һәм эшләнеп ятҡан таш һәйкәл-балбалдары ла эш урындарында ҡалған -- бының сәбәбе лә, сиселмәҫ сер һаналһа ла, тарихи яҡтан яҡшы уҡ төҫмөрләнә (нәүбәттәге бүлектәрҙә сиселер). Был “оҙонғолаҡ” бабаларҙың, “ҡыҫка ҡолаҡ”тарҙан айырмалы буларак, башҡорт телендә һөйләшкәнлеген дәлилләүсе бер килке һүҙ-терминдар, әлбиттә, башҡа тел ҡалыбына һалыныуҙан күпмелер үҙгәреш кисереп, хәҙерге утрау кешеләренең телендә ҡулланыла, мәҫәлән (тәүге юлда

ҡалын хәрефтәр менән ерле телдәге һүҙ һәм һыҙыҡ аша уның мәғәнәһе, ә юл аҫтында ябай хәрефтәр менән шул һүҙҙең хәҙерге башҡортса әйтелеше бирелә):

**аку-аку -- рух, өй эйәһе**

аҡа -- аға -- айа -- эйә (өй эйәһе, һыу эйәһе һ.б.);

**ао -- кәмә ишкәге**

ау (балыҡ аулау ҡоралы);

**ана -- мәмерйә, ер тишеге**

ана, инә, инәлек;

**ана каи тангата -- кеше ашау мәмерйәһе**

инә (өң) ҡайыҙлау тән ҡотон, йәғни кешенең ҡотон алыу, ашау;

**арики -- юлбашсы, ырыу башлығы**

әр-әкә (ир-аға);

**атуа -- хоҙай**

ат-уба -- ут-апа (Ҡояш);

**аху -- аҡ таш өйөмө**

ахуа -- аҡ уба (Аҡташ, Аҡтүбә, Аҡтау кеүек);

**еепе -- яҫы, оҙон ҡолаҡ**

йәйпе (йәйенке, яҫы);

**епе -- ҡолаҡ**

йәбе (ике йәпле үҫен -- ҡолаҡ);

**епе ророа -- оҙон ҡолаҡ**

йәбе оро-оро (эре-эре йәғни оҙон ҡолаҡ);

**ити -- сабый бала**

ите (бала -- бауыр ите);

**ити-ити -- бәпес**

ите-ите (бәп-бәләкәс, бәпес);

**кирикири теа -- төйөлгән таш онтағы**

кәре-кәре-төйә (кәр -- таш), таш-таш төйә, онтай;

**ко-те-уму-о-те -- ханау еепе -- "оҙон ҡолаҡ"тарҙы ҡурған ер-мейес"**

кәттә-өмә-уты-хандарын-йәйпеләрҙең ("оҙон ҡолаҡ" хандарҙы өмәләп ҡурған урын);

**ронго-ронго -- бик боронғо яҙыу ырылған таҡта**

боронғо-боронғо;

**кумара -- бәрәңге (картуф)**

көмөрө -- йоморо;

**маеа -- таш тоҡомо**

мая (тауыҡ ояһына һалынмалы йоморо аҡ таш), маяҡ -- таш бағана;

**маеа матаа -- таш башаҡлы уҡ, һөңгө**

мая мәтәлә (таш атыла);

**маеа ренго-ренго -- таш ҡырғыс**

мая ҡырынғы-ҡырынғы (таш ҡырғыс);

**маеа токи -- таш балға, сүкеш**

мая төкөй (таш төкөй -- сүкеш);

**маеа ханe-ханe -- ҡан төҫлө ҡыҙыл таш**

мая ҡан-ҡан -- ҡандай ҡып-ҡыҙыл таш;
**Макемаке -- Дәү Хоҙай**
Баға-баға (бағыусыларҙың бағыусыһы -- Дәү Хоҙай);
**маори -- әжерсе, әүлиә**
бағари, бағыусы;
**марае-ронго -- алыҫтағы бабалар иле**
барайы боронғо (бараһы боронғо ил);
**моаи -- боронғо таш һын, бабай**
бөүәй -- бабай;
**момоко -- нәҙек, арыҡ**
мамыҡ (нескә сүс);
**Рапа-Нуи -- Пасха утрауының ерле һөйләштәге исеме**
рапат (йәйенке тау);
**рима -- биш бармаҡлы ҡул суғы**
үрмә (бармаҡтар үрмәһе), үрмәләү ағзаһы;
**ророа -- эре-эре (үтә эре)**
эре-эре;
**Тонгарики -- изге аҡ уба**
Тәңренеке;
**хури моаи -- легенда буйынса, таш һындарҙы ауҙарыу һуғышы**
ҡырыу маяларҙы (таш һындарҙы).



Бүре (Перу) иленең физик картаһы

Туғыҙға тиклем һанауҙарында боронғо үҫәргән-үҫен календарының шаңдауы тойола:

1: тахи -- дөгө;
2: руа -- арпа;
3: тору -- тары;
4: ха -- һыу;
5: рима -- үрмә, үрем (иген үреп сыға, шыта);
6: оно -- оно, он;
7: хиту -- йотоу;
8: вару -- барыу;
9: ива -- аба, апа (Ҡояш-апа).

## “Оҙон ҡолаҡ бүре”ләр -- Көньяҡ Америкала

Тәүмифология буйынса, Урта Донъя (Евразия ҡитғаһы) бәндәләре Өҫкө (Африка) һәм Аҫҡы (Америка) Донъяларға ике төрлө -- үлеп һәм тере килеш тә китеүҙәрен иҫкәрткәйнек.

Башҡорттарҙың Ҡатай-Көҙән империяһы билдәле сәбәптәр арҡаһында тамам сереп, 1125 йылда ярымҡырағай журжан-тунгус ҡәбиләләре тарафынан

тар-мар ҡылына, халҡының байтағы ҡырылып, “үлектәр иле” тип аталған Аҫҡы Донъяға китә. Эшлекһеҙ һәм ырыҫһыҙ һуңғы император тау араларында ҡасып йөрөп үлеп ҡала -- Аҫҡы Донъяға күсә. Заманының иң көслөһө һаналған, диңгеҙ-океандар гиҙеп йөрөгән ҡатай-көҙән диңгеҙ флотының яҙмышы иһә әлегәсә билдәһеҙ, тарихсылар уның серле рәүештә эҙһеҙ юғалыуын әйтәләр.

Минеңсә, һис тә юҡҡа сыҡмаған, эҙҙәре лә ярылып ята.

Шуны иҫтә тотайыҡ: данлы флоттың башында, караптарҙың капитан баҫмаларында, әлбиттә, ҡара ябай-ялпы түгел, ә император улдары, император йорто ағзалары торған һәм был “оҙон ҡолаҡлы диңгеҙ бүреләре” дошман ҡулына ҡалған илгә әйләнеп ҡайтмағандар -- тере килеш Аҫҡы Донъяға китеү юлын һайлағандар, сөнки улар “үлектәр иле”ндә лә үҙҙәре кеүек үк тере кешеләр йәшәүен, тереләтә унда барыу юлдарын яҡшы белгәндәр. Һәм ҡәҙимге пираттар юлынан ике ҡитға араһындағы “сират күпере”нә -- Пасха утрауына килеп, ундағы “оҙон ҡолаҡ-бүре” ҡәрҙәштәре-нең хеҙмәткә яраҡлы йәштәгеләрен үҙҙәре менән алып, ҡарт-ҡороһон утрау һағында ҡалдырып, көнсығышҡа ҡарай сәйәхәт дауамлағандар ҙа Аҫҡы Донъяның көньяҡ яртыһына етеп якорь һалғандар. Сағыштырмаса түбәнерәк үҫеш кимәлендәге аборигендарҙы ауырлыҡһыҙ буйһындырып, яр буйында үҙҙәренең ***Бүре*** (хәҙерге Перу) дәүләтен нигеҙләгәндәр һәм был дәүләт тиҙ арала нығынып, испан конкистадорҙары килеп баҫып алғанғаса быуаттар буйына сәскә атып йәшәгән. Уның сал-боронғо тарихы берҙән-бер һәм ышаныслы китап буйынса мәғлүм, испан телендәге был хеҙмәтте Бүре (Перу) короллегенең һуңғы короленең ике туған һеңлеһенең улы (ул Испанияла тәрбиәләнгән) Инка Гарсиласо де ла Вега (1539 йылда тыуған) үҙе яҙып ҡалдырған (урыҫсаға тәржемәһе: Инка Гарсиласо де ла Вега. История государства инков. Л., 1974. Артабан һылтанмаларымда -- Г.).

Мәшһүр Тарихтан асыҡ күренеүенсә, “оҙон ҡолаҡ”лы “диңгеҙ бүреләре”н был ергә, имеш, Менәкәй Көбәк (Манко Капак) йәғни Ата Бүре исемле баба (Бүре дәүләтенең беренсе короле) юл башлап килтергән; сөнки башҡорт телендә “көбәк” -- ата бүре-эт, “ҡапаҡ” -- яҡшы, шәп мәғәнәһендә әлегәсә ҡулланыла. Был тарихи күсенеү ваҡиғаһы, Г. китабынан күренеүенсә (68-енсе бит), Бүре илен испандар баҫып алған 1525 йылдан теүәл 400 йыл элек, тимәк, 1125 йылда -- тап Ҡатай-Көҙән империяһы емерелгән саҡта булған. Юғалғандыр, тигән флотыбыҙ, күренеп тора! -- тап ошо Перу ярҙарында табылды! -- һәм был Бүре дәүләтен нигеҙләүселәр -- ысынлап та “оҙон ҡолаҡ-бүре”ләр! Ошо фекерҙе нығытыусы дәлилдәр Г. китабында ярылып ята: ил эсендә королдәр тоҡомо ғына “оҙон ҡолаҡ”лы һәм уларҙың бөтәһе лә китап биттәрендә ҡолаҡтарында дәү алҡалар һәлендертеп һүрәтләнгән; автор аңлатыуынса, уларҙың ҡолаҡтары, махсус алҡа-ҡулса тағыу арҡаһында аҫҡа һуҙылып үҫкән (Г. 58-енсе бит). Икенсе бер автор быны дөрөҫләй: хакимлыҡ итеүсе был тоҡом “оҙон ҡолаҡ”лы булыуҙары (короллек билдәһе) менән башҡаларҙан ныҡ айырылған (Милослав Стингл. Индейцы без томагавков. М., 1984. Артабан һылтаныуҙарымда -- С.). Шуныһы ла фәһемле, король йорто ағзалары үҙ-ара үҙҙәренә башҡа “йәшерен” телдә һөйләшкән (С. 143, 164-енсе биттәр) -- үҙҙәренең башҡорт телендәлер, әлбиттә!

Аҫҡы Донъяға тарыған бабаларҙың рухи донъяһын яҡшыраҡ аңлар өсөн, тәүмифология ҡанундарының береһен хәтерләйек: Урта Донъя күренеше Өҫкө

һәм Аҫкы Донъяларҙа көҙгөләгеләй ҡапма-ҡаршыға үҙгәрә, йәғни ҡатын-ҡыҙ енесле Шүлгән башы Көн-апа (Ҡояш) -- ир-ат енеслегә әүерелеп, уның ярлыҡаусы имсәк әсәһе (эйәһе) Әсә-Бүре -- ир-ат енесле Урал башы Ай-ағаның ярлыҡаусыһы Инәкәйгә (Болан-Һыйыр-эйәгә) алмашына; ә Әсә-Бүре үҙ сиратында Урал башы Ай-аға яғына күсә. Шул рәүешле һул яҡ -- уң, уң яҡ -- һул; төньяҡ -- көньяҡ, көньяҡ -- төньяҡ; көнбайыш -- көнсығыш, көнсығыш -- көнбайышҡа үҙгәрә; шуға күрә лә башҡортта: "Ахыр заманда Ҡояш киренән -- көнбайыштан сығыр", -- тигән ырым бар. Бына ошо ҡапма-ҡаршыға үҙгәреш ҡағиҙәһенең үтәлешен Аҫкы Донъяның Бүре (Перу) иле мифологияһында күрәбеҙ: бында Көн (Ҡояш) -- ата, уның һеңле-ҡатыны Ай -- әсә (ә Урта донъяла улар киреһенсә ине). Тап шул ҡанунға бәйле, Бүре дәүләтен нигеҙләүсе, Урта Донъяла сағында Әсә-Бүре ярлыҡауындағы "ата бүре" Манко Капак һәм уның нәҫелдәре Аҫкы Донъяла Инка (Инәкәй-Болан-Һыйыр) ярлыҡауына күсә. Ә королдең һеңле-ҡатыны Мамо Окльо Вако -- аңлатып әйткәндә Мәмә-Ҡушимсәк Аҡлы-Һөтлө Бағыусы-Әсә-Бүре, моғайын, Урта Донъяла сағында, әле әйтелгәнсә Әсә-Бүренең түгел, ә ундағы ир-ат енесле Ай-ағаның ярлыҡаусыһы Инәкәй-Болан-Һыйырҙың ләҡәбен йөрөткәндер. Бүре (Перу) илендә улар икеһе лә Ҡояш нурынан яралмыш изге заттар һаналған (Г. 46-нсы бит); әйткәндәй, үҙебеҙҙең Урта Донъя мифологияһында ла бит башҡорт-төрки хандарының шәжәрәһе Ҡояш нурынан башлана!

## "Бүре" бабаларҙың көнкүреш хәле, рухи донъяһы (Г. һәм С. китаптары буйынса)

Бабабыҙ Сыңғыҙ-хан кеүек үк, Манко Капак та Бүре (Перу) иле ырыуҙарына тамға-билдәләр тараҡҡан (Г. 59, 60-ынсы биттәр).

Королде "аҫаба" (сапа) тип ҙурлағандар һәм ул бөтә ерҙең хужаһы, аҫабаһы һаналған (Г. 62, С. 156-нсы биттәр).

Королдәр тоҡомон ("бүре"ләрҙе) ябай-ялпынан айырыусы билдә -- аҫҡа табан һалынып төшкән "оҙон ҡолаҡ" булған, ҡолаҡтарҙы тишеп, ауыр алҡа тағып йөрөү ярҙамында шул сифатҡа ирешкәндәр (С. 157-нсе бит).

Инәктәр ерен, имеш, боронғо инәктәрҙең береһе Пачаку(р)ти (башҡорт) Инка Йупанки сатраш-юлдар (+) ярҙамында (Көн-Өфө -- Ҡуңыр-Буға юлдарылай) дүрт өлөшкә бүлеп биргән. Юлдар киҫешкән сатраш үҙәгендә Ер Кендеге Арҡайымды хәтерләтеүсе Ҡашҡа (Куско) исемле баш ҡала торған (С. 147-нсе бит).

Йәмәғәт (община) еренән һәр иргә өлөш -- "түбә" (тупу) бүлеп бирелгән (С. 154, Г. 273-өнсө биттәр).

Күмәк көс талап иткән эштәрҙе, тап бөгөнгө башҡорт өмәһеләй, "өмә итә" (мита) ярҙамында башҡарғандар (С. 155-енсе бит).

Юл-сатраштың һәр буйы юлаусыларҙы хеҙмәтләндергес ҡунаҡҡалар, аҙыҡ келәттәре менән йыһазландырылған, йәйәүләп йөрөгәндәр. "Оҙон ҡолаҡ"тарҙы (король йорто ағзаларын) һәм юғары чиновниктарҙы күтәртмәләрҙә (носилки) ҡәҙерләп илткәндәр.

Тап Ырымбур гөбөрнәтере Перовскийҙы хеҙмәтләндергән башҡорт почта хеҙмәтеләй, юлдың һәр өс саҡрым араһын икешәр йүгерек-ир киҙеүләп

хеҙмәтләндергән (береһе йүгергәндә икенсеһе хәл алған): йүгереп килеүсенең ҡулындағы почтаһын көтөп торған киҙеүсе йәһәт эләктереп алып, артабан елдергән (С. 160, Г. 364-енсе биттәр).

Баҫыуҙарҙа эш сираты ошолай: иң тәүҙә Көн-хоҙайҙың ерен эшкәрткәндәр, шунан һуң -- тол ҡатындарҙыҡын һәм етемдәрҙекен, зәғиф-зәңкиҙәрҙекен һәм ҡарт-ҡороларҙыҡын, ауырыуҙарҙыҡын; уларҙың барыһы ла фәҡир ҡатлам һаналған, шуға күрә уларҙың эштәрен һау-сәләмәттәр эшләп бирергә тейеш булған. Һуғыштағы яугирҙәрҙең һәм уларҙың ҡатындарының ерҙәре лә шул тәртиптә эшкәртелгән. Һуғышта һәләк булғандарҙың балаларын, бәлиғ булғандарынса, оло хәстәрлекләп дәүләт аҫыраған (Г. 247-нсе бит). Һәр ир үҙенә ябай һуғыш ҡоралдарын (уҡ, һөңгө һ.б.) яһарға тейеш булған; түңәрәк ҡалҡан уларҙа ла “ҡалҡанҡай” (вальканка) исемләнгән (Г. 396-нсы бит).

Һалдат-мародер, ябай халыҡты талаусы үлем язаһына тарттырылған (Г. 284-енсе бит).

Һатлыҡйәнде йәғни дошман яғына ауышҡанды “ауҡа” (аука) тип хурлағандар (Г. 324-енсе бит).

“Алдаһам -- ер йотһон!” тип ант иткәндәр (Г. 77-нсе бит).

Башҡортта әлегәсә “уйындан -- уҫмаҡ” (усы йомоҡ -- йоҙроҡ), “усмаҡлап алыу” әйтемдәре булғандай, тегеләрҙә лә, һүҙҙең тәүге ижеген “йотоп”, маки (ус-маки) тип әйткәндәр йоҙроҡто (Г. 83-өнсө бит).

Донъяларҙы һәм хоҙайҙарҙы тыуҙырып, кендектәрен киҫеүсе Дәү Хоҙай ҙа тап беҙҙеңсә -- “Кендексе Бүре-Әсә” (Контикси-Виракоча) исемләнгән (С. 159-ынсы бит).

“Урал батыр” эпосындағы кеүек үк, әҙәм ҡорбандары салыу тыйылған (Г. 89-ынсы бит).

Йоҡлағанда йән, тәндән сығып китеп, донъя гиҙеп йөрөй, күргәндәре -- төш булып күренә, тип белгәндәр (Г. 88-енсе бит).

Бәпес тыуып, күпмелер көн үткәс, сәсен алыу йолаһы башҡарылған, шунан һуң исем туйы булған (Г. 209-ынсы бит).

Сәсте, тырнаҡты алғас, ташламағандар -- бүрәнә ярығына ҡыҫтырғандар (Г. 87-нсе бит).

Балаһын ата кеше -- “сура” (чури) тип, әсәһе “бәбәй” (вава) тип әйткән.

Яңы тыуған бәпесте, сыныҡһын өсөн, һалҡын һыуҙа ҡойондорғандар; иртә һайын, биләүләр алдынан, һалҡын һыуҙа ҡойондороп, асыҡ һауала йоҡлатҡандар. Өс айғаса бәпес ҡулдарын, бит-күҙен тырнамаһын өсөн, йүрмәнән ыҫҡындырмағандар. Яман өйрәнмәһен тип, ҡулға алыуҙан тыйылғандар; әсә уны, бишеккә эйелеп кенә, көнөнә өс тапҡыр имеҙгән (Г. 216-нсы бит).

Хәҙерге башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарылай, ҡайҙа ғына барһалар ҙа, ҡул эштәрен ҡалдырмағандар -- эшләү өсөн һәр форсаттан файҙаланғандар (Г. 218-енсе бит).

Күҙ тартыу ырымы ла башҡортса: һул күҙҙең өҫкө ҡабағы тартһа -- ҡыуаныҫҡа, аҫҡыһы тартһа -- күҙ йәшенә; уң күҙҙең өҫкө ҡабағы тартһа -- килем-байлыҡҡа, аҫҡыһы тартһа -- бәлә-ҡазаға. Аҫҡы ҡабаҡ тартҡанда уны һалам осон төртөп “тынысландырғандар”, башҡорт әле он һөртә. Ҡолаҡ сыңлауы ла төрлөсә юралған (Г. 226, 227-нсе биттәр).

Таштан бина бураѓанда ҡулланылѓан ҡыҙыл балсыҡ болѓатмаһының (раствор) исеме “һыланҡаҡ-хәлүә” (льанкак-хальпа) булѓан (Г. 338-енсе бит).

Король таянып ултырмалы алтын тәхет -- “таяна” (тиана); иген һаҡлаѓыс бура -- пирва (Г. 340-ынсы бит).

Һунар табышы улъя -- чаку, йәѓни суҡу -- һуѓыу -- һуѓым. Һуѓым ите халыҡҡа (фәҡиренә, байына бер тигеҙ) өләшелгән.

Башҡортостан биләмәләрендә әлегәсә һаҡланып ҡалѓан ҡарауыл тауҙарылай, дошман яҡынлашыуын күҙәтеп тороп, ут (төндә) һәм төтөн (көндөҙ) ярҙамында тауҙан-тауѓа хәбәр бирерҙәй ҡарауыл тауҙары булѓан (Г. 356-нсы бит).

Июнь айындаѓы Көн (Ҡояш) байрамында ҡамырҙан изге ашамлыҡ -- бауырһаҡ (санку) бешергәндәр; көндәлек тормошта тары (маис) ҡурмасы, йәиһә унын һыуҙа бешереп киптерелгәнен (беҙҙәге сүк) ашаѓандар (Г. 386-нсы бит). Бөтә халыҡ ҡатнашлыѓында оло бәйге үткәрелгән (Г. 394, 395-енсе биттәр).

Шул Ҡояш байрамында линза ярҙамында Ҡояштан изге ут алѓандар, ул утты киләһе йыл байрамынаса Ҡояш ҡорамында һүндермәй һаҡлаѓандар.

Көндәлек тотоноуѓа утты аѓасҡа аѓас өйкәп сыѓарѓандар; ысулы ла, аѓасы ла тап шулай “өйкә” (уйака) тип аталѓан (Г. 389-ынсы бит).

Иген (маис) сәселеп бөтөп, шытып сыҡҡас, тап бөгөнгө башҡорттаѓылай, илде гөрләтеп һабантуй үткәрелгән (Г. 437-нсе бит).

Башҡорттоң донъяѓа билдәле Үҫәргән батшалар шәжәрәһе кеүек үк, Бүре (Перу) дәүләтенең дә королдәр шәжәрәһе булѓан; ул шәжәрәне король тоҡомдары, башҡорттар аҡ батшаѓа мөрәжәѓәт иткәндәй, Испания короле уларҙы һалымдан азат итеүен һорап, 1603 йылда Мадридҡа атҡарѓандар. Шәжәрә, тап башҡорттоҡо һымаҡ уҡ, ир-ат енесе быуындары буйынса баулап төҙөлгән (Г. 646-нсы бит).

## Кечуа телендә һаҡланѓан башҡорт һүҙҙәре

Мәшһүр Инка Гарсиласо де ла Вега биргән ҡыҫҡа һүҙлектәге һүҙ өлгөләре, әлбиттә, уѓа тиклемге 400 йыл һуҙымында шөйлә үҙгәргән, ә шулай ҙа башҡортлоѓо күҙгә төртөп тора.

Түбәндә тәүге юлда ҡалын хәрефтәр менән кечуа телендәге һүҙҙән һуң һыҙыҡ аша -- урыҫса аңлатмаһы, ә юл аҫтында ябай хәрефтәр менән шул һүҙҙең бөгөнгө башҡортса әйтелеше бирелә:

**айа васи -- гробница**
аяулының (үлектең) баҙы;
**аймурай -- убирать урожай**
айым урай (урыу айы);
**айри -- топор**
ай-ора (айбалта);
**алко -- собака**
алаҡай, алѓыр (эт);
**апи -- каша**
әпи, әпәй (икмәк);

**апу, апо -- начальник, господин**

апа;

**һаравик -- певец, поэт**

һармаҡ, һармаҡлаусы;

**йарави -- песня, песнопение**

йырау, йыраусы;

**аток -- лиса**

өтөк;

**ауҡа -- предатель**

ауҡа (ауышырға һәләтле);

**ауҡа-кунапаҡ -- "для врагов" (формула при вручении боевого топора)**

ауҡаны ҡыйнамаҡ (балта);

**ауҡай -- сражаться**

айҡай;

**ауки -- младший сын царя, "инфант"**

әүкәй; үкә (үзбәксә "эне");

**вава -- дитя, ребенок (для матери)**

бәбәй, бәпәй;

**ваҡайчай -- сторожить**

бағайсаҡ, бағыусы;

**вакча -- сирота**

баҡса, бағылыусы;

**валька -- ожерелье**

алҡа;

**вальҡанка -- щит**

ҡалҡанҡай;

**вара -- набедренная повязка**

бөрә, бөрмә;

**варака -- праща**

бәрәкәй;

**вари -- туземец**

бүре, бур;

**васи -- дом**

баҙы;

**ватай -- связывать**

бутай, матай;

**вильай -- говорить**

һөйләй;

**йавар -- кровь**

йәбер;

**йаколька -- мужской квадратный плащ**

яҡалы;

**йача -- знание**

яҙа;

**йача васи -- дом обучения, школа**
яҙа баҙы;
**йана-куна -- слуга**
яна-күнә;
**йунка -- жаркая зона**
йүнке, йүнкеткес;
**йупа -- рассказ**
юпалау;
**ҡапаҡ -- богатый, могучий, великий**
ҡапаҡ;
**карача -- чесотка**
ҡарасаңҡы, ҡорсаңғы;
**ҡаркой -- выбрасывать, гнать**
ҡарғай;
**ҡарпак -- орошающий**
ҡырпаҡ (ҡар);
**ҡаса -- холод, мороз**
ҡаса, ҡас, ҡыш;
**ҡатыу -- рынок**
һатыу;
**качи -- соль**
ачи, әсе;
**каун -- сладкий картофель**
ҡауын;
**келька -- письмо, бумага**
килкә, килеүсе (хат);
**кенти -- колибри**
кәнтәй;
**кепа -- флейта**
көпө, көпшә;
**ҡеро -- деревянный сосуд**
көрәгә;
**кильу -- менустрация**
килеү, килем;
**ҡирку, кирко -- твердый, жесткий**
ҡырҡыу, ҡырҡа;
**ҡора -- трава**
ҡоро, ҡура, ҡара-ҡура;
**ҡоча -- море, озеро, лагуна, лужа**
кисә, кисеү;
**кука, кока -- листья для жевания**
күк-япраҡ;
**курак -- старший (по рождению)**
ҡарый;
**лоҡло -- пустой**

солоҡло;
**льанкак-хальпа -- склеивающая строительная красная глина**
Һыланҡаҡ-хәлүә;
**льоҡе -- левый**
Һулаҡай;
**миту -- глина**
мәте;
**мунай -- хотеть, желать, любить**
мөнәй, өнәй;
**муру -- пятнистый, двухцветный скот**
бурыл;
**мучуй -- нехватка**
мысай тарыһы (аслыҡ тарыһы);
**ньанья -- сестра (для сестры)**
нәнә;
**ньунью -- грудь, сосок, молоко**
нәнәй;
**ньуньуй -- кормить грудью**
нәни;
**оклъо -- девственница**
уҡалы ("уҡаһы ҡойолмаған");
**пако -- мелкий скот**
бәкәй (бәрәс);
**пакча -- оросительный канал**
баҡса;
**пальо -- женщина царской крови**
бәлә;
**пара -- дождь**
бәрә, бәреп яуа (ямғыр);
**пата -- ступенчатая платворма**
баҫа, баҫма, баҫҡыс;
**пеҡта -- лук (оружие)**
бөктө (ян);
**пукара -- крепость**
Бохара (ҡәлғә);
**пуруту -- фасоль**
бөрө-тыу, бүртеү (орлоҡ);
**пututу -- сигнальный инструмент из большой раковины**
бутыл (мал муйынына таҡҡыс ҡыңғырау);
**райми -- праздник**
байрамы, байрам;
**рити -- снег**
иретә;
**рокот учу -- сорт перца**
рәхәт-әсе;

**руна -- человек**
ир-эне;
**руна сими -- “человеческий язык”**
ир-эне сәме;
**ронто -- яйцо**
оронто, оро;
**сайри -- табак**
сары, һары (япраҡ);
**сапан -- единственный, уникальный**
асабан, аҫаба;
**сенка -- нос**
сәңкә, сәңкеш танау;
**сими -- рот**
сөмө, сөмөкәй (тәрәнлек);
**сипас -- юноша**
себеш;
**сора -- опьяняющий напиток**
ҫыра, һыра;
**сумаҡ -- прекрасный**
һомаҡ, һомаҡай, һомғол;
**супай -- дьявол**
һыбай;
**тарии -- встречать, находить**
тарый;
**тиана -- трон царя**
таяна;
**титу -- великодушный**
татыу;
**тупа -- сияние, царский**
түбә (бейеклек);
**тупа ньан -- царская дорога**
түбәнән (килгән юл);
**тупу -- мера, мера емкости**
тәпән;
**укумари -- медведь**
ау ҡомары;
**урку, урко, орҡо -- холм, гора**
үрге, арҡа, үркәс;
**усун -- слива**
үҫен;
**учу, хучу -- перец**
әсе;
**хайли -- триумф**
һыйлы, көйлө;
**ханан -- вверху, верх**

хан, ханнан;
**хатун -- большой, великий**
ҡатын, ҡотан;
**чаки -- нога**
шәкел;
**чакиро -- ювилерное изделие из золота**
саҡыра; сағылдыра (күҙҙе)
**чакра, чакара -- возделанное поле, надел**
сәхрә;
**чальва -- рыба**
селбәрә (ваҡ балыҡ);
**чампи -- боевой топор с острием на обухе**
сапма (сапҡыс);
**чанка -- нога**
саңғы (ағас аяҡ);
**чарки -- валеное мясо**
һарҡый (һарҡыған ит);
**чипа -- ловушка, западня**
сәпә;
**чири -- холодный**
сир;
**чуки -- копье, пика**
сүкей, соҡой;
**чури -- сын (для отца), племянник (для брата отца)**
сүрей, сура.

Билдәле булыуынса, "кис", "кисеү" һүҙенән "гиҙ", "гиҙеү" (мәҫәлән, диңгеҙ кисеү, диңгеҙ гиҙеү) килеп сыҡҡан, ә "еү", ("еүеш", "ыу") -- "һыу" тигән һүҙ. Тимәк, "һыу гиҙеү". Шуға бәйле, беҙҙең "оҙон ҡолаҡ" бабаларҙың телен үҙенә һеңдермеш ерле халыҡ атамаһы "кечуа" (кеч-уа) -- "кисә һыу", "гиҙә һыу", йәғни "һыу гиҙеүселәр" рәүешле тоҫмаллана.

Башҡорт халҡы, башҡорт теле ҡайҙа ғына таралмаған да кемгә генә кермәгән: ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы, тип юҡҡа ғына йырланмай...

08.03.2009

## Йөкмәткеһе

Тылсымлы асыштар эҙенән
Имир-тәүбаба тәненең ағзалары – Урал изге тауҙары
Тәүдиндән ҡыҫҡаса һабаҡ
Борцов әфәнденең эҙләнеүҙәре
Этностар ҡәрҙәшлеге
Немец-баба нимә ти?
Кирилл-баба кириллицаһы
Атлантида, Арҡайым һәм тылсымлы “Розо ташы”
“Цивилизаторҙар” һәм “ҡырағайҙар”
Ер шарының күсәрҙә әйләнеше – арбалағы тәгәрмәс әйләнеше
Ер шарының ҡоро ере тоташ бер ҡитға булған
Урал батыр менән Шүлгән батыр Ер шарын урап уҙа
Башҡорттоң ат дағалары…
…доғаланы донъяларҙы
Европала елгән башҡорт аттары
Өс донъяны урап уҙған башҡорттар
Ҡорбан салып баш өҙөү
Көн-Өфө юлы буйынан – океан утрауҙарына
Ҡайтабыҙ Күк Уралға
Америка ҡитғаһында ҡалған бүре кешеләре
Майя – башҡорт ғөрөф-ғәҙәттәре
Майяларҙың үҫемлек календарҙары
Көньяҡ Америка “бүре”ләре
“Оҙон ҡолаҡ бүре”ләр – Көньяҡ Америкала
“Бүре” бабаларҙың көнкүреш хәле, рухи донъяһы
Кечуа телендә һаҡланған башҡорт һүҙҙәре